ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

27-4 февраль - март (шаҡай - буранай)

2016

№9 (687)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәшәйешебеҙ...**

яҡшы яҡҡа тарта



4

**"Шул тел менән тыуҙым, үҫтем, торам бөгөн дә..."**



Ошо ҡағиҙәнең бала күңеленә һалыныуы мотлаҡ

8-9

**Һағыныу хисе...**



йырҙарымды моңһоу итә

11

**Миҙал ике яҡлы:**



береһе яҡшы, икенсеһе ҡапма-ҡаршы

12-13

**ТВ-программа** 14

***Яҡшылыҡ менән яманлыҡ бер булмаҫ. Яманлыҡты игелегең менән баҫ. Ул саҡта һинең дошман күреп йөрөгән кешең дә дуҫың кеүек яҡын була башлар, арағыҙҙа дошманлыҡ бөтөр, дуҫ булып ҡалырһығыҙ. Был сифаттар сабыр кешеләргә бирелә.***

***"Мосолман шәхесе" китабынан.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә туған телдә һөйләшәләрме?

***Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА, ике бала әсәһе:*** Беҙ йәшәгән Иглиндә башҡорттарға ҡарағанда урыҫ, татар халҡы күберәк, шуға ла өйҙә лә, күрше-тирә балалар менән дә тик башҡортса ғына һөйләшеп йөрөгән ҡыҙыбыҙ Сафияға ҡарап, күптәр: "Баҡсаға бирһәгеҙ, балағыҙға ҡыйын булыр, русса ла өйрәтегеҙ", - тип кәңәш бирәләр ине. Шөкөр, йәше еткәс, балалар баҡсаһына ла барҙы ҡыҙыбыҙ, әммә, бәхеткә күрә, ул да, беҙ ҙә бер ниндәй ҡыйынлыҡ, уңайһыҙлыҡ кисермәнек. Башҡортса нисек тәбиғи рәүештә теле асылһа, руссаға ла бик еңел өйрәнде. Ҡыҙыбыҙға 4 йәш, хәҙер ул ике телдә лә бик матур һөйләшә, фекерләй белә. Күп тел белгәндәр рухи йәһәттән бай була, тиҙәр. Минең ҡыҙым да шулайға оҡшаған. Бик тиҙ отоп ала, хәтере яҡшы. Баҡса байрамдарында һәр ваҡыт башҡортса шиғыр һөйләй. "Урал батыр" эпосынан 24 юлды ятҡа белә. Шул түгелме ни хазина! Шуға ла ата-әсәләргә әйткем килә: теләһә ниндәй уйҙырмаларға бирелеп, балам русса белмәй ҡуйыр, тип ҡурҡып, кескәйҙәрегеҙҙе әсә теле ырыҫынан мәхрүм итә күрмәгеҙ! Үҙегеҙҙән дә яҡшыраҡ һөйләшәсәк әле ул русса ла! Баланы теге йәки был телгә өйрәтәм, тип тә маташмағыҙ, бары тик үҙегеҙ ихлас әңгәмәсе булығыҙ, үҙе хәреф таный башлағансы башҡортса әкиәттәр, шиғырҙар уҡығыҙ, йырҙар өйрәтегеҙ, йомаҡтар ҡойоғоҙ - һөҙөмтәһен үҙегеҙ күрерһегеҙ. Һәр хәлдә, беҙҙең алда, ғаиләлә баланы нисек үҙ теленә өйрәтергә, тигән һорау торманы. Ә бына башҡорт мәктәбе йәки баҡсаһы булмаған ерҙә бала рус телле балалар учреждениеһына йөрөргә мәжбүр булған осраҡта уның үҙ теленә артабанғы мөнәсәбәте күп йәһәттән ундағы уҡытыусылар һәм тәрбиәселәрҙең толерантлығына, аңлылығына, мәҙәнилегенә лә бәйле буласаҡ. Был йәһәттән Сафиябыҙ йөрөгән баҡсанан уңдыҡ, унда баланы үҙ телен белеүҙә бер кем дә ғәйепләмәй. Киреһенсә, әйтеп киттем инде: оялып-нитеп тормай, үҙен иркен тотоп, башҡортса сатнатып шиғырҙар һөйләй бәләкәсебеҙ: йәш ярымлыҡ һеңлеһенә бына тигән апай һәм серҙәш буласаҡ, Алла бирһә, тип ҡыуанам.

***Фәтиха МӨХӘМӘТОВА, хеҙмәткәр:*** Өйҙә фәҡәт туған телдә генә һөйләшәбеҙ. Башҡорт була тороп, үҙендекеләр менән урыҫса һөйләшеүҙе мин ҡабул итә алмайым, ҡыланыу, үҙ асылыңды һанламау, тип аңлайым. Унан ғына ла түгел, әлбиттә. Шөкөр, күп йылдар инде башҡортса баҫмаларыбыҙҙың береһендә эшләгәнлектән, коллективта ла фәҡәт үҙ телебеҙҙә аралашабыҙ, был минең аңға ла, ҡанға ла һеңгән. Быны мин өлөшөмә төшкән ҙур бәхет тип иҫәпләйем һәм ҡыуанып бөтә алмайым. Юғиһә, ғүмер буйы аэропортта эшләгән ирем, мең кеше араһында өс бөртөк кенә башҡортбоҙ, тип бошоноп ҡуя торғайны. Эштә уға ғүмер буйы русса аралашырға тура килһә лә, өйҙә шулай уҡ матур итеп үҙ телебеҙгә күсеп китер ине. Ҡыҙыбыҙ ҙа бәләкәйҙән туған телмәр тыңлап, башҡортса ТВ каналы тапшырыуҙарын ҡарап, радио тыңлап, әсә теленә ихтирам тойғоһо менән үҫте. Бәхетебеҙгә, башҡорт мәктәбендә уҡырға мөмкинлек булды. Алыҫыраҡ булһа ла, йәйәү йөрөнө. Теле асылыр-асылмаҫтан уға мин башҡортса әкиәттәр уҡый инем инде. Аңлашылмаған урындарын йә уның өсөн әле таныш булмаған һүҙҙәрҙе төшөндөрә барам. Йәй өләсәһе, ҡартатаһы, башҡа туғандар ҙа баламдың оҫта итеп башҡортса һөйләшеүенә һоҡланалар, маҡтайҙар ине. Күрәм: торған һайын баланың туған теленә ҡыҙыҡһыныуы арта бара. Ул үҙе йөҙләгән һорау менән күмеп ташлай хатта һине. Ана шул мәлдә уның һорауҙарын иғтибарһыҙ ҡалдырырға, ҡул һелтәп ҡуйырға һис ярамай. Ул бит тап ошо мәлдә үҙ милли мөхитендә логик фекерләргә өйрәнә башлай. Әкиәт батырҙарынан героик шәхестәребеҙгә күсеп, тора-бара тарихыбыҙға, әҙәбиәт һәм мәҙәниәтебеҙгә иғтибарын йүнәлтәһең баланың. Унан инде әкренләп тарихи ҡомартҡыларыбыҙ булған ер-һыу урындарына алып йөрөтәһең. Телебеҙгә, милләтебеҙгә, ата-бабаларыбыҙ еренә һөйөү шулай һалыналыр, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# РӘМИ ҺҮҘЕ ТИРӘЛӘЙ...

## уй-фекерҙәр беректе

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Халыҡ-ара туған телдәр һәм гимназияла үткән Р. Ғарипов көндәренә арнап, матур сара ойоштоtherолдо.**



Рәми Ғарипов исемендәге премия лауреаттары.

12+

**(Дауамы 5-се биттә).**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ДӘРӘЖӘБЕҘҘЕ БЕЛӘЙЕК!

***Людвиг ШАБАНОВ, БР-ҙың атҡаҙанған химигы, хеҙмәт ветераны:*** Ҡөрьәндә, Аллаһы Тәғәлә әҙәм затын төрлө милләтле, төрлө ҡәбиләләр итеп яралтҡан, тип әйтелә. Был, халыҡтар бер-береһе менән ярышып, хәҡиҡәтте тапһын өсөн эшләнгән, тиелә. Шуға ла халыҡтар быуаттар дауамында бер-береһенән уҙҙырырға тырышып хәҡиҡәт эҙләй, был донъяға килеүенең, йәшәүенең сәбәбен, маҡсатын белергә ынтыла. Ә нимә һуң ул хәҡиҡәт, ниңә уны табырға кәрәк? Был һорауҙы Ғайса бәйғәмбәргә апостолдары ла биргән. Бәйғәмбәр, хәҡиҡәттең асылы - азатлыҡ, тигән.

Ысынлап та, халыҡтар өсөн азатлыҡтан да ҡиммәтерәк нәмә юҡ. Халҡыма мин ошо бәйғәмбәрҙәр васыят итеп ҡалдырған азатлыҡты теләр инем. Сөнки башҡорт халҡы затлы балыҡ һымаҡ, болғансыҡ быуа һыуында йәшәй алмай, тонсоға. Беҙҙең халыҡ һәр ваҡыт көслө ағын һыуҙа, таҙа йылғала ғына йәшәүҙе үҙһенә. Нисек итеп киренән киң "дарья һыуына" юл асырға? Рух азатлығын ҡайтарып ҡына өлгәшеп була быға. Был дәрәжә һаҡлау, үҙенде халҡындың лайыҡлы улы һәм ҡыҙы итеп тойоу кимәленә күтәрелеүҙе аңлата булыр.

Былтыр Польша Сеймының элекке етәксеһе Радослав Сикорский бер интервьюһында, поляк халҡына абруй етмәй, тип үкенес белдергәйне. Үҙ дәрәжәнде белеү, башҡалар алдында бәҫеңде төшөрмәү азат кешенең бик мөһим сифаттарының береһе. Бына борон беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ниндәй ирекле йәшәгән, һәр башҡорт үҙен кенәз һымаҡ тотҡан, өҫтөнән етәкселек итеүгә лә түҙеп тормаған, ялағайланмаған. Улар үҙҙәренең дәрәжәһен белгән, ғорурлығы булған. Кешелә шул тойғолар ҡалмай икән, ҡоллоҡ ҡына тороп ҡала. Ҡолдарға хас сифаттарға эйә кешегә ҡарата башҡаларҙың мөнәсәбәте лә ниндәй булыуы билдәле. Бөгөн быны аҡса миҫалында ла аңлатырға мөмкин. Рәсәй һумы, доллар һәм евро валюталары бер-береһенә ҡарата төрлө ҡиммәткә эйә. Уларҙың үҙҡиммәте хөкүмәттең алтын байлығына ҡарап билдәләнә. Хөкүмәт ҡаҙнаһында алтын әҙ икән, тимәк, аҡсаның да дәрәжәһе түбән. Халыҡтың абруйлы шәхестәре әҙ булһа, уның яҙмышы Рәсәй һумының хәлен ҡабатлай. Хаҡы булмағандың ҡиммәте лә юҡ. Аҡса осрағында үҙкиммәт тип әйтәбеҙ, кешеләр тураһында әйткәндә абруй һүҙе тап килә - шул сифаттарға эйә булмаһаң, берәү ҙә һинең менән иҫәпләшмәйәсәк. Башҡорт үҙенең дәрәжәһен белгән саҡта ғына башҡалар уның менән иҫәпләшә башлар. Халҡыбыҙ артабан үҫешһен, азат булһын, милләт булараҡ һаҡланып ҡалһын өсөн абруйлы шәхестәребеҙ, арҡа терәр милләттәштәребеҙ булыуы шарт. Һәр башҡорт башҡа милләттәр алдында абруй яулап, эргәһендәге милләттәшенә арҡаҙаш булһын!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙҙең ғаиләлә туған телдә һөйләшәләрме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Азамат БАТТАЛОВ, йәш белгес:*** Кемделер, айырыуса йәштәрҙе теге йәки был телде яраттырырға өйрәтеп йә мәжбүр итеп булмай, минеңсә. Бөгөн беҙ һайлау иреклеге заманында йәшәйбеҙ. Шулай булғас, һәр йәш кеше үҙе теләгән телдә аралашыуҙы өҫтөн күрә. Бигерәк тә ҡалала тыуып үҫкән йәштәр шулай уйлай. Бер ғаиләне яҡындан беләм. Атаәсәһе башҡорттар, икеһе лә ауылдан сыҡҡан, Өфөлә төпләнеп, ғаилә ҡорғандар. Шуларҙың өс балаһы ла башҡорт телен белмәй, өйҙәрендә лә, уҡыған ерҙәрендә иһә - күптән һәм шулай уҡ иптәштәре менән дә, хатта ауылда йәшәгән ҡартаталары менән өләсәләренә барғанда ла тик русса ғына һөйләшәләр. Яҡын-тирәлә башҡорт мәктәбе булмағанлыҡтан, рус мәктәбендә уҡыйҙар. Ике өлкәне хәҙер вузда белем ала. Башҡорт теле беҙгә нимәгә кәрәк, тип фекер йөрөтә улар. Ғаилә башлыҡтарын да был мәсьәлә әллә ни борсомай. Ә инде һирәк-мирәк ауылға ҡайтҡанда был турала өлкәндәрҙең ризаһыҙлыҡ белдереүе ҡалаға кире ҡайтып киткәс тә онотола. Күрәһең, был ғаилә башлыҡтары әллә аңлы рәүештә, әллә наҙанлыҡтарынан сығып, ҡалала башҡорт телен белеү кәрәк түгел, тип һеңдергән балалары аңына. Ә бит дөрөҫөн әйткәндә, туған телеңдән, милләтеңдән оялыу тигән комплекс бөттө ул, минеңсә. Тик бына ошо мөҙҙәтте йәштәр мәнфәғәтендә файҙалана белеү кәрәк. Өгөт-нәсихәт юлы менән түгел иллә мәгәр. Йәштәргә бөгөн үҙ милләте менән ғорурланыу тойғоһо етмәй. Тарих - тарихта ҡалған, ти уларҙың күбеһе. Заман геройҙары кәрәк. Бөгөн үҙ милләтең менән ғорурланып йәшәр өсөн илебеҙ йә донъя кимәлендә танылыу алған, оло ҡаҙаныштарға өлгәшкән, башҡорт исемен донъяға танытҡан талантлы шәхестәребеҙ булһын ине, тигән уйҙамын мин дә. Уның ҡарауы, әлегә беҙ интернетта рәхәтләнеп башҡортса "Бәйләнештә" аралашыу мөмкинлегенә эйәбеҙ. Windows компанияһы башҡорт телен файҙаланыуға индерҙе. Йәштәр араһында был туған телебеҙҙе популярлаштырыуға ҙур аҙымдарҙың береһе булды, тип иҫәпләйем. Ана шундай реаль эштәр күберәк булһын ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 февралдән 31 мартҡа тиклем "Киске Өфө" гәзитенә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс - 50665) яҙылыу иғлан ителде. Почтала абонемент йәшниге булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала.**




• Февралдә 2016 йылдың икенсе яртыйыллығына "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләкле булыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Өс кеше бәхетенә **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап эләгәсәк, тип вәғәҙә итәбеҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атайәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 438 һумға яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

• Әйткәндәй, гәзитебеҙгә беренсе ярты йылға яҙылып өлгөрмәгәндәр марттың 20-нә тиклем яҙылһа, уны апрелдән **(3 айға - 272 һум 88 тин)** алдыра башлаясаҡ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рөстәм Хәмитов республика властары "Башнефть" акционерҙар нефть компанияһының 25 процент плюс 1 акцияһын Башҡортостан милкендә ҡалдырыу яҡлы булыуын белдерҙе. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың фекере менән килешәм, тип белдерҙе нефть компанияһы президенты Александр Корсик. Уның һүҙҙәренсә, хәҙер акциялар пакетын һатыу дөрөҫ түгел, сөнки ул төбәккә дивидендтар рәүешендә даими аҡса ағымын гарантиялай.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов граждандарҙы ҡабул итте. Ике сәғәтлек аралашыу барышында республика етәксеһенә бер нисә ҡала һәм районда йәшәүсе кешеләр мөрәжәғәт итте. Ҡабул итеү йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Хөкүмәтенә, республика министрлыҡтары һәм ведомстволарына тейешле күрһәтмәләр бирелде.

✓Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Фән буйынса совет ултырышын үткәрҙе. Унда Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәген үҙгәртеп ҡороу һәм Башҡортостандың технологик башланғысын ғәмәлгә ашырыу мәсьәләләре тикшерелде. Республика етәксеһе билдәләүенсә, Совет властың, ғилми берләшмәнең һәм эшҡыуарлыҡтың үҙ-ара эш итеүен координациялау, конструктив ҡарарҙар әҙерләү өсөн булдырылған.

✓Өфөлә технополистың беренсе корпусы Башҡорт дәүләт университеты майҙандарында булдырыла. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Фән буйынса Совет ултырышы йомғаҡтары буйынса хәбәр итте. Өфө дәүләт нефть техник университеты ла үҙенең биләмәһендә технополис бүлеген урынлаштырыу мөмкинлеген ҡарай. Республика Башлығы фән менән етештереү араһында өҙөклөктө бөтөрөү өсөн технополисты тиҙерәк сафҡа индерергә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓Республиканың Милли музейында күренекле дәүләт эшмәкәре, легендар комбриг Муса Мортазиндың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған түңәрәк ҡор үтте. Унда ҡатнашыусылар 1921-1922 йылдарҙа Стәрлетамаҡта Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты урынлашҡан бинала Муса Мортазинға мемориаль таҡтаташ ҡуйырға, геройға бағышланған фильм төшөрөргә, фотоальбом сығарырға, Өфөлә һәм уның тыуған яғы Учалы районында һәйкәл асырға тигән тәҡдим индерҙе.

***✓ Ике тел белгән баланы дәртләндерергә, был йүнәлештәге эшен юғары баһаларға кәрәк. Өҫтәүенә, ике теллелек уны төрлө ҡатмарлыҡтар алдында юғалып ҡалмауға, зиһененең һығылмалы була алыуына ла килтерә.***



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ТУҒАН ТЕЛ...

## киң донъяға асҡыс ул



**Был мәҡәләлә ҡуҙғатыласаҡ тема "Киске Өфө" гәзитендә бер ни тиклем яҡтыртылғайны инде. Интернетта ла фекер алышыу булды. Шуға ҡарамаҫтан, гәзит аша ла үҙ фекеремде белдерергә ҡарар иттем.**

Һуңғы 20-25 йылда, заман башҡа - заң башҡа, тип һөйләргә күнегеп киттек. Ысынлап та, глобаль үҙгәрештәр матди мөхитебеҙгә генә түгел, ә сәйәсәт, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт, уҡытыу-тәрбиә өлкәһенә лә ҡағылды. Рәми Ғарипов әйткәнсә, "йөрәгендә халҡын йөрөткән" һәр башҡорт үҙ балаһының туған тел мөхитендә үҫеүен, быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргәсә килеп еткән халыҡ педагогикаһы принциптарын сабый сағынан күңеленә һеңдереүен теләй. Бының өсөн республикабыҙҙа байтаҡ эш башҡарылған: башҡорт балалар баҡсалары йәиһә төркөмдәре, башҡорт гимназиялары бар. Тәү ҡарашҡа, бөтәһе лә ал да гөл кеүек. Әммә туған телде һаҡлау, уны бар тулылығында үҙ балаңа тапшырыу йәһәтенән ярайһы уҡ ҡатмарлы проблемалар ҙа бар. Мәҫәлән, туған телдә аралашҡан башҡорт балаһы 3 йәштәр тирәһендә, ғаилә мөхитенән сығып, балалар баҡсаһына бара һәм медицина-педагогия комиссияһы ағзалары алдына баҫа. Бына шунда "метаморфозалар" башлана ла инде. Туған телен генә белгән балаға психологтар "телмәр үҫешендә тотҡарлыҡ" (задержка речевого развития) тигән диагноз ҡуя. Ата-әсә өсөн был боҙло һыуға сумыу менән бер. Был осраҡта башҡорт теленең республикабыҙҙа дәүләт теле тип законлаштырылыуы бөтөнләй һанға һуғылмай, тип ҡабул итергә кәрәк. Нилектән психологтар баланың туған телендә иркен һөйләшеүен иҫәпкә алмай?

Ә бала бит бер-ике аҙна эсендә, иптәштәре менән бергә уйнаған арала, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ рус телмәрен үҙләштерә. Сөнки, ғалимдар әйтеүенсә, бала 3 йәшкә тиклем донъяны танып белеү менән мәшғүл, шуға күрә сит тел мөхитенә инеүҙе лә ул ғәҙәти күренеш тип ҡабул итә. Тик ҡайһы бер өндәрҙе икенсе төрләрәк әйтә, шуға ла уны логопедҡа йөрөтөргә ҡушалар. Бында ла туған телде белеү иҫәпкә алынмай. Баланан тик рус телендә генә аралашыу талап ителә! Ғәжәп бит! 3-4 йәшлек кенә баланың мейеһенә туған телде онотторорға йүнәлдерелгән психологик баҫым яһала. Өҫтәүенә, ата-әсәгә лә: "Разговаривайте только на русском!" - тигән талап ҡуйыла. Был ҡәтғи талапҡа буйһонорға ғына ҡала.

Яңы технологиялар тормошобоҙға көнләп түгел, сәғәтләп инә. Бер нисә тел белеү, был телдәрҙә иркен аралашыу заман талабына әйләнде. Шуға ярашлы, тел өйрәнеүҙә лә яңы алымдар талап ителә. Улар, әлбиттә, барҙыр. Бына ҡайҙа ғалим-психологтар өсөн йөҙөп эшләй торған даирә.

Телмәрендәге һаҡаулыҡты бөтөрөү өсөн дә туған телде онотоу мотлаҡ икән! Әлегә логопедтар, ниндәй милләттән булыуҙарына ҡарамаҫтан, бала телмәрендәге был етешһеҙлекте бөтөрөүҙә тик рус теле нигеҙендә булдырылған методиканы ҡуллана. Шулай итеп, туған өндәр, бер ыңғайҙан туған тел дә онотолоуға дусар була. Инглиз, немец һәм башҡа телдәрҙе үҙләштергәндә, рус телен онот, тигән талап ҡуйылмай түгелме һуң? Ә ниңә башҡорт телен онотторо мотлаҡ икән. Бәлки, тел белгестәре ошо һорауға яуап бирә алыр?

Телевизорҙан йәки интернеттан кемделер "донъя кешеһе" ("человек мира") тип атауҙы йыш ишетәбеҙ. Әгәр ҙә башҡорт балаһының "донъя кешеһе" булыуын теләһәк (ә ул тап шулай булырға тейеш), логопедтан туған телде онотормай, баланың ике тел өндәренең дә дөрөҫ әйтелешен өйрәтеүен талап итергә хаҡлыбыҙ. Әгәр шулай эшләнһә, башҡорт балаһының күңеленә ике тел мөхите лә берҙәй яҡын буласаҡ: береһе - уның ғаилә теле, икенсеһе дуҫтары, күршеләре, ғөмүмән, йәмғиәтебеҙҙәге рус һәм башҡа милләт вәкилдәре менән менән аралашыу теле. Ике тел белгән баланы дәртләндерергә, был йүнәлештәге эшен юғары баһаларға кәрәк. Өҫтәүенә, ике теллелек уны төрлө ҡатмарлыҡтар алдында юғалып ҡалмауға, зиһененең һығылмалы була алыуына ла килтерә. Ул планетабыҙҙың теләһә ниндәй төбәгендә лә үҙен иркен, өйөндәге кеүек тояса́ҡ. Беҙ, ата-әсәләр, балаларыбыҙҙың ошондай булыуҙарын теләйбеҙ ҙә инде!

Бындай балаларҙы илебеҙҙә киң танылған полиглот Дмитрий Петров билингваль бала тип атай һәм "бала саҡта кеше ни тиклем күберәк тел өйрәнһә, үҫә килә уға башҡа телдәрҙе өйрәнеү бермә-бер еңелерәк буласаҡ. Әгәр ҙә ике теллелек йәки өс теллелек бала өсөн тәбиғи булһа, ул ниндәй генә тел мөхитенә, шулай уҡ ниндәй генә тормош ҡатмарлыҡтарына барып эләкһә лә, юғалып ҡалмаясаҡ", тип раҫлай.

Күптәргә гәзит битендә күтәрелгән тема үтә лә ябай, үтә лә бер ҡатлы булып тойолор, бәлки. Әммә был тәү ҡарашҡа ғына. Тел, милләт бәҫен күтәргән рухи аманатты бөгөн бик әүҙемләшеп киткән ағинәйҙәребеҙ, тура һүҙен ярып әйтә белгән аҡһаҡалдарыбыҙ сая, белемле йәштәребеҙгә түкмәй-сәсмәй тапшырырға тейеш. Ә был рухи аманат, шул иҫәптән туған тел, бишектә ятҡан сабыйҙарыбыҙҙың беренсе аҙымдарының хәүефһеҙ булыуын тәьмин итәсәк. Шуны аңлаһын ине һәр ата-әсә.

**Хаят ЙОСОПОВА.**
**Ишембай ҡалаһы.**

*Аһ-Аһ!*




# УРЛАШҠАНДЫ ЛА...

## шулай тикшермәйҙәр!

**Утыҙ һигеҙ йыл мәктәптә эшләгән дәүерҙә егерме йылға яҡын уҡытыу-тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары вазифаһын башҡарырға тура килде. Шул йылдар эсендә халыҡ мәғарифы ниндәй генә үҙгәрештәр кисермәне. Һуңғыһы - Берҙәм дәүләт имтихандары.**

Мин фекерҙәремде бер кемгә лә көсләп таҡмайым, үҙ ҡарашымды ғына яҙам. БДИ-ға әҙерләнеү, бәлки, уҡытыусыла, уҡыусыла бер ни тиклем яуаплылыҡ арттыралыр. Имтихан һөҙөмтәләре менән эшсе, крәҫтиән балалары иң яҡшы тип һаналған юғары уҡыу йорттарына уҡырға керә ала бит. Тик миҙалдың икенсе яғы ла бар бит әле. БДИ башланыр-башланмаҫтан мәктәптәргә әллә күпме видеокамералар ҡуйып сығалар. Имтихан ваҡытында баланы бер мәктәптән икенсе мәктәптәргә күсереп йөрөтөүҙәр, видеокамералар, күҙәтеп йөрөүселәр, телефон эҙләүсе приборҙар менән һәр береһен тикшереп индереүҙәр уҡыусының психикаһына бик насар тәьҫир итә. Бер генә урлашып тотолған кешене лә шулай тикшермәйҙәрҙер ул.

Бөтә ғүмерен балаларҙы тәрбиәләүгә, уҡытыуға бағышлаған уҡытыусыға, бына-бына оло тормош юлына аяҡ баҫырға йыйынған уҡыусыға мәктәп эскәмйәһенән үк ышанмаусанлыҡ күрһәтеү, кәмһетеп ҡарау кеүек күрәм мин был сараларҙы. Уҡытыусы менән уҡыусы араһында элекке кеүек йылы, йәнле аралашыу бөтөп барған һымаҡ, улар тик БДИ телендә генә һөйләшкән кеүек тойола.

Һуңғы йылдарҙа уҡытыусыны отчеттар, документациялар менән күмделәр. Тәрбиәүи эштәргә уҡытыусының ваҡыты ҡаламы икән? Ҡағыҙ эше менән генә уҡытыусының бөтә эшен баһалап буламы һуң? Уның хеҙмәтенең емеше әллә нисәмә йылдар дауамында ғына күренә бит. Халыҡ менән аралашыуға ла уҡытыусының ваҡыты ҡалмай. Элек директорҙар: "Ата-әсәләр алдында йылына бер-ике тапҡыр ғына булһа ла сығыш яһарға тейешһегеҙ, һеҙ уларҙың балалары менән эшләйһегеҙ бит", тип, беҙгә концерт номерҙары йә берәй спектакль әҙерләргә ҡушырҙар ине. Әртис булмаһаҡ та, ата-әсәләр сығыштарыбыҙҙы яратып ҡарай торғайны, аҙаҡ әллә ни тиклем ваҡыт һөйләп йөрөрҙәр ине. Ул замандарҙа ҡайҙа уҡытыусылар коллективы һәйбәт эшләй, шул ауылда тәртип тә яҡшы булып иҫәпләнде. Ә хәҙер... Уҡытыусылар өҫтән төшөрөлгән реформаларҙы өйрәнеү, уларға ҡулайлашыу, ярақлашыу хәстәрен хәстәрләй. Ата-әсә иһә балаһының БДИ-һын уйлай. Ә баланың әҙәбе, әхлағы тураһында кем ҡайғыртырға тейеш инде?

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2016 йылдың 1 ғинуарына Өфөлә халыҡ һаны 1 миллион 120 мең кеше тәшкил иткән. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса былтыр 18 мең 111 бала тыуған. 20 февралдә ҡала Советының сираттағы ултырышында ошондай мәғлүмәт яңғыраны. Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, халыҡтың тәбиғи үҫеше 5209 кеше тәшкил иткән. 2008 йылдан алып республиканың баш ҡалаһында ошондай ыңғай тенденция һаҡлана.

✓2015 йылда Өфө ҡалаһы алданған өлөшсөләр проблемаһын хәл итеү буйынса бурысты үтәне. Ҡала Советы ултырышында баш ҡала мэры Ирек Ялалов ошо хаҡта хәбәр итте. Биш йыл элек булдырылған 19 проблемалы йорт реестрынан һуңғы биналар сафҡа индерелгән. Алданған өлөшсөләргә бөтәһе дөйөм майҙаны 210 мең квадрат метрлыҡ 3 745 фатир тапшырылған. Хәҙер ҡаланың картаһында яңы проблемалы нөктәләрҙең барлыҡҡа килеүенә юл ҡуймау бурысы тора. Ошо маҡсатта Өфөлә интернет-ресурс әҙерләнгән.

✓Былтыр Өфөләге ҙур һәм урта предприятиеларҙа уртаса айлыҡ хеҙмәт хаҡы 2014 йыл менән сағыштырғанда ике процентҡа артҡан һәм 35 665 һум тәшкил иткән. Был миллионлы ҡалалар араһында дәүмәле буйынса алтынсы күрһәткес. 20 февралдә Өфө ҡалаһы округы Советының сираттағы ултырышында баш ҡала мэры Ирек Ялалов ошо хаҡта хәбәр итте.

✓Ҡытайҙа Халыҡ-ара интеллектуаль спорт ассоциацияһы тарафынан ойошторолған Бөтә донъя интеллектуаль уйындары башланды. Биш төрҙө (бридж, го, сянци, шахмат, шашка) үҙ эсенә алған Уйындарҙа Башҡортостандан биш спортсы - туғыҙ тапҡыр донъя чемпионы Александр Георгиев, биш тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина, донъя чемпионы Мурадулло Амриллаев, тиҙ уйнала торған шашка буйынса донъя чемпионы Айнур Шәйбәков һәм үҫмерҙәр араһында шашка буйынса донъя чемпионы Айгөл Иҙрисова ҡатнаша.

✓Боҙҙағы мотоуҙыш буйынса Европа чемпионаты Башҡортостан өсөн еңеү менән тамамланды. Күп тапҡыр донъя һәм Рәсәй чемпионы Николай Красников Европа чемпионы исеменә лайыҡ булды. Юниорҙар араһында Стәрлетамаҡтан быйылғы Рәсәй чемпионы Дмитрий Солянников та финалдың икенсе көнөндә уңышлы сығыш яһаны. Ул көмөш миҙал яуланы. Өсөнсө урында - Австриянан Харальд Симон.

## ЕТЕ РАЙОН

**Дим районы.** 24 февралдә Дим станцияһында реконструкциянан һуң ҡала яңы пассажир платформаһы асылды. Был проектты тормошҡа ашырыуға "Рәсәй тимер юлдары" асыҡ акционерҙар йәмғиәте 55 миллион һумлыҡ инвестиция йәлеп иткән. Яңы платформаның оҙонлоғо 248 метр, ул заманса йыһазландырылған һәм көнөнә 5 мең пассажирҙы хеҙмәтләндереү ҡеүәтенә эйә.

**Киров районы.** Ә.-З. Вәлиди исемендәге Милли китапхана шағирҙар, яҙыусылар, республиканың ижади шәхестәре ҡатнашлығында онлайн-орашыуҙар серияһын башлай. Әлеге ваҡытта был проектта 12 райондың китапханаһы һәм мәҙәниәт усағы ҡатнашырға әҙерлеген белдергән. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Гөлфиә Юнысова һәм Марат Кәримов менән тәүге осрашыу үтте лә инде.

**Совет районы.** Тотош республика буйынса " "Аныҡ эштәр" көнө уҙҙы. Совет районы был көндә халыҡ һәм балалар ҡатнашлығында байрам саралары ойошторҙо. Былтыр башланған проект төбәктең инфраструктураһын үҫтереүгә бер этәргес булып тора. Бөгөнгә уны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә мәктәптәр, балалар баҡсалары, ауыл мәҙәниәт усаҡтары ремонтланған, һыу торбалары үткәрелгән, балалар, спорт майҙансыҡтары эшләнгән һ.б. Былтыр районда ошо проектты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә 15 балалар уйын майҙансығы төҙөлгән, 1 хоккей ҡумтаһы эшләнгән һ.б.

**Ленин районы.** Урицкий, 32 адресы буйынса урынлашҡан спорт майҙансығында Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған урам футболы буйынса турнир уҙғарылды. Көсөргәнешле ярышта "Тау" командаһы еңеүсе исемен яуланы.

**Октябрь районы.** Районда хоккей буйынса "Алтын шайба - 2016" турниры тамамланды. Ул балалар, үҫмерҙәр, йәштәр араһында сәләмәт тормош рәүешен пропагандалау, хоккей уйынын популярлаштырыу маҡсатынан ойошторола. Ике йәш категорияһында барған ярыштарҙа "Сәләм" Балалар-үҫмерҙәр үҙәге командалары еңеү яуланы.

**Орджоникидзе районы.** Хәрби дан музейында өфөлө-шотланд рәссамы Дина Маккинстың күргәҙмәһе асылды. Уның эшенең үҙенсәлеге шунда, ул һүрәттәрен буяуҙар менән түгел, ә дары менән төшөрә, йәғни картиналарын ҡағыҙҙы яндырып эшләй. Сәнғәттең был йүнәлешендә ул Рәсәйҙә генә түгел, Европала ла беренсе булып тора.

**Калинин районы.** "Быуындар" йәштәр ойошмаһы 74-се мәктәптең үҙҙәре шефлыҡ иткән башланғыс мәктәп балалары өсөн "Зарница" уйынын үткәрҙе. Был көндә дүрт синыф дүрт отрядҡа ойошоп, һалдат кухняны менән танышты, Морзе әлифбаһын өйрәнде, тарихҡа сәйәхәт ҡылды.

### ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙӘШӘЙЕШЕБЕҘ...

## яҡшы яҡҡа тарта

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында Ирек Ялалов Өфө ҡала округы хакимиәтенең 2015 йылдағы эшмәкәрлеге тураһында отчет менән сығыш яһаны. Эшлекле сарала БР Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Хәбиб улы Мәрҙәнов ҡатнашты.**



Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, баш ҡала 2015 йылды яҡшы һөҙөмтәләр менән тамамлаған. Урында етештерелгән продукция, башҡарылған эштәр һәм хеҙмәттәр күләме 900 миллиард һумлыҡ булған. Был күрһәткес 2014 йыл менән сағыштырғанда 6 процентҡа юғарыраҡ. Сәнәғәт етештереү индексы 100,8 процент тәшкил иткән һәм был өлкәлә Өфө ҙур ҡалалар араһында юғары күрһәткескә өлгәшеүселәрҙең береһе булып тора.

Хакимиәт башлығы билдәләүенсә, инвесторҙар йәлеп итеү һәм төҙөлөш эштәре алып барыу оло мегаполистың мөһим ҡаҙанышы ул. 2015 йылда йәлеп ителгән инвестициялар дәүмәле 110 миллиард һумдан күберәк булмаҡсы. Әле ҡалала эшләп килеүсе 150 миллиард һумлыҡ 114 проект быларға нигеҙ буласаҡ та инде. Былтыр 825 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға индерелһә, шуларҙың өстән ике өлөшө инвесторҙар ярҙамы менән төҙөлгән. Был 2014 йылға ҡарағанда 10 процентҡа күберәк. Социаль программалар буйынса иһә 92 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған.

Хакимиәт башлығы ҡала бюджетын тулыландырыу тураһындағы мәсьәләгә туҡталып, бюджеттың үҙкилеменең 40 проценты физик шәхестәр түләгән һалымдарҙан тупланыуын билдәләне. Бюджет килемдәренең өстән бер өлөшө муниципаль мөлкәтте ҡулланыуҙан тупланыуын иҫәпкә алып, ерҙәрҙе ҡуртымға тапшырыу, ер биләмәләрен яңынан теркәү, ергә хоҡуҡты раҫлаусы документтарҙы тәртиптә тотоу буйынса контролләүсе эштәр башҡарылыуын да әйтеп үтте. Шулай итеп, 2015 йылда ҡала бюджетының үҙкилеме 11 миллиард 400 миллион һум тәшкил иткән. Субвенциялар һәм субсидияларҙы ҡушып, был һанды 22 миллиард 300 миллионға тиклем үҫтереүгә өлгәшелгән. Бында бюджетты тотоноуҙың һөҙөмтәлелеге буйынса үткәрелгән сараларҙы ла иҫәпкә алыу кәрәк. Былтыр махсус комиссияләр бөтә муниципаль предприятиеларҙың да финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеген ҡарап сыҡҡан. Тикшереү барышында төп акцент хеҙмәттәр тарификацияһы, сығымдарҙы оптималләштереү, тотонолмаған мөлкәтте реализациялау кеүек йүнәлештәргә яһалған.

Өфө халҡы йәшәйеше өсөн хәүефһеҙ мөхит булдырыу, экологик ситуацияны яҡшыртыу, юл инфраструктураларының сифатын күтәреү, ял һәм дауаланыу өсөн шарттар тыуҙырыу мәсьәләләре ҡала хакимиәте эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәренең береһе булып тора. Йыл һайын был йүнәлештәргә 9 миллиардҡа яҡын аҡса тотонола. Былтыр, мәҫәлән, 111 мең өфөлө йәшәү шарттарын яҡшырта алған, күп кенә ихаталарҙа төҙөкләндереү эштәре атҡарылған, спорт майҙансыҡтары, хоккей ҡумталары асылған. Иҫке йорттарҙан яңыларына күсенеү ҙә әүҙем алып барылған. Был маҡсатта 1 миллиард 400 миллион һум аҡса тотонолған. Йыл дауамында автомобиль юлдарын һәм яһалма ҡоролмалар төҙөү, төҙөкләндереү, реконструкциялау эштәре дауам иткән. Өфө-Аэропорт юлын магистраль кимәленә еткереү өсөн "Кооператив аҡлан", "Озерная", "Металлобаза" туҡталыштарында йәйәүлеләр өсөн юл өҫтө үткәүелдәре төҙөлгән. Граждандарҙың һорауы буйынса тағы ла ике үткәүел төҙөләсәк. Ҡала халҡы өсөн ял итеү урындары һаны арта бара. Мәҫәлән, Театр скверындағы "Ете ҡыҙ" һәм Беренсе май аллеяһындағы фонтандар көндән-көн күберәк халыҡты йәлеп итә. Шулай итеп, Өфө 2015 йылда өсөнсө тапҡыр Волга буйы федераль округының миллионлы ҡалалары араһында үткәрелгән халыҡтың тормош кимәлен күтәреү йүнәлешендәге смотр-конкурста беренсе урынды яулаған.

Ирек Ишмөхәмәт улы әйтеүенсә, халыҡты эсәр һыу менән тәьмин итеү, сүп-сар түгеүҙе яйға һалыу, ҡаланы йәшелләндереү һәм экологик мәҙәниәтте күтәреү мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бүленә. "Өфөһыуканалдары" предприятиеһы йыл ағымында һыу сифатын билдәләүгә 550-нән ашыу анализ үткәрә. Өфөләге һыу сифаты һәм хәүефһеҙлеге буйынса Рәсәй нормативтарына тура килә. Миллионлы ҡала булараҡ, сүп-сарҙы үтилләштереү мәсьәләһе лә оло әһәмиәткә эйә. Тәүлек эсендә ҡаланан 9 мең кубометр төрлө ҡый сығарып түгелә. Баш ҡаланың ҡулланыусылар базарында ла эштәр насарҙан түгел. Йыл әйләнәһенә унлап эре сауҙа һәм дөйөм туҡланыу урындары асылған. Әленән-әле үтеп торған ауыл хужалығы йәрминкәләре лә аҙыҡ-түлек хаҡтарының артыҡ күтәрелеп китмәүенә бер сәбәп булып тора.

Ирек Ишмөхәмәт улы үҙенең сығышында баш ҡалабыҙҙың бөтә өлкәләрендәге хәл-торошто ла телгә алып, башҡарылған эштәр күләмен бөтә кинлегендә байҡап сыҡты. Һәм, һүҙен йомғаҡлап, Өфө ҡала округы хакимиәтенең бар структуралары эше ҡаланың сәскә атыуына, халыҡтың йәшәйеше кимәлен күтәреүгә йүнәлдерелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

### ЙЫЛ МӘШӘҠӘТТӘРЕ

# ИҪӘПЛЕНЕҢ...

## иҫәбе теүәл

**Мәғлүм булыуынса, быйыл 1 июлдән 15 августҡа тиклем Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу үткәреләсәк. Ошо осорҙа транспорт үтеп инә алмаған территорияларҙа был сараны 15 сентябрҙән 15 ноябргәсә уҙғарыу күҙаллана. Мөһим кампанияға әҙерлек эштәре күптән башланып, әле лә туҡтағаны юҡ.**

Ошо көндәрҙә Федераль дәүләт статистикаһы хеҙмәтенең кинәйтелгән коллегияһында ла сараны ойоштороу һәм үткәреү мәсьәләләре ҡаралды. Үҙенең сығышында департамент етәксеһе Александр Суринов: "Яҡынса анализ халыҡтың ауыл хужа-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда бер нисә муниципалитет тышҡы рекламанан килемде икеләтә арттырыуға өлгәшкән. Былтыр Өфө, Ишембай, Әбйәлил, Стәрлетамаҡ райондары, Октябрьский һәм Салауат ҡалалары табышты 20 миллиондан 42 миллион һумға тиклем арттырған. Дөйөм алғанда, тышҡы реклама урындағы бюджеттарға 153 миллион һумдан ашыу аҡса килтергән.

✓Өфөнөң 21-се клиник дауаханаһы Рәсәйҙең иң яҡшы биш дәүләт медицина учреждениеһы иҫәбенә инде - ул рейтингта бишенсе урынды биләне, тип хәбәр итә Yell.ru баһалар һәм таҡдимдәр сервисы. Эксперттар ҡулланыусыларҙың баһаһы буйынса илебеҙ ҡалаларындағы дауаханалар һәм поликлиникалар рейтингын төҙөгән. Бөтәһе 65 ҡала һайлап алынған. Рейтингка 20-һе генә эләккән, әммә Мәскәүҙең медицина учреждениелары исемлектә юҡ.

✓Башҡортостан предприятиелары тирә-яҡ мөхиткә кире йоғонто өсөн түләү сифатында республика ҡаҙнаһына 400 миллион һумдан ашыу аҡса индергән, тип хәбәр итте йәмғиәтләү коллегияһында Росприроднадзор идаралығы етәксеһе Юрий Дудников. Тағы ла 100 миллион һум самаһы федераль бюджетҡа йүнәлтелгән. Предприятиелар ведомство дәүгәләре һәм бойороҡтары буйынса тәбиғәтте һаҡлау сараларын ғәмәлгә ашырыуға 3,4 млрд һум аҡса йүнәлткән.

✓Башҡортостанда Изге Валентин көнөнә альтернатива барлыҡҡа киләсәк. Стәрлетамаҡ башҡорттары ҡоролтайы "Етеғән" исемле яңы байрам булдырыу башланғысы менән сығыш яһаны. Уны яҙҙың тәүге көнөндә билдәләргә ниәтләйҙәр.

✓Башҡортостанда йыл һайын эшләүсе пенсионерҙарҙың һаны арта. Хаҡлы ялдағыларҙың күбеһе эшләүен дауам итә, уларҙың һаны йыл һайын арта бара. 2015 йылда 400 мең самаһы эшләүсе пенсионер иҫәпләнгән (дөйөм һандан 33 процент). Былтыр төбәктең мәшғүллек хеҙмәтенә ике меңдән ашыу пенсионер мөрәжәғәт иткән. Шуларҙың 1,5 меңе эшкә урынлаштырылған, 100-гә яҡын кеше һөнәри белем алыуға йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда "Минең документтарым" үҙәктәрендә өҫтәмә хеҙмәттәр алырға мөмкин. Өҫтәмә хеҙмәттәр нигеҙҙә ер участкаларын рәсмиләштереүгә, саҙаны ойоштороу хоҡуғына, төҙөлөшкә рөхсәт алыуға, күсемһеҙ милеккә хоҡуҡты теркәүгә, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына ярҙам итеүгә ҡағыла. Дәүләт пошлинаһын түләү осраҡтарынан башҡа хеҙмәттәр бушлай күрһәтелә.

✓ *Был ҡор оло быуын һәм кесе йәштәгеләр араһында бәйләнеш булдырған сараға әүерелде лә ҡуйҙы. Башҡорт халҡының киләсәген хәстәрләп бик күп эштәр эшләгән шәхестәребеҙҙең һәм рухлы балаларыбыҙҙың уй-фекерҙәре беректе.*



*АФАРИН!*



# РӘМИ ҺҮҘЕ ТИРӘЛӘЙ...

## уй-фекерҙәр беректе

**(Башы 1-се биттә).**

Халыҡ-ара туған телдәр көнөнә арналған түңәрәк ҡорҙа сығыш яһаусылар һәр башҡорт ғаиләһендә туған телдә һөйләшеү ғәҙәтен нығытыу, интернет селтәрендә башҡорт теле ҡулланылышын киңәйтеү, туған телебеҙҙе кино, театр сәнғәте, матбуғат саралары аша пропагандалау, изге йолаларыбыҙҙы һаҡлау тураһында һөйләне. Филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова, мәҫәлән, йәштәрҙең ғаилә ҡороу мәсьәләһен күтәреп, шулай тине: "Һәр халыҡтың үҙенең "матурлыҡ критерийы" термины бар. Башҡорт халыҡ йырҙарында, мәҫәлән, ҡуңыр күҙле, ҡара, оҙон толомло ҡыҙҙарҙың һылыулығы маҡтала. Башҡорт ғаиләһендә, башҡорт балалары уҡыған мәктәптәрҙә лә, балаларҙа матурлыҡ критерийҙарын үҙебеҙсә, дөрөҫ итеп тәрбиәләргә кәрәк. Шул саҡта башҡорт егете тик башҡорт ҡыҙына ғына өйләнер, ғаиләһендә лә башҡортса һөйләшерҙәр". Иң мөһиме, ғалимәнең был һүҙҙәрен уҡыусылар ҙа ҡеүәтләп ултырҙы, хатта улар бала менән биш йәшкә тиклем тик башҡортса ғына һөйләшергә кәрәк, тигән фекер еткерҙе. Ә бына М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның беренсе курс студенты Байрас Азаматов, ҡыҙҙар бәләкәй саҡта уҡ ҡурсаҡтарына Барби тип түгел, ә башҡорт исемдәре ҡушһа, өйҙәге эт һәм бесәйҙәргә лә Белка йә Шарик тип түгел, ә Аҡбай, Һороҡай тип үҙебеҙсә ҡушаматтар таҡһаҡ, сит исемдәр лөғәтебеҙҙән төшөп ҡалыр ине, тип ҡыҙыҡ ҡына фекер әйтеп ҡуйҙы. Хәйер, ҡыҙыҡ кеүек тойолһа лә, бик тә хаҡ фекер әйтте бит студент.

Артабан яҙыусы Гүзәл Ситдиҡова, шағирә Лариса Абдуллина, филология фәндәре кандидаты, доцент Фәнзил Санъяров, йәш режиссер Таңсулпан Бураҡаева, филология фәндәре докторы, профессор Әхмәт Сөләймәнов, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Рәйсә Күзбәкова, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева сығыш яһаны. Һүҙ кино сәнғәте тураһында сыҡҡас, уҡыусылар айырыуса йәнләнеп китте. Сит ил киноларын, йәнһүрәттәрен ҡарағас, сит ил ғәҙәттәрен үҙләштереү, көнбайыш мәҙәниәтенә ылығыу көслө. Шуға күрә, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре буйынса, үҙебеҙҙең тарихты, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе сағылдырған тулы метражлы фильмдар төшөрөү, балалар өсөн башҡорт халыҡ әкиәттәренә нигеҙләнеп, йәнһүрәттәр эшләү кәрәк, тигән тәҡдим индерҙе улар. "Сифатлы фильм төшөрөүгә бәйле финанс проблемаһын кино һөйөүселәрҙән аҡса йыйып та хәл итергә була. Бына бөгөн залда ултырыусылар бөтәһе лә фильм ҡарарға ярата, кәрәкле эш өсөн һәр беребеҙ йөҙ һум бирһәк тә, күпме аҡса йыйыласаҡ", - тине Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәсүл Билалов. Гүзәл Ситдиҡова анимацион йәнһүрәттәр төшөрөү менән ҡыҙыҡһыныусы, һүрәт төшөрөргә оҫталығы булған уҡыусыларға үҙаллы эшләп, проекттарын "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башҡорт балалары өсөн әкиәттәр" төркөмөнә урынлаштырып барырға тәҡдим итте. Ғөмүмән, был ҡор оло быуын һәм кесе йәштәгеләр араһында бәйләнеш булдырған сараға әүерелде лә ҡуйҙы. Башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, туған телен, киләсәген хәстәрләп бик күп эштәр эшләгән шәхестәребеҙҙең һәм рухлы балаларыбыҙҙың уй-фекерҙәре беректе.

Сара һуңында Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры Люциә Хәмитова филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдиноваға, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Артур Кәбировҡа, гимназия-интернаттың 11-се синыф уҡыусылары Зәриә Моратова менән Айзирә Шәйхетдиноваға Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов исемендәге премия тапшырҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сара һуңында М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актеры Артур Кәбировтан үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашыуҙы һорағас, ул: "Бөгөн был залға йыйылған кешеләр араһында Рәми рухына тоғро өлкән быуынды, Рәми эшен дауам итерҙәй йәш быуынды күреп шатландым", - тигәйне. Ғөмүмән, бөгөн Рәми Ғариповҡа арналған һәр сара ошондай һығымта яһата шул, тимәк, шағир исеме, уның әҫәрҙәре һәр йөрәккә изге ут яғып, һәр кемдә Айға үрләр көс-гәйрәт, рух уята. Тимәк, Рәми һүҙе йәшәй, йәшәйәсәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

---

лығы иҫәбен алыуға ыңғай ҡарашта булыуын күрһәтә", - тип белдерҙе.

Яңы тарихтағы ошо икенсе кампания илдең ауыл хужалығы торошо тураһындағы статистика мәғлүмәтен киңәйтергә мөмкинлек бирәсәк. Аныҡлап әйткәндә, был ауыл хужалығында яңы ысулдар ҡулланыу, кредиттар йәлеп итеү һәм уларҙы маҡсатҡа ярашлы ҡулланыуға ҡағыла.

Килеп тыуған иҡтисади көрсөк торошонда Росстат башлығы территориаль органдар етәкселәрен финанс тәртибен һаҡлауға айырым иғтибар бирергә саҡырҙы, сөнки ауыл хужалығы иҫәбе кампанияһын үткәреү өсөн автомобилдәр һатып алыу йәмғиәттә резонанс тыуҙырҙы. Был йәһәттән Александр Суринов Росстатта ойошторолған комиссияның тикшереүҙәр үткәрәсәген, уның һөҙөмтәләре нигеҙендә, кәрәк булһа, хеҙмәт тикшереүе уҙғарыласағын билдәләне. Бынан тыш, территориаль органдар етәкселәре йыл һуңында ауыл хужалығы иҫәбен алыу сметаһы иҫәбенә алынған автопаркты файҙаланыу тураһында отчет бирәсәк. Был автомобилдәр күсмә иҫәп алыу участкалары сифатында, барып етеү ауыр, халҡы аҙ булған урындарға иҫәп алыусыларҙы, перепись документтарын алып барыу, иҫәп алыусыларҙың уҡыуын ойоштороу, иҫәп алыуҙа ваҡытлыса эшләүселәрҙең эшен территориаль орган етәкселәре тарафынан тикшереүгә сығыу маҡсатында ғына файҙаланыла ала.

Заман технологиялары тормошобоҙҙоң барлыҡ тармаҡтарына үтеп ингән осорҙа йәшәгәнлектән, иҫәп алыусылар ҙа планшеттар ҡулланасаҡ. Мәғлүмәттәрҙе автоматлаштырылған эшкәртеү барышында улар ағымдағы отчеттар менән сағыштырыласаҡ. Был хаҡта Ауыл хужалығы һәм тирә-яҡ мөхит идаралығы етәксеһе Наталья Шашлова белдерҙе. "Тәү сиратта, перепись һөҙөмтәләре Ауыл хужалығын үҫтереү дәүләт программаһын, Аҙыҡ-түлек именлеге доктринаһын, Ауыл территорияларын тотороҡло үҫтереү программаһын тормошҡа ашырыуҙың мониторингын үткәргәндә файҙаланыласаҡ, - тине ул. - Шулай уҡ мәғлүмәттәр аграр сәйәсәтте формалаштырыу өсөн федераль башҡарма власть органдарына, бизнес йәмғиәтенә, ауыл хужалығы етештереүселәренә, ғилми-тикшеренеү йәмғәт ойошмаларына, шулай уҡ халыҡ-ара ойошмаларға сағыштырыу өсөн кәрәк буласаҡ".

Ил буйынса был мөһим кампанияға 40 мең самаһы иҫәп алыусы йәлеп ителәсәк. Улар махсус рәүештә уҡытылып, һуңынан тест һынауы үтәсәк.

---

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*




# ЖУРНАЛИСТАР...

## үҙ ҡамусын ижад итә

**Республикала "Башҡортостан журналистикаһы һәм матбуғаты" энциклопедияһы концепцияһы өҫтөндә эш башлана. Ул 2017 йылдағы ваҡиғаларға - башҡорт матбуғатының 100 йыллығына һәм Башҡортостан журналистарының ижади берләшмәһенең 60 йыллығына арналасаҡ.**

Республика матбуғатының тарихы төрлө ваҡиғаларға һәм сағыу исемдәргә бай. Баҫма тематик төбәк энциклопедияһына ҡараясаҡ. Унда башҡорт журналистикаһы үҫешенең тарихы сағылдырыласаҡ. Төрлө осорҙа сыҡҡан гәзит-журналдар, шул иҫәптән революция һәм совет осорондағы губерна баҫмалары, хәҙерге матбуғат, юғары уҡыу йорто, ғилми учреждение һәм предприятие, телерадиокомпания һәм студия баҫмалары инәсәк. Шулай уҡ тармаҡ өсөн кадрҙар әҙерләүсе уҡыу йорттары, республика полиграфия предприятиелары, элекке типографиялар, китап нәшриәттәре тураһындағы мәғлүмәт тә мөһим урын биләйәсәк.

Журналистарҙың билдәле критерийҙар буйынса һайлап алынған биографик мәҡәләләрен урынлаштырыу ҙа күҙ уңында тотола. Улар тармаҡтың үҫешенә ҙур өлөш индергән киң мәғлүмәт сараларын ойоштороусылар, ведомство етәкселәре, маҡтаулы исемгә эйә журналистар һәм мөхәррирҙәр, дәүләт, республика һәм тармаҡ премиялары лауреаттары, яҙыусы-журналистар, матбуғат тарихын тикшереүсе ғалимдар буласаҡ. Билдәле тележурналист Шәүрә Ғилманова, авторҙарҙың үҙҙәре хаҡында һөйләргә ваҡыт етте, тип иҫәпләй. Республика Журналистар союзында ғына 1,5 мең самаһы ағза иҫәпләнә. Уның фекеренсә, баҫманы әҙерләүҙә объективлыҡ һәм принципиаллек, йөкмәткене редакция эсендә тикшереү - иң мөһиме, сөнки китап киләсәк быуын өсөн сығарыла.

Рәсәйҙең бер нисә төбәгендә журналистар тураһында энциклопедиялар донъя күргән дә инде: 2013 йылда - Чебоксарҙа, 2014 йылда Саха (Яҡут) Республикаһының Журналистар союзы 55 йыллығына "Яҡутстан журналистары" баҫмаһын сығарҙы, 2015 йылда Удмуртияла "Удмурт дюнне" белешмәһе баҫылды. Шулай уҡ "Архангельск журналистары XX" энциклопедияһы (2014), "Сыуаш журналистикаһы һәм матбуғаты энциклопедияһы" бар. 2014 йылда "Рәсәй журналистары: 20-21 быуаттар" белешмә-энциклопедик баҫмаһы донъя күрҙе.

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Миокардит

❖ Миокардит - ул йөрәк мускулдары ревматизмынан, йоғошло ауырыуҙарҙан һуң күҙәтелә торған шешеү. Миокардитты дауалау һәм профилактикалау өсөн: ҡалаҡ ярым һары умырзая (адонис) сәскәләре һәм бөтнөк (мята) япраҡтарын, 1-әр ҡалаҡ фенхель, артыш (можжевельник) орлоҡтарын һәм арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләнен, 2-шәр ҡалаҡ бесәй үләне (валериана) тамырын һәм мәтрүшкә (душица) үләнен ит турағыстан үткәрергә. Йәки: 1-әр өлөш меңъяпраҡ (тысячелистник) үләне, артыш орлоғо, 2-шәр өлөш татлы тамыр (солодка) тамыры, еркәүек (лабазник) сәскәләре, аҡ сәскә (ромашка) сәскәләре, һары мәртүшкә (зверобой), һары умырзая тамыры, ҡуян кәбеҫтәһе (очиток) үләне, левзея тамыры, 3-әр өлөш арыҫлан ҡойроғо тамыры, бәпембә тамыры (одуванчик), мәтрүшкә тамыры, 4-әр өлөш һырлан (череда) үләне һәм ҡайын (береза) бөрөһө алына. Ике осраҡта ла 1 ҡалаҡ үлән ҡушылмаһына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә һәм 5 минут талғын утта ҡайнатырға, төнө буйы төнәтергә. Көн дауамында ашарҙан 30 минут алда 100-150 мл эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

## Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән

❖ 10 петрушка үҫентеһенә 1 литр ҡыҙыл ҡоро шарап ҡойорға. 1-2 ҡалаҡ йөҙөм һеркәһе (виноградный уксус) өҫтәргә һәм 10 минут ҡайнатырға. 300 грамм бал өҫтәп, тағы 4 минут ҡайнатырға. Һөҙөп, ҡара төҫтәге быяла һауытҡа һалып, ҡапҡас ябырға. Йөрәк ауыртҡанда көнөнә 1 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ эсергә.

❖ Инфаркт булмаһын тиһәгеҙ, көн һайын 1 әсе миндаль сәтләүегә ашағыҙ.

❖ Анар (гранат) һутын йышыраҡ эсергә кәрәк. Шулай уҡ балан, мышар ашарға, алма, кишер һуты эсергә һәм дөрөҫ туҡланырға тырышығыҙ.

❖ 10 грамм дегәнәк тамырын кистән термоста төнәтергә. Иртән һөҙөргә һәм 5 ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1,5-2 ай. 2 аҙна ял иткәндән һуң тағы ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Ҡыҙҙар, ир-егет әсәһен ҡарамаймы, нисә балаға алимент түләй, тип йыш белешә. Йәғни, беҙ ата-бабаларыбыҙ йәшәйешенән нык ситкә тайпылғанбыҙ. Борон ҡайны-ҡәйнәһен дә ҡарағандар, быны ауырлыҡ тип ҡабул да итмәгәндәр.*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КҮГӘРСЕН ЫРЫУЫ

**Баймаҡ районы бөрйәндәренән яҙып алынған "Ҡарт әсә" әкиәтендә артыҡ ауыҙ тип иҫәпләп, улы тереләй ергә күмергә теләгәндә әсә күгәрсенгә әйләнеп осоп китә. Йәғни, бында ла кешенең күгәрсенгә әүерелә алыуы һүрәтләнә.**

Был мотивтарға фольклор-этнографик параллелдәр Бишбүләк районында киң таралған Иван батыр тураһындағы әкиәттә лә күренә. Унда ҡыҙҙар күгәрсенгә әйләнеп осоп китә. Төркмән халҡында бер новеллала Мамеджан исемле егеттең пәрей затынан бик сибәр ҡатыны була. Батша уны үҙенә алыу өсөн егет алдына төрлө һынауҙар ҡуя, мәҫәлән, ул төн эсендә ҙур һарай төҙөргә тейеш була. Ҡатынының әхирәттәре - күгәрсенгә әйләнгән пәрейҙәр һарай төҙөй. Әйткәндәй, күгәрсен сүрәтендәге тылсымлы ҡатын-пәрейҙәр тураһындағы хикәйәттәр үзбәк, әзербайжан, төрөк, ҡырғыҙ, уйғырҙарҙа күп. "Калевала" эпосында әсәне яратып "күгәрсен" тип йөрөтәләр.

Күгәрсендең тотем ҡош булыуы башҡорт этнонимдарында һәм топонимдарында ла күренә. Үҫәргән, ҡыпсаҡ, бөрйән һәм тамъян шәжәрәләрендә күгәрсен ырыуынан Сурабан бей иҫкә алына. Уны Рәсәйгә ҡушылыу мәлендә Ҡаҙанда аманат итеп ҡалдыралар. Р. Кузеев күгәрсен ырыуын көнсығыш табындарға индерә. Тик былай булһа, ни өсөн уның табындарҙың түгел, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары шәжәрәһендә булыуы һорау тыуҙыра.

Әйе, борон Сура батыр хаҡындағы легендалар күбәләк, тиләү, барын, ҡара табындарға билдәле була. Ҡара табындарҙың шәжәрәһендә Сура бей исеме ике тапҡыр телгә алына. Әммә улар күгәрсен ырыуынан булған Сурабан бейҙән күпкә алдараҡ йәшәй: тәүгеһе - Сыңғыҙхандың (XIII) хәрби башлыҡтарының береһе, ярым легендар Майҡы бейҙең өлкән улы, икенсеһе - Аҡбүре бейҙең улы (XV быуаттың уртаһы).

Шуға ла Сурабан бей үҫәргән йәки тамъян ырыуынан булыуы ихтимал. Беренсенән, Аҡсура, Ҡарасура, Сура, Сурай, Йәнсура, Ҡансура тигән антропонимдар, топонимдар, гидронимдар үҫәргәндәр йәшәгән ерҙәрҙә йыш осрай. Икенсенән, XIX быуаттың башында үҫәргән башҡорттары Ейәнсура һәм Күгәрсен райондарында нигеҙ һалған ауылдар Күгәрсен тип атала. Был ауыл атамалары үҫәргән ырыуының бер төркөмө атамаһынан барлыҡҡа килеүе лә ихтимал.

Шул уҡ ваҡытта, "Сура батыр" эпосының бер вариантында герой шулай тип белдерә: "Мин тамъяндан буламын" йәки "Урал яғы тамъянмын".

Тағы бер факт иғтибарҙы йәлеп итә: Шора батыр - "Шора батыр" тигән ҡаҙаҡ эпосының геройы. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, башҡорттарҙағы кеүек, ул да тарихи шәхес, тама ырыуының башлығы була һәм XVI быуаттың уртаһында үлә. Һуңғараҡ тама ырыуын башҡа ырыуҙар "йота". Уларҙың бер өлөшө башҡорттарҙың тамъян ырыуына инә. Шуға ла Сура батырҙың тамъяндарҙың шәжәрәһендә осрауы һәм 1550 йылдарҙағы билдәле юлбашсыһы тип билдәләнеүе мөмкин.

Әммә был күгәрсен ырыуы йәки зат аралары башҡа ырыуҙар составында юҡ, тигәнде аңлатмай. Быға Ҡалтасы районындағы Күгәрсен ауылы, Шаран районындағы Күгәрсен-Бүләк ауылы күрһәтә. Был ауылдар ҡырғыҙ һәм эске йылан башҡорттары тарафынан нигеҙләнгән. Йыландарҙың составындағы күгәрсен ырыу бүленешен Р. Кузеев та билдәләй.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ДИМСЕ ҺҮҘЕ

**Ғаилә - ул йәмғиәттең иң мөһим ячейкаһы, тиҙәр ине әле ҡасан ғына. Бөгөн кешелек мөнәсәбәттәренең үлсәүҙәре, хатта әхлаҡи ҡиммәттәр үҙгәрҙе, ғаилә ҡорорға ашыҡмаусылар һаны ла арта бара. Шулай ҙа яңғыҙлыҡ бер кемгә лә килешмәй, ти халыҡ аҡылы. "Аулаҡ өй" тип аталған ял итеү кисәләрен ойоштороусы Фәймә-Айгөл Ниғмәтуллина ошоно ла, эргә-тирәһендә парһыҙ яңғыҙаҡтарҙың күп булыуын да күҙ уңында тотоп эш башлай ҙа инде. Ни өсөн бөгөнгө йәмғиәттә буйҙаҡлыҡ ҙур проблема итеп ҡабул ителә? Яңғыҙаҡтарҙың артыуына нимә сәбәпсе? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Айгөл апайҙың үҙе менән яуаптар эҙләйбеҙ.**

# ҒАИЛӘ НЫҠ БУЛҺЫН ӨСӨН...

## ике кешенең тырышлығы кәрәк



**➔ Еңел булмаған был эшкә тотонорға нимә этәрҙе һеҙҙе?**

- Туғандар, дуҫтар араһында яңғыҙҙар күп булыуына йәнем әрнеүҙән башланғандыр. Әсәйем һөйләүенсә, минең бәләкәйҙән бер ҡыҙыҡ һыҙатым булған. Ҡунаҡ саҡырһаҡ, был инәйҙең бабайы юҡ, был бабайҙың әбейе юҡ, ошо икәүҙе берәү итәйек, тип әйтә торғайның, ти. Сибай педучилищеһында, Башҡорт дәүләт педагогия университетында уҡығанда ла егеттәрҙе ҡыҙҙар менән таныштыра инем. Ул мәлдә телефон юҡ, сәй эсергә килегеҙ, тип, бүлмәмә саҡырам, һөйләшеп ултырабыҙ. Минең ярҙамым менән ҡауышҡандарҙың барыһы ла матур йәшәйҙәр.

Башта 11 кеше менән генә башлап ебәрҙек. Икенсе аҙнаһында 22 кеше килде. Хәҙер аҙнаһына бер тапҡыр берәй сара үткәрәбеҙ, Белорет эргәһендәге ете район менән эшләйбеҙ. Алдан иғлан бирелгәс, барыһы ла белеп тора. Музыка ҡуябыҙ, уйындар уйнайбыҙ. Байрамдар мәлендә 150-200 кеше йыйылып китә. Махсус һорауламалар менән мәғлүмәттәр туплана, һәр кем исем-шәрифе, йәше, талаптарын яҙып ҡалдыра. Был папкаларҙы һәр сараға алып барабыҙ, өҫтәлгә һалабыҙ. Кемдер үҙенә йәр эҙләй, кемдер туғандарына - улар папкаларҙы ҡарап һайлай ала. "Бәйләнештә" сайтында төркөмөбөҙ бар. Дүрт йыл булды эшмәкәрлекте башлап ебәргәнгә, бөгөнгө көндә Белореттан тыш, тағы ла Өфөлә, Учалыла бүлексәләр бар, башҡа райондарҙа ла эшләргә теләүселәр барлыҡҡа килде.

Әйткәндәй, Башҡортостанда 27 кеше танышыу-аралашыу кисәләре ойоштороу менән шөғөлләнә, шуларҙың етәкселәре йылына бер тапҡыр йыйылып, һөҙөмтәләрҙе барлайбыҙ. Дүрт йыл дауамында мин 211 пар ҡауыштырғанмын, шуға ла былтыр йыл аҙағында миңә Гран-при тапшырылды. Иң ҡыуаныслыһы, уларҙың барыһы ла яҡшы итеп йәшәп ята, араларында 3 пар уртаҡ тел таба алмайынса айырылышырға маташҡайны ла, психологик, һүҙ ярҙамы күрһәтеп, уларҙың ғаиләләрен һаҡлап ҡала алдыҡ. Аллаға шөкөр, әлегә 18 бәпесебеҙ бар. Ошо 211 ғаилә араһында физик мөмкинлектәре сикләнгәндәр - 17 пар. Бер апай 52 йәшендә беренсе тапҡыр туй күлдәге кейҙе. Уларҙың туйын шартына килтереп, йолалар менән күмәкләп үткәрҙек. Хәҙер минең эшемә "Ағинәйҙәр ҡоро", ауыл советтары ҡушылды. Ауылдарындағы яңғыҙҙарҙы күндереп, сараларға ебәрәләр. Һәр хәлдә, ауыл халҡы уларҙы башлы-күҙле итергә тырыша.

**➔ Тимәк, яңғыҙлыҡ - йәмғиәттең көнүҙәк бер проблемаһына әүерелгән хәҙерге көндә? Өйләнмәй, кейәүгә сыҡмай йөрөүҙең сәбәптәре нимәлә?**

- Хәҙер айырылышыуҙар күп бит. Һәр хәлдә, мин эш алып барған төбәктәрҙә шулай. Ҙур ҡалаларҙа ситуация икенсе төрлө булыуы ла ихтимал. Айырылышыуҙарҙың 40 проценты эскелектән килеп сыға. Ауыл ерендә эшһеҙлек менән эскелек бер-береһенә эйәреп йөрөй. Ғаиләнең именлеге ҡатын-ҡыҙҙан шулай ҙа, ирҙе әрләшеп, һуғышып еңеп булмай, әҙерәк маҡтап, әҙерәк хәйләләп, матур итеп һөйләшһәң, ир-егеттәр насар ғәҙәттәр менән дә дуҫлашмаҫ, ситтән булһа ла эшен дә табыр ине, моғайын. Өлкән кешене үҙгәртеп булмай, тиһәләр ҙә, ирҙең тәрбиәһе ҡатындан ул. Әсәйем һөйләй ине, элек ҡатын-ҡыҙ иренең эштән ҡайтыуын ҡапҡа асып көтөп торған, хәҙер беҙ артыҡ үҙаллыға, үҙһүҙлегә әүерелеп киттек. Ир-егет, киреһенсә, физик яҡтан көслө булһа ла, рухи яҡтан көсһөҙ, уға гел терәк кәрәк. Ҡатыны айырылып ҡайтып китһә, ул бөтөнләй аптырап ҡала. Минең ауылымда ғына шундай 18 ир-егет эскегә һалышып, юҡҡа сығып йөрөй.

Бер ҡасан да өйләнеп ҡарамаған ир-егеттәр араһында ҡатын-ҡыҙ менән донъя көтөп алып китеүҙе ауырлыҡ һымаҡ ҡабул итеүселәр күп. Ҡатын менән йәшәгәнсе, яңғыҙым йөрөйөм мин, тиҙәр, ғаилә өсөн яуаплылыҡ алырға теләмәйҙәр. Улар менән был темаларға һөйләшеүҙәр алып барабыҙ.

**➔ Ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр буласаҡ тормош иптәштәренә ниндәйерәк талаптар ҡуя бөгөн?**

- Бының йәшерен бер нәмәһе лә юҡ, ҡатын-ҡыҙ етеш тормошта йәшәргә теләй, ир-егеттең финанс яғына иғтибар итә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙың матурлығын, кәүҙә һомғоллоғон төп талап итеп ҡуя. Һеҙҙә эсмәйҙәрме, тип тә һорай ҡатын-ҡыҙҙар, сөнки улар, ысынлап та, эскелектән биҙеп бөткән. Эсеп йөрөгән кеше бындай сараларға йөрөй ҙә алмай. Юлға бензинға аҡса табырға, үҙендә кеше араһында тота белергә кәрәк. Шуға, беҙҙең сараларға насар кешеләр йөрөмәй, тип тулы ышаныс менән әйтә алам. Ҡайһы бер ауылдарҙа спорт трикоһы, галоштар кейеп килеүселәр булған хәлдә лә, улар бер-береһенән күреп, тиҙ арала матурланып китәләр. Тимәк, беҙ уларҙы тәрбиәләйбеҙ ҙә. Телефондан кешенең күңелен ҡыймайынса һөйләшергә өйрәнәләр, ваҡытығыҙ булмаһа, яғымлы ғына итеп был турала әйтегеҙ, йылы һүҙ йән аҙығы, тип әйтеп торам. Уңған егеттәр күп ул, уларға бары тик аралашыу ғына етмәгән. Ғөмүмән, башҡорт халҡы нык әҙәпле, тәртипле ул, сараларҙа бер тын сыҡмай, үҙҙәрен һәйбәт тоталар.

**➔ Кешеләрҙе ҡауыштырыу буйынса эшегеҙҙә ниндәйҙер ҡаршылыҡтар осраймы?**

- Иң ауыры - күсеп барыу-бармау мәсьәләһе. Мәҫәлән, 50 йәшлек тол ҡатындар һәр бер районда күп, әммә улар үҙҙәренең донъяһын ташлап сығып киткеләре килмәй. Йәштәр ҙә күсеп барырға ынтылмай. Күсеп барһаң, унда һинең эшең дә, йәшәү шарттарың да күпкә яҡшыраҡ булыр, бәлки, тип тә әйтеп ҡарайым. Ауыл ерендә утын яғып йәшәгеләре лә килмәй, газ булһын, тиҙәр, бесән дә эшләгеләре килмәй. Егеттең машинаһы, эше мотлаҡ булһын, тиҙәр. Егеттәр иһә беҙҙең сараларға аҙыраҡ йөрөй, булғандары ла һайлап алыу мөмкинлеге барлығын тойоп алдылар хәҙер, улар шуға артыҡ ҡабаланмай. Тағы иң аптыраҡкан бер нәмә бар - ҡыҙҙар, ир-егет әсәһен ҡарамаймы, нисә балаға алимент түләй, тип йыш белешә. Йәғни, беҙ ата-бабаларыбыҙ йәшәйешенән нык ситкә тайпылғанбыҙ. Алимент мәсьәләһе ярай инде, бына әсәйҙәргә булған мөнәсәбәт хайран итә. Борон ҡайны-ҡәйнәһен дә ҡарағандар, быны ауырлыҡ итеп ҡабул да итмәгәндәр. Хәҙер рәхәт йәшәгеләре килә. 35 йәште үткән ҡатын-ҡыҙҙар бала тапҡылары ла килмәй. Ә ғаилә ул ике яҡтың да теләк һәм тырышлығы менән төҙөлә.

**➔ Ололар элек, тиңеңә кейәүгә сыҡ, тиңеңә өйлән, тип теләк теләй ҙә ултыра ине. Һеҙҙең үҙегеҙҙең ниндәйҙер ысул, ҡағиҙәләрегеҙ бармы?**

- Элегерәк димсе димләгән дә, һайланып тормағандар, йәшәп алғандар ҙа киткәндәр, тиеүселәр бар. Тик ул димселәр бит ҡыҙҙың да, егеттең дә ырыунәҫелен, затын яҡшы белеп димләгән. Йәғни, ана шул тиңен тапҡан барыбер. Әле лә ҡарайым: алма ағасынан йыраҡ тәгәрәмәй, мәҫәлән, дингә тартылыусыларҙың атай-олатайҙары динле булған. Шуға ла мин кешене бер тапҡыр ҙа күрмәйенсә таныштырмайым, был дөрөҫ тә түгел. Унан һуң, кешенең эске күңеле матур булырға тейеш, тиһәк тә, төҫтәре буйынса ла тап итергә тырышам. Бәләкәйерәк буйлы егеттәрҙе бәләкәй буйлы ҡыҙҙар менән таныштырам. Кеше араһында оялмай, уның күҙенә ҡарарлыҡ булһын. Йәше менән дә тап килергә тейештәрҙер ул. Беҙҙең сараларға йөрөүселәр араһында 30-40 йәшлек егеттәр нык күп. Башлыса Бөрйәндә, Баймаҡта ул буйҙаҡ егеттәр. Белоретта ир-егеттәр аҙ, ҡатын-ҡыҙҙар күберәк. Учалыла ла егеттәр аҙыраҡ, Әбйәлилдә буйҙаҡ ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар һаны тигеҙ. Хәҙер иртә ғаилә ҡорорға ашыҡмай йәштәр, бәлки, был дөрөҫтөр ҙә. Күҙәтеүҙәремә ҡарағанда, 35 йәш тирәһендә өйләнешкәндәрҙең ғаиләһе нык була, улар бер-береһе өсөн яуаплы икәнен белә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, балалар атай тәрбиәһен дә алып үҫһен, тип тырыша. Әлегә өйләнгәндәр араһынан иң олоһона 83 йәш. Апайҙарҙың араһынан - 75 йәш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заман ғаиләнең асылын бер аҙ үҙгәртһә лә, социаль институттар араһында уның үҙенең урыны бар әле. Ғаилә мәҙәни традицияларҙы, дөйөм кешелек ҡиммәттәрен, быуындар бәйләнешен һаҡлаусы нигеҙ ҙә. Бер классик әйтмешләй, тыуған илгә, тимәк, халҡыңа һөйөү ҙә ғаиләнән башлана. Тик ошо яуаплылыҡты әңгәмәсебеҙ кеүек әүҙем шәхестәребеҙ генә түгел, яңғыҙаҡтар үҙҙәре лә тойһон ине.**

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ **_БашЦИК исемендәге 10-сы Верхнеурал кавалерия полкы милли кадрҙар әҙерләүҙә лә үҙ өлөшөн индерә. Полкка грамоталы, сәйәси яҡтан әҙер, әүҙем башҡорт йәштәре ебәрелә. Бында улар яҡшы белем һәм тәжрибә алып ҡайта._**



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*



# МУСА МОРТАЗИН АТЛЫЛАРЫНЫҢ...

## ҡыҙыл казактар сафындағы хеҙмәте

**Легендар комбриг Муса Мортазин бригадаһының Польша фронтынан һуңғы яҙмышы тураһында бер ҡайҙа ла яҙылғаны юҡ. Польша менән һуғыш тамамланғас, Мортазиндың атлылары ҡайҙа булған һуң, алыҫ Украина ерендә Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының артабанғы хеҙмәте нисек дауам иткән?**



*БашЦИК исемендәге 10-сы Верхнеурал кавалерия полкының кесе командирҙар әҙерләү мәктәбенең 2-се взводы һалдаттары. 1930 йылдың 16 майы.*

Әйткәндәй, Башҡортостандың Милли архивы (элекке Йәмәғәт ойошмаларының үҙәк архивы) фондында "VIII лет 10-го Кавалерийского Верхне-Уральского имени Башкирского ЦИК-а Червонного казачества полка 1919-1927 гг." исемле 1927 йылда эшләнгән альбом һаҡлана. Унда 10-сы полктың ҡыҫҡаса тарихы, Башҡорт кавалерия бригадаһы яугирҙарының хәтирәләре, фотографиялар тупланған. Иң ҡыҙығы шунда: 10-сы полктың тарихы 1919 йылдан башлана тип яҙылған. "Полк имеет своими родоначальниками: а) Кавалерийскую Башкирскую Бригаду, двух полкового состава, созданную в июле месяце 1919 года б) Башкирскую группу (пехота и кавалерия), сформированную Колчаком в начале 1919 года", - тип яҙылған альбомда. Тимәк, 10-сы полк үҙенең тарихын 1919 йылдың 23 августы менән бәйләгән, йәғни Мортазин бригадаһының ҡыҙылдарға сығыу мәленән башлаған. Башҡорт кавалерия бригадаһы традициялары 1927 йылда ла ныҡлы һаҡланып килгән әле, тип әйтергә була.

Был альбомды, бәлки, Муса Мортазин үҙе төҙөгәндер. Тап ошо йылда ул "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышы осоронда" исемле китабын баҫтырып сығара. Комбриг Мортазин Украинала ҡалған яуҙаштары менән бәйләнеште өҙмәгән. 1928 йылда рәссам В.Н. Яковлев "Ҡыҙыл командирҙар" исемле картинаһын төшөрә. Унда ҡыҙыл кавалеристарҙың уртаһында комбриг Муса Мортазин һүрәтләнгән. Бөгөн был картина Мәскәүҙә РФ Ҡоралды Көстәренең Үҙәк музейында һаҡлана. Яковлев Муса Мортазинды тап БашЦИК исемендәге 10-сы Верхнеурал кавалерия полкы командирҙары менән һынландырған, тигән фекер бар. 30-сы йылдар башында ла Башҡортостан Хөкүмәте шефлыҡҡа алған полк менән даими бәйләнештә тора. Мәҫәлән, 1930 йылда БашЦИК-тың ҡушыуы буйынса РСФСР Үҙәк Башҡарма Комитеты янындағы БАССР вәкиле Шаһиәхмәт Дауытов Украина ССР-ның Изяславль ҡалаһында торған 10-сы кавполкка бара. Республика вәкиле бында башҡорт һалдаттарының тормошо, көнкүреше менән таныша. Полктың комиссарын Башҡортостанға саҡыра.

1930 йылдың 3 июнендә 10-сы полк комиссары Рдомский БашЦИК-тың кесе Президиумы ултырышында доклад менән сығыш яһай, Ш. Дауытов та ҡыҫҡаса һөйләп китә. Башҡортостан Хөкүмәте 10-сы полктың хәрби һәм сәйәси әҙерлеген ҡәнәғәтләнерлек, тип һығымта яһай. Шефлыҡ эшен көсәйтеү кәрәклеге тураһында ҡарар ҡабул итә: "Полк, находясь на ответственном посту в пограничном районе, нуждается в особой моральной и материальной поддержке со стороны своего шефа - БашЦИК и широкой общественности рабочих и трудящегося крестьянства Башкирии, между тем шефская работа до последнего времени не была достаточно налажена из-за отдаленности полка от Башкирии, принявшей шефство над полком, и отсутствия необходимой связи для постоянной культурно-просветительской работы.

Принимая во внимание, что 10-й кавполк, первоначально сформированный из бойцов башкирской национальности, имея особые боевые заслуги, исторически связан с Башкирией, пополняется новобранцами из Башреспублики, имея в своем составе башкирский национальный эскадрон, БашЦИК признает необходимость усиления шефской работы с привлечением к участию в шефстве широких трудящихся масс Башкирии, главным образом, рабочего пролетариата, в деле культурно-бытового обслуживания подшефного полка".

Шефлыҡ эше менән етәкселек итеү дөйөм идара комиссия рәйесе, БашЦИК рәйесе урынбаҫары Калметьевҡа һәм комиссия ағзаһы - БАССР-ҙың территориаль полк округы идаралығы начальнигы Шадинға һ.б. йөкмәтелә. Шулай уҡ ҡарарҙа 10-сы полктың башҡорт эскадронына башҡорт яугирҙары һанын арттырырға кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алына: "Исходя из исторической связи 10-го полка с Башкирией, поддерживаемой со дня формирования полка, БашЦИК, учитывая необходимость создания благоприятных условий для массовой работы со стороны национальной республики в направлении воспитания национальных башкирских кадров, считает нахождение в количественном отношении башкир в составе полка в данное время недостаточным для массовой работы, и поручает Теруправлению Округа БАССР войти с ходатайством по своему ведомству перед Реввоенсоветом СССР об увеличении разверстки новобранческого пополнения полку из Башкирии до 200 человек, направляя, вместе с тем, наиболее грамотных и политически подготовленных призываемых в армию, по преимуществу из рабочих районов - Баймака и Белорецка, а также поручает Теруправлению Округа содействовать укомплектованию полка средним начсоставом, имея при этом в виду необходимость в ближайшее время дать полку трех командиров взвода из националов".

Бынан тыш, БашЦИК Башҡортостан мәғариф комиссариатына һәм Башҡортостан дәүләт нәшриәтенә 10-сы полкты башҡорт китаптары, хәрби хеҙмәт буйынса уҡыу әсбаптары менән тәьмин итергә ҡуша. Башҡортостан халыҡ комиссарҙары советына: "Ассигновать 20.000 рублей на культурные и хозяйственные нужды 10 полка", - тиелһә, Башҡортостандың игенселек комиссариатына: "Выделить из Госконюшни две кавалерийские лошади для подарка в качестве переходящего приза имени БашЦИК на конную подготовку эскадронами. В дальнейшем ежегодно до полного укомплектования полка конским составом, снабжать начсостав полка ценными из Госконюшни лошадьми кавалерийского типа", - тигән бойороҡ бирелә.

БашЦИК исемендәге 10-сы Верхнеурал кавалерия полкы милли кадрҙар әҙерләүҙә лә үҙ өлөшөн индерә. Полкка грамоталы, сәйәси яҡтан әҙер, әүҙем башҡорт йәштәре ебәрелә. Бында улар үҙҙәренә ярайһы уҡ яҡшы белем һәм тәжрибә алып ҡайта. Мәҫәлән, БАССР-ҙың Мәсәғүт кантонының Ләмәҙтамаҡ ауылы егете (хәҙерге Мәсетле районы) комсомол Ҡаев Ғәлихан Шәмбеғол улы (1907 йылғы) 1929 йылда әрмегә алына. Хәрби хеҙмәтте тап ошо 10-сы полкта үтә (фотоны ҡарағыҙ). 1930 йылдың сентябрендә полк мәктәбен тамамлап, Ҡыҙыл Армияның кесе командиры дәрәжәһен ала. 1931 йылда хәрби хеҙмәттән ҡайтҡас, ОСОАВИАХИМ-дың (ДОСААФ) Дыуан-Мәсетле районы советы рәйесе итеп тәғәйенләнә, артабан элемтә бүлексәһе начальнигы вазифаһында була, һуңынан колхоз рәйесе булып эшләй.

1938 йылда Ҡыҙыл Армияның территориаль-кадр система буйынса ойошторолоуы бөтөрөлә. Ошоноң менән бергә милли ғәскәри частар ҙа һәм хәрби белем биреү учреждениелары ла таратыла. 1939 йылдың сентябрендә СССР Юғары Советы сессияһында ҡабул ителгән "Дөйөм хәрби хеҙмәт тураһындағы закон" менән Ҡыҙыл Армияның яңы принцип буйынса төҙөлөүе ҡануни яҡтан нығытыла.

1938 йылда бөтөн Червонный казак ғәскәрҙәре, шул иҫәптән БашЦИК исемендәге 10-сы Верхнеурал кавалерия полкы бөтөрөлә. Дөрөҫөрәге, улар үҙгәртеп ҡорола. 2-се Червонный казактар кавалерия дивизияһы (10-сы полк уның составында була) 34-се кавалерия дивизияһы, тип үҙгәртелә.

Ошоноң менән Муса Мортазин атлылары башлап ебәргән Червонный казак ғәскәр сафында башҡорттарҙың хәрби хеҙмәт тарихы тамамлана. Башҡортостан Хөкүмәте 20 йыл тирәһе башҡорттар хеҙмәт иткән 10-сы полк менән тығыҙ бәйләнеш тота, шефлыҡ ярҙамы күрһәтә.

Был тема артабанғы ғилми тикшеренеүҙе талап итә. Украинаға барып, 10-сы полктың тарихын өйрәнгәндә, һис шикһеҙ, Муса Мортазин бригадаһы тарихының әлегә билдәһеҙ биттәрен асырға мөмкин булыр ине.

**Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы.**

**(Аҙағы. Башы 8-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

...Егерме дүртенсе числола беҙ Ҡыҙыл Мәсет тигән башҡорт ауылына тиклем 27 саҡырымдан да алыҫыраҡ китә алманыҡ. Ярсүбәк йылғаһына ҡойоусы Терәшле, Һаҡмар менән тоташҡан Ыҡ кеүек бәләкәй йылғасыҡтар ҙа беҙҙең юлыбыҙға оло ҡаршылыҡ булды; беҙ үҙебеҙҙең артелебеҙ менән күпер һалырға ла мәжбүр инек.

Ҡыҙыл Мәсет ауылында беҙ көлкөлө лә, ҡыҙғаныс та булып тойолған башҡорт хөрәфәтен тамаша ҡылдыҡ. Мин уларҙың береһенән дә ошо яңылышыу сәбәбен һорашып белә алманым; тик шуны ғына аңланым: Шайтан Уйыҡ (автор "Бесовая игра", тип тәржемә иткән, тимәк, уйын, тип уҡырға кәрәк. - **Ред. иҫк.**) тип аталған хөрәфәт күбеһенсә йөклө башҡорт ҡатындарына ҡағыла. Аҫыраныр алдынан берәй башҡорт ҡатыны ауырый башлаһа, бигерәк тә ҡорһағында ныҡ көсәйә барған ауыртыу тойоп, тулғаҡ тота башлай икән, быны башҡорттар бер ниндәй сәбәпһеҙ ен-бәрей ҡағылыуы менән бәйләй: был осраҡта улар үҙҙәренең башҡа бөтөн ғәҙәти сараларын етерлек түгел, тип иҫәпләп, үҙҙәре Шайтан Күрәҙә (автор "чертовидец", тип тәржемәләй, хәҙергесә күрәҙәсене аңлата. - **Ред. иҫк.**) тип атаған сихырсыларынан ярҙам эҙләй. Бындай кешеләр уларҙа айырыуса ихтирам ителә, шулай ҙа улар бик һирәк осрай; ҡай сағында улар артынан биш йөҙ саҡырым һәм унан да алыҫыраҡ ергә баралар.

Беҙ күргән Шайтан Күрәҙә оло кәүҙәле йәш кеше ине, уға ошо һөнәр олатаһынан мираҫҡа ҡалған. Ҡатыны сирле булған хужа башҡорттар өсөн мәжлес уҙғарырға тейеш ине. Бында ике енестән дә бик күп йәш кешеләр йыйылды, һәм ауырыу ҡатындың өйөндә улар ҡаты ҡысҡырып һәм шаулашып, үҙҙәренең ғәҙәти бейеүҙәрен башлап ебәрҙе. Шайтан Күрәҙә әйтеүенсә, улар быны ен-бәрей, күп кешеләрҙән ҡурҡып, өйгә инмәһен өсөн эшләй; ул кешеләр киткәнен ҡурала йә, башлыса, өй ҡыйығы башында көтөп ултыра. Бейеүҙә һәм ҡысҡырыуҙа, дөрөҫөрәге, ҡотороуҙа Шайтан Күрәҙә барыһынан да арттырып ебәрҙе. Уның ҡындан һурылған ҡылысы һәм ике пуля менән ҡоролған мылтығы бар ине. Ярты төн еткәс, Шайтан Күрәҙә иң көслө өс кешене һайлап алып, үҙ янынан ситкә китмәҫкә бойорҙо; ул ен-бәрей менән алышҡа сыҡҡас, үҙен артҡы яҡтан билбауынан һәм итәгенән тотоп торорға ҡушты: сөнки шайтан күреүселәр ябай кешеләрҙе үҙҙәренең үтә көслө ендәр менән оҙайлы көрәшкә сығыуы тураһында ышандыра ала.

**(Дауамы бар).**

**21 февралдә Халыҡ-ара туған тел көнө билдәләнде. Ошо дата уңайынан редакцияға педагогика фәндәре кандидаты Вәкил ХАЖИН менән М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты деканы, филология фәндәре докторы Луиза СӘМСИТОВАны саҡырып, әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Тел - ул ижтимағи күренеш, ул халыҡтың йәшәйешен тәьмин итеүсе иң төп шарттарҙың береһе, тибеҙ. Ошо хәҡиҡәт ошоғаса йәшәткәндер ҙә инде беҙҙе халыҡ булараҡ...**

**В. Хажин:** Эйе, телебеҙ меңәр йылдар буйына һаҡланып килгән. Донъялағы 40-тан ашыу төрки теле араһында уртаҡ лексик берәмектәр бик күп, сағыштырып ҡараһаҡ, грамматика ла, йәғни төҙөлөш тә оҡшаш. Ләкин шул уҡ ваҡытта телебеҙ бер үҙе фонетика йәһәтенән башҡа телдәрҙән айырыла. Бары тик башҡорт телендәге һүҙҙәрҙә генә *h* өнө бар. Беҙгә ҡәрҙәш булған татарҙарҙа ла был өн бар, ләкин ул фәҡәт сит телдәрҙән - фарсы, ғәрәптән ингән һүҙҙәрҙә генә һаҡланған: һәм, шәһәр. Хәҙер уны улар хәм, шәхәр, тип әйтә. Сөнки *h* уларҙың тәби-

**на бөгөн һәр мөйөштән тигәндәй, тел бөтә, тип ҡабатланған психологик баҫым булмағанмы, әллә икенсе сәбәбе бармы?**

**В. Хажин:** Элек, тел бөтә, тип әйтмәгәндәр, тиеү дөрөҫ түгел. Ул элек тә булды. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Н. Хрущев, "коммунизм" төҙөй башлаған ваҡытта, "әгәр ҙә илдәге кешеләр бөтәһе лә бер телдә һөйләшһә, йәғни рус телендә, беҙ коммунизмды тиҙерәк төҙөйәсәкбеҙ", тип әйтеп һалғайны. Шунда уҡ башҡа милләттәргә, телдәргә баҫым башланды, уҡытыу рус теленә күсерелде. Ярай, һуңынан туҡтап ҡалдылар. Ындай хәлдәр элек-электән дә булған. Ғөмүмән, СССР ваҡытында 80-дән ашыу тел юҡҡа сыҡҡан. Бөгөн, мәҫәлән, мишәр халҡы, мишәр теле юҡ. Шулай уҡ башҡа халыҡтар ҙа икенсе

ике миллионлыҡ халыҡтың телен берәү ҙә бөтөрә алмаясаҡ. Шул ышаныс менән йәшәргә һәм ҡулдан килгән тиклем, бигерәк тә йәштәргә, шул фекерҙе һеңдерергә кәрәк.

**Л. Сәмситова:** Эпостарыбыҙ боронғо замандарҙан бөгөнгә тиклем килеп еткән, уларҙы быуындан-быуынға туған телебеҙҙә еткерәбеҙ, һөйләйбеҙ икән - телдең бөтөүе мөмкин түгел. Мәктәп уҡыусылары, студенттар мәшһүр "Урал батыр" эпосынан 4,5 мең юлды яттан һөйләй, эпостың телен белә, уны киләһе быуындарға еткерә, саф башҡорт телендә һөйләшә икән - телгә бөтөнләй бөтөү ҡурҡынысы янамай, тип уйлайым. Әлбиттә, тынысланып, ҡул ҡаушырып ултырырға ла ярамай. Тәү сиратта, көстө ғаиләгә, балаларға һалырға тейешбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо хәҡиҡәтте аңламағандар ҙа бихисап,

менән ғорурланһындар, һеҙҙән менән һоҡланһындар, һеҙҙән үрнәк алһындар, тип ҡабатлап торабыҙ студенттарға.

**▸ Ысынлап та, бөгөн бәғзеләр телде һаҡлау һәр беребеҙҙең үҙенә бәйле булыуын аңламай шул. Ә бына мәғариф системаһы күҙлегенән ҡарағанда, тел өйрәнеү, уҡытыу мәсьәләһе буйынса проблемалар бармы?**

**В. Хажин:** Башҡорт мәктәптәрендә башҡорт теленең бөтөүе тураһында һүҙ бөтөнләй булмаҫҡа тейеш, сөнки башҡорт теле дәрестәре бар, уҡытыусылар уҡыта. Бала башҡорт мөхитендә аралаша. Ул тарих дәресендә лә башҡортса һөйләп, телмәрен үҫтерә ала. Әгәр балаҡы, милли республикаларҙа бәхәс тыуҙырған "Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү учреждениеларында рус теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу концепцияһы" проекты күҙаллағанса, тотошлай рус телендә уҡытып алып китһәк, туған тел тураһында белем биреүсе берҙән-

ле филологтарҙан: "Хәҙер шарт хәле тураһында һөйләй алаһыңмы? Шуны белеүең йәки белмәүең тормошоңда берәй заман кәрәк булдымы?" - тип һорағаным бар. Күбеһе белмәй һәм ул бер кемгә лә, бер ҡасан да кәрәк булмаған. Ул башҡорт телен уҡыған уҡытыусыға ғына кәрәк булыуы мөмкин. Ләкин шул уҡ ваҡытта терминдарҙы белеү, башҡорт телендә һөйләшә белеү - ул һәр ваҡыт кәрәк. Башҡорт телен тел булараҡ уҡымау арҡаһында ла беҙҙең радио-телевидениела хаталы һөйләшеүҙәр, хаталы һөйләмдәр һәм һүҙҙәр ишетелә, баҫым яңылыш ҡуйыла. Шуларҙы бит мәктәптә бөтөнләй өйрәтмәйбеҙ.

**Л. Сәмситова:** Мәктәптәрҙә предметтарҙы тик рус телендә генә уҡытыуға күсерергә тырышыуҙы дөрөҫ ҡараш тип уйламайым. Үҙем 11 йыл буйына башҡорт мәктәбендә уҡыған кеше булараҡ әйтә алам: шул уҡ математиканы, биологияны, химияны, физиканы - бөтөн предметтарҙы башҡорт телендә уҡыныҡ. Үҙ теләнде белмәйен-

# “ШУЛ ТЕЛ МЕНӘН ТЫУҘЫМ,

## Ошо ҡағиҙәнең бала күңеленә

ғәттән бирелгән өнө түгел. Ә беҙгә ул тәбиғәттән бирелгән һәм уны меңәр йылдар буйына һаҡлап ҡалғанбыҙ. Тағы ла *ҙ* менән *ҫ* өнөбөҙ бар. Был өндәр бары тик төркмән теленең бер диалектында ғына йәшәй. Ләкин уны улар әҙәби телдәренә алмаған. Төркмәндәрҙәге ошо *ҙ* менән һөйләшкән диалект, бәлки, башҡорттоң бер өлөшөләр? Татарстанда хәҙер инде татар булып киткән, ләкин *ҙ* менән һөйләшкән районлар бар. Хатта беҙҙең Башҡортостандағы башҡорттарға ҡарағанда ла нығыраҡ *ҙ*-ылайҙар. Мәҫәлән, ҙавод, Ҙөһрә, тип ебәрәләр. Райондарын алып ҡарайыҡ - Аҙнаҡай. Бер ҙә бит Атнаҡай түгел. Әммә был күренеште улар бөтөрөп бара. Йәштәр *ҙ*-ны әйтмәй. Ә беҙҙе иһә тап ошо өндәребеҙ һаҡлай.

**Л. Сәмситова:** Тел - ул тормош нигеҙе. Шуға, бала тыуғас та, телде яҡларға, һаҡларға, үҫтерергә кәрәклеген, шағир әйтмешләй, "шул тел менән тыуҙым, үҫтем, торам бөгөн дә", тигәнде мейеһенә һеңдерергә тейешбеҙ. Тап бына ошо ҡағиҙәне ҡулланмау телебеҙҙе ҡурҡыныс аҫтына ҡуя икәнен беләбеҙ бит инде...

**▸ ЮНЕСКО фаразы буйынса, башҡорт теле бөтөп барыусы телдәр исемлегендә тора. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар һан буйынса Рәсәйҙә дүртенсе урын биләй. Телебеҙ, ысынлап та, шулай аянысლы хәлдәме, әллә был махсус алып барылған сәйәсәтме? Сөнки тарихҡа ҡараһаҡ, быуаттар буйына ниндәй генә ҡыҫымдарға дусар булһа ла телебеҙ бөгөнгәсә һаҡланып килгән. Быны нимә менән аңлатырға мөмкин: халыҡ аңы-**



бигерәк тә яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, ғөмүмән, башҡорт зыялыларының балалары рус телендә аралашҡанын бөтөнләй аңлай ҙа, ҡабул итә лә алмайым.

Ә бит балалар ғаиләлә алғанды артабан дауам итеүселәр. Минең эшем дәрес уҡытыу йәки етәкселек итеү генә түгел, мин һәр ваҡыт йәштәр, студенттар араһында. Улар ни-

бер сығанаҡ булып башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресе генә тороп ҡаласаҡ. Ул ваҡытта инде башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуға иғтибарҙы бөтөнләй икенсе йүнәлешкә борорға тура киләсәк.

Башҡорт мәктәптәрендә башҡорт балалары уҡыған дәреслектәрҙе, ғөмүмән, уҡытыу концепцияһын үҙгәртергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Сөнки бөгөнгөсә уҡытыу балаларҙы туған тел-

сә, шул телдә фекерләмәйенсә тороп, нисек итеп башҡа телдәрҙе үҙләштерергә мөмкин? Был, ғөмүмән, халыҡты, телде бөтөрөүгә, мәҙәниәтенде, әҙәбиәтенде, тарихыңды белмәүгә алып килә торған йүнәлештәрҙең береһе. Башҡортса уҡыған үҙемдең ауылдаштарым хаҡында әйткәндә, бөгөн бер ғаиләнән дүрт хәрби, генерал-полковниктар сыҡҡан. Башҡортса уҡыу уларға бер ҙә рус телен тейешле кимәлдә белергә ҡамасауламаған. Үҙемдең инәйем рус теле уҡытыусыһы булды, беҙ, башҡорт мәктәбе балалары, рус телендә лә шиғыр яҙып, ғүмер баҡый призлы урындар алып, шулай уҡ олимпиадаларҙа еңеүсе булып йөрөнөк. Әгәр ҙә башҡорт мөхитендә үҫеп, өйҙә, мәктәптә башҡортса аралашып, рус телендә шиғыр яҙа алам икән - тимәк, был уҡытыусының эш һөҙөмтәһе. Бөтөн нәмә кешенең үҙенән тора. Ул туған телендә уҡырға тейеш, һәм, ғөмүмән, уның донъяны танып-белеүе, белем кимәлен арттырыуы, фекерләүе, шәхес булып формалашыуына иң элек туған теле ярҙам итә.

> ***Эпостарыбыҙ боронғо замандарҙан бөгөнгә тиклем килеп еткән, уларҙы быуындан-быуынға туған телебеҙҙә еткерәбеҙ, һөйләйбеҙ икән - телдең бөтөүе мөмкин түгел. Мәктәп уҡыусылары, студенттар мәшһүр "Урал батыр" эпосынан 4,5 мең юлды яттан һөйләй, эпостың телен белә, уны киләһе быуындарға еткерә, саф башҡорт телендә һөйләшә икән - телгә бөтөнләй бөтөү ҡурҡынысы янамай, тип уйлайым. Әлбиттә, тынысланып, ҡул ҡаушырып ултырырға ла ярамай. Тәү сиратта, көстө ғаиләгә, балаларға һалырға тейешбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо хәҡиҡәтте аңламағандар ҙа бихисап, бигерәк тә яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, ғөмүмән, башҡорт зыялыларының балалары рус телендә аралашҡанын бөтөнләй аңлай ҙа, ҡабул итә лә алмайым.***

милләт эсенә инеп китеп юғалған. Бөгөн заманында бөтөн донъяға яңғырап торған ниндәй бөйөк тере латин теле юҡ. Шул ваҡыттағы боронғо грек теле лә юҡҡа сыҡҡан. Бөгөнгө грек теле менән ул ваҡыттағыһы араһында ер менән күк айырмаһы. Шуға тел бөтөүе - ул тәбиғи күренеш.

Бөгөн дә, бәлки, Рәсәйҙә барыһы ла бер телдә генә һөйләшһен ине, тип теләүселәр, уйлаусылар барҙыр. Ләкин беҙ бер ниндәй ҡыҫымдарға, һынауҙарға ҡарамаҫтан, телебеҙҙе юғалтмайынса һаҡлап ҡала алғанбыҙ икән - ул барыбер һаҡланасаҡ,

мә әйткәненде көтөп кенә торалар. Вузды тамамлағанда кемеһе йырлай, кемеһе бейей, кемеһе ҡурай-ҡумыҙҙа уйнай һ.б. Төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнеүсе студенттар, йолаларыбыҙҙы, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе белеп, киләсәккә ҙур маҡсаттар ҡуйырға өйрәнеп, төрлө һөнәр эйәләре булып уҡып сыға һәм сәйәсәткә лә яҡынлаша. Ҡасандыр Мифтахетдин Аҡмулла, Зәки Вәлиди бөтөн төрки донъяһында абруй ҡаҙанған икән - ни өсөн бөгөн башҡорт бахыр хәлендә булырға тейеш? Республиканың төп халҡы вәкиле булараҡ, иң алғы рәттә һеҙ булырға тейешһегеҙ, һеҙҙән

дән биҙҙереүгә алып килә. Ниндәй генә дәреслекте алып ҡарама - башынан аҙағына тиклем шау теория: ҡағиҙә - ике-өс күнегеү, ҡағиҙә - ике-өс күнегеү. Күнегеүҙәр ҙә шул теорияла аңлатылған һөйләмдәрҙе табыуға, шуға ярашлы итеп үҙгәртеүгә ҡайтып ҡала. Ләкин бөтөн предметтар рус телендә уҡытыла икән - берҙән-бер башҡорт теле дәресендә балаларға башҡорт тормошо, уның мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәте, телдең үҙенсәлеге тураһында һөйләргә һәм шул телдә фекер йөрөтөргә, ижад итергә, ижади эштәр эшләргә өйрәтергә кәрәк. Юғары белем-

**▸ Бөгөнгө заманда телевидение, кино, театр, интернет аша ла туған телде өйрәнергә була. Башҡорт телен шул юл менән дә өйрәнеү мөмкинме?**

**В. Хажин:** Бөгөн, ысынлап та, башҡорт ауылындағы мәктәпкәсә йәштәге балалар ҙа рус телен белә. Иртәнән-кискә тиклем рус телендә йәнһүрәттәр ҡарайҙар һәм был тел уларҙың аңына һеңгән, русса һөйләшергә өйрәтеү өсөн уҡытыусының әҙ генә тырышлығы ла етә. Ту-

***✓ Беҙ баланы һөйләшергә өйрәтеү урынына башҡорт теле дәресенән биҙҙереү дәресенә әйләндерәбеҙ. Әгәр теория кәрәк булһа, бала уны үҙе лә белергә тырыша, ә инде кәрәге юҡ икән - бының бер зыяны ла юҡ.***

ған телде өйрәтеү өсөн күп көс һалырға кәрәк, сөнки ата-әсә, күрше-күлән һеңдергән ҡараш эште ҡатмарлаштыра. Әгәр һинең телең ауылды сыҡҡансы ғына кәрәк, тигән ҡараш йәшәй икән - туған тел яҙмышы шундай кешеләр ҡулына ҡалһа, телдең яҙмышы бик аяныслы. Әгәр беҙҙә "Тамыр" каналының башҡортса тапшырыуҙары, йәнһүрәттәре пропагандаланһа, өйҙә тик башҡортса тапшырыуҙар, йырҙар яңғырап торһа, балаларҙы шул мөхиткә, телгә өйрәтеп була.

**Л. Сәмситова:** Һәр бер өйҙә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һөйләп торорға тейеш, тип уйлайым. Һәр хәлдә, ял көндәрендә беҙҙең өйҙә көн оҙоно "Юлдаш", "Ашҡаҙар" радиоканалдары йәки Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һөйләй, күрһәтә. Өҫтәлдә гәзит-журналдар теҙелеп ята. Бала, бәләкәйҙән алып ошондай мөхиттә йәшәп, ата-әсәһенең башҡорт матбуғатын уҡыуын, башҡортса йырҙар тыңлағанын күрә, үҙенә һеңдереп йөрөй икән - белем биреү методикаһы бик ҡатмарлы, тиер инем. Ләкин тап бына шул юлдан китергә кәрәк. Әгәр уҡытыу башҡорт телендә барһа, күнегелгәнсә уҡытыуҙың да бер зыяны ла булмаҫ ине. Әгәр бөгөн башҡорт теле берҙән-бер ошо телдә һөйләшә торған дәрес булып ҡалһа, әлеге программа менән уҡытыуыбыҙ енәйәткә тиң була. Беҙ баланы һөйләшергә өйрәтеү урынына башҡорт теле дәресенән биҙҙереү дәресенә әйләндерәбеҙ. Әгәр теория кәрәк булһа, бала уны үҙе лә белергә тырыша, ә инде кәрәге юҡ икән - бының бер зыяны ла юҡ. Йәғни балалар өсөн теорияның кәрәклеге ул тиклем үк, беҙ бирергә тырышҡан кимәлдә көнүҙәк түгел. Теорияны өйрәткән хәлдә инде, уны баланың мәңге хәтерендә ҡалырлыҡ, онотмаҫлыҡ итеп бирергә кәрәк. Мәктәптә лә, вузда ла балаларҙы үҙемдең методика менән уҡыттым, ҡатмарлы терминдар һәм теориялар менән баштарын ҡатырманым. Әммә улар теория буйынса бөтөн нәмәне белде. Теориянан торҡәл-әйтемдәр, фразеологик берәмектәр, әҙәби әҫәрҙәр һ.б. ала. Бына ошолар коммуникатив системаның нигеҙендә ята. Белем биреү ошо йүнәлештә алып барылһа, бер бөтөн система килеп сығасаҡ.

Шулай уҡ күп нәмә уҡытыусынан тора. Ҡайһы берәүҙәр мәктәптә генә түгел, вузда ла башҡорт теленән кем уҡытҡанын иҫләй алмай. Иҫләй алмай икән - тимәк, уҡытыу кимәле лә шундай ғына булған.

Тағы шуны әйтер инем: күптән түгел генә аспирантым Азалия Хурамшина Владимир ҡалаһында халыҡ-ара грант отто, һәм халыҡ-ара "Аҡмулла" клубын ойошторҙоҡ. Унда башҡа факультет студенттары ла йөрөй. Улар бында шөғөлләнеп кенә ҡалмай, Башҡортостандың гимнын башҡортса йырлайҙар икән - тимәк, сит милләт вәкилдәрендә лә телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләп була.

**В. Хажин:** Ҡала мәктәптәрендә дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытабыҙ. Был күберәген сәйәси факт, әле берәүҙең дә

**Л. Сәмситова:** Бында Ырымбур егете Вячеслав Чернев хаҡында әйтеп үтер инем. Ул "беҙҙә, башҡорттарҙа" тип һөйләргә ярата, телмәренә бер рус һүҙе ҡушмай һөйләй. Тиҙҙән Польшала башҡорт телен уҡыта башлаясаҡ, башҡорт үҙәге асыу хыялы менән яна. Әгәр ярым рус, ярым йәһүд кешеһе Польшала башҡорт телен уҡытып йөрөй икән - башҡорттарға нимә ҡамасаулай һуң? Йәки заманында беҙҙең факультетты тамамлап, бөгөн Төркиәлә генә түгел, бөтөн донъяла башҡорт телен пропагандалап йөрөүсе, вуздарҙа башҡорт бүлектәре асыусы Исмәт Бинәрҙе алайыҡ. Ул да, "мин башҡорт телен күтәрәм, башҡорт теле мине күтәрә", тип ҡабатларға ярата. Ә ниңә ситтәргә кәрәк булған тел башҡорттоң үҙенә кәрәкмәҫкә тейеш?..

**▸ Тимәк, кәрәк булһа, кеше теләһә ниндәй телде өйрәнә ала. Бында төп проблемаларҙың береһе, бәлки, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" һәр кемдә булыр ине, моғайын...**

**В. Хажин:** Әлбиттә, өйрәнерҙәр ине. Ҡаҙанда беренсе тапҡыр уҙған быуаттың 80-се йылдарында булдым. Ул заманда Өфө урамдарында бер туҡтауһыҙ башҡортса ла, татарса ла телмәрҙәр ишетелә ине. Ә Ҡаҙанда бер ҡайҙа ла татарса һөйләшкән кеше осраманы. Таныштарым яңы ғына Ҡаҙанда булып ҡайтты, улар тик татар телендә һөйләшәләр, рус телендә һораһаң, яуап бирмәйҙәр, тиҙәр. 20 йыл эсендә хәл-торошто тамырынан үҙгәртеүгә өлгәшкәндәр, тимәк. Ә нисек үҙгәрттеләр? Сөнки закон эшләй.

**Л. Сәмситова:** Беҙҙә закондар ҙа эшләмәй, кешеләр ҙә үҙҙәренең хоҡуҡтарын белмәй. Ике студентыбыҙ балалар баҡсаһына эшкә барғайны, үҙ-ара башҡортса һөйләшеп торғанда, мөдирҙәре, башҡортса һөйләшмәгеҙ, тип иҫкәртеү яһаған. Шундай осраҡтарҙа матур итеп яуап бирә белергә лә кәрәктер, сөнки башҡорттарға үҙ-ара башҡортса һөйләшергә ярамай, тип ҡайҙа

# ҮҪТЕМ, ТОРАМ БӨГӨН ДӘ...”

## һалыныуы мотлаҡ

ул да артабан ошоларҙы уҡ ҡабатлаясаҡ. Баланы бит, һин шулай ит, былай ит, тип тәрбиәләмәйһең, ул һинең нимә эшләгәнеңде, ғәмәлдәреңде ҡабатлай...

**▸ Башҡорт телен уҡытҡанда грамматикаға ныҡ иғтибар бирелеп, уның коммуникатив яғы күҙ уңынан ысҡындырыла, тибеҙ. Ләкин мәктәпте тамамлаусы һәр уҡыусы телсе була алмай, әммә ул үҙ телендә һөйләшергә, уйларға, фекерен аңлатып әйтеп бирергә тейеш. Был теманы заманында Кәрим Булатов күтәреп сыҡҡайны, әммә уға һаман да иғтибар биреп еткерелмәй.**

**В. Хажин:** Кәрим Хыял улы ғына түгел, ул мәсьәлә буйынса хәҙер мин үҙем дә 40 йылға яҡын шөғөлләнәм, ләкин әлегә тиклем беҙҙең әйткәндәрҙе ишетеүсе лә булманы. Рус телендә уҡыған башҡорт балалары өсөн башҡорт теле дәреслеге авторҙарының береһе булараҡ, унда иғтибар һөйләшеүгә, телмәр үҫтереүгә, башҡорт тормошон һүрәтләүгә йүнәлтелгән. Теория бик әҙ, кәрәкле кимәлдә һәм баланың иҫендә ҡалырлыҡ ҡына итеп бирелгән. Ә әлеге ваҡытта ҡулланылған дөйөм дәреслектәр ҡалыплашҡан теория буйынса яҙылған. Бындай дәреслек яҙыуы бик еңел: фонетиканан башлайһың да стилистика менән тамамлап ҡуяһың, тема һөйләйһең дә күнегеүҙәр эшләтәһең. Әле беҙ бик еңел юл менән барабыҙ. Ә бала фекерләй, юҡ ҡына урында ла ниндәйҙер ижади эш эшләй алырға тейеш. Шуға ла коммуникатив ған дәреслектәр ҡайҙан килеп сыҡҡан? Элек дәреслек яҙыу тәжрибәһе булмаған, ҡағиҙәләрҙе рус теле дәреслегенән алғандар ҙа башҡорт теленә күсергәндәр. Рус теленең орфографияһы ҡатмарлы, шуға уны ҡатмарлы итеп бирәләр. Ә ниңә беҙҙә булмаған нәмәне ҡатмарлы итеп бирергә? Шундай юл менән барып, беҙ балаларҙы телде яратмаҫлыҡ хәлгә килтереп еткерәбеҙ.

уларҙы башҡорт теленә өйрәткәне юҡ. Бында һүҙ башҡорт балаларының башҡорт телен өйрәнеүе тураһында барырға тейеш. Беҙҙең телде, әгәр кәрәк булһа, башҡа милләт кешеләре шунда уҡ өйрәнә. Кәрәк булмаһа, уны көсләп өйрәтә алмайһың. Мәктәптәрҙә сит ил телен күпме уҡыталар, кәрәк түгел, тип уйлайһың икән - уны бер нисек тә үҙләштермәйһең. Шуның кеүек, сит милләт балаларына башҡорт теле кәрәк түгел икән - улар уны өйрәнмәйәсәк тә, белмәйәсәк



***Сит милләт балаларына башҡорт теле кәрәк түгел икән - улар уны өйрәнмәйәсәк тә, белмәйәсәк тә. Кешенең үҙенең теләге булырға тейеш. Ләкин үҙебеҙҙең башҡорт балаларын башҡорт теленә өйрәтергә тейешбеҙ, ни өсөн тигәндә, уларҙың телгә ҡарағанда мәҙәниәтте белеүе, үҙен башҡорт итеп тойоуы кәрәк. Әгәр кеше үҙен башҡорт итеп тойһа, ул телде өйрәнә. Силәбелә Владимир Вафин тигән яҙыусы бар, рус телендә яҙа, телде белмәй ине. Үҙен шул тиклем башҡорт итеп тоя, яйлап-яйлап башҡортса өйрәнеп, һәр хәлдә, аралаша алырлыҡ кимәлгә етте, сөнки уға ҡан менән башҡортлоғо һеңгән. Юҡҡа ғына, йән тартмаһа, ҡан тарта, тимәйҙәр бит.***

**Л. Сәмситова:** Коммуникатив система күберәк рус мәктәптәренә хас булырға тейештер, сөнки рус балаһына бер туҡтауһыҙ грамматиканы өйрәтеп, кире ҡараш тәрбиәләп ҡуйыуыбыҙ ихтимал. Әммә башҡорт мәктәбендә, хатта рус мәктәбендә лә, теория кәрәк. Грамматиканы белмәйенсә тороп, башҡа нәмәне белеп булмай, шуға күрә улар параллель рәүештә барырға тейеш.

Әлеге ваҡытта лингвокультурологик йүнәлеш әүҙем үҫешә. Ул башҡорт тел ғилемендә яңы өйрәнелә башлаған, һәм уны ни эшләптер рустарға эйәреү тип ҡабул итәләр. Ул үҙ эсенә мә- тә. Кешенең үҙенең теләге булырға тейеш. Ләкин үҙебеҙҙең башҡорт балаларын башҡорт теленә өйрәтергә тейешбеҙ, ни өсөн тигәндә, уларҙың телгә ҡарағанда мәҙәниәтте белеүе, үҙен башҡорт итеп тойоуы кәрәк. Әгәр кеше үҙен башҡорт итеп тойһа, ул телде өйрәнә. Силәбелә Владимир Вафин тигән яҙыусы бар, рус телендә яҙа, телде белмәй ине. Үҙен шул тиклем башҡорт итеп тоя, яйлап-яйлап башҡортса өйрәнеп, һәр хәлдә, аралаша алырлыҡ кимәлгә етте, сөнки уға ҡан менән башҡортлоғо һеңгән. Юҡҡа ғына, йән тартмаһа, ҡан тарта, тимәйҙәр бит.

**закон ҡабул ителгәндә текстан башҡорт телен белгән етәкселәргә эш хаҡына 15 процент өҫтәмә түләү тураһындағы пункттың төшөрөлөп ҡалдырылыуындалыр. Татарстанда ул һаҡлана, әле удмурттар шундай өҫтәмә индереүҙе күҙаллай. Закон ҡатып ҡалған нәмә түгел, хатта Конституцияға үҙгәрештәр индерелгәнде, уға ла үҙгәрештәр индерелһә һәм юғары вазифа биләүсе етәкселәргә шундай талап ҡуйылһа, мәсьәлә үҙенән-үҙе хәл ителер ине, телде өйрәнеү ихтыяжы**

яҙылған? Был үҙе үк хоҡуҡ боҙоу булып тора бит. Беренсенән, телебеҙ тыйылған тел түгел, икенсенән, ул рус теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле...

**В. Хажин:** Әлбиттә, телебеҙҙең бөгөнгө торошо, уның ҡулланылышы ла, уға булған ҡараш та бынан 20 йыл элекке ваҡыт менән сағыштырғанда бер ни тиклем һүлпәнәйеберәк тора. Ләкин бөгөн Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында башҡортса 72 мең һүҙ йыйылған, 20 томға етерлек әкиәттәребеҙ бар, 40 эпосыбыҙ бар. Ер шарында 100 халыҡта ғына эпос бар. Бер нисә халыҡта ғына - икешәр, ә беҙҙә - 40 эпос. Шундай тел байлығына эйә булып, беҙҙең уны бер нисек тә бөлдөрөргә хаҡыбыҙ юҡ. Әлеге һүлпәнлекте ваҡытлы күренеш тип ҡарарға кәрәк, сөнки тормошта бөтөн нәмә тулҡын рәүешендә килә. Ҡасан ғына Өфөлә башҡортса һөйләшһәң, ҡайҙан килгән был башҡорт, тип аптырайҙар ине. Бөгөн, һәр хәлдә, ундай һорау бирергә бер кемдең дә башына инеп сыҡмай. Тимәк, артабан да ыңғай үҙгәрештәр булыр, тип ышанайыҡ. Тик бының өсөн иң тәүҙә үҙебеҙ, һәр башҡорт кешеһе, үҙе көс һалырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бөгөн беҙ Рәми Ғарипов рухы менән йәшәргә тейешбеҙ. Шундай рух етмәй беҙгә, -тигәйне әңгәмә барышында Луиза Хәмзә ҡыҙы. - Шағир ул рухты беҙгә аманат итеп шиғырҙарына һалып ҡалдырған икән ошо рухи өлгөгә йышыраҡ күҙ һалырға, ҡабатларға, ҡабатларға, тағы ла ҡабатларға кәрәк". Был һүҙҙәр менән килешмәү мөмкин түгел.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Кемдәрҙелер килеп алалар, икенселәр хаҡында белешеп торалар, өсөнсөләре үҙҙәре үк яраҡһыҙ булып сыға. Тик шулай ҙа берәүгә лә кәрәкмәгән һәм бер ерҙә лә көтөлмәгән әҙәм баштары барыбер ҙә күберәк шул.***



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# АЛДА ҒҮМЕР БАР ӘЛЕ

ПОВЕСТЬ

Шул теләгән тормошҡа ашырыу өсөн янып йөшәй башланы ул хәҙер. Иң башта интернет аша ағзалар эҙләүсе сит ил клиникаларының, шәхси клиенттарҙың яҙмаларын уҡып, өйрәнеп сыҡты. Унан аноним сайт булдырып алып, улар менән һаҡ ҡына бәйләнешкә инде, талап ителгән тауарҙарҙың хаҡтарын белеште. Аптыраны егет! Бындай суммаларға ағзалар һатһа, уларҙың дауаханаһы күптән фантастик халәткә инер ине. Ә улар хан заманындағы ҡорамалдар менән эш итә. Шул уҡ ваҡытта аҙмы халыҡ һап-һау ағзаларын ҡәбергә алып китә. Ниңә шуларҙы ҡулланып ҡалмаҫҡа? Ниңә файҙаланмаҫҡа? Кем белә уны? Ҡуйғанда яҡындары үлгәндең эсен асып, ағзаларын теүәлләп торамы? Ярамай, имеш, закон тыя. Ниңә ул закон башҡаларҙы йөҙ төрлө енәйәт эшләүҙән тыймай? Ә уны, ярлы табипты, берҙән-бер яҡтыға сыға алыу хоҡуғынан мәхрүм итә. Төкөрҙө ул ундай законға!

Хәҙер инде төн йоҡоларын йоҡламай план ҡорҙо Богдан. Артыҡ борсолоуҙарҙан ҡулдары ҡалтыранды, ирендәре тартышты. Бөгөнгөндәге операцияға әҙерләнгән ауырыуҙарын бик ентекле өйрәнде, һәр береһе менән ҡат-ҡат һөйләште, ғаилә хәлдәрен, уй-ниәттәрен белеште. Уның был тырышлығы ла юҡҡа китмәне. Бик иғтибарлы, миһырбанлы табип булараҡ даны таралды ҡалала. Ауырыуҙар башҡаларҙы урап үтеп уға эләгергә, уның өҫтәленә ятырға ынтылды. Шулай маташа торғас бер аҡылы инәле-сығалы булған ауырыуын бөйөрөн алып ташларға кәрәк икәнлеккә инандырҙы. Әлбиттә, ураған һайын йыға һуҡҡан приступтарҙың табип биргән дарыуҙарҙан икәнлекте төшөнөүсе булманы. Операцияны ике медсестра ярҙамында башҡарҙы ла, егерме минут эсендә кәрәкле ерен һуйып та алды. Нимә тигәндә лә үҙ һөнәренең оҫтаһы бит әле. Операцияларҙы тиҙ һәм дөрөҫ яһай, ҡулы алтын уның. Эштең был этабы тамам булғас, тауарҙы яйлы урынлаштырыу өлөшөнә тотондо. Был яғы оҙаҡҡа һуҙылманы, булғанды алыусы ике көн эсендә табылды ла, алдан һөйләшелгән ҡаланың килешелгән урынында ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйылғас, донорҙы ҡабул итеп алып, аҡсаһын күсереп тә ҡуйҙы. Иҫәптәге һандарҙың нулдәрен һанай-һанай, сисеп алырға батырсылыҡ итә алмай йөрөнө... беренсеһен. Башҡаларын систе, шулай тейеш булғанса, эре генә, мәртәбәле генә һалып алып сығып китте банктан.

Йылдар үтә торҙо. Сауҙа нығына, киңәйә барҙы. Яйлап, бик-бик һаҡ ҡыланып ярҙамсылар һайлап алынды. Берәүҙәр клиенттар тапты, икенселәр уларҙы урынлаштырыуҙы йүнләне. Тора-бара ағзаларҙы улай урлап алыу ғына аҙ булды, йөрәк, бауыр, умыртҡа өлөштәре кеүектәргә заказдар килде һәм был аҙымды ла яһатты Богдандан шайтан. Машина аҫтында ҡалған иҫеректең әле туҡтап өлгөрмәгән йөрәген ысҡындырҙы ла алды берҙән-бер көндө. Ә тырышҡанда ул әҙәмде ҡотҡарып алып ҡалып була ине. Тырышты, тик терелтеү өсөн түгел, ә эҙ яҙҙырыу, ялған ҡағыҙҙар тултырыу, туғандарын ышандырыуға. Ышандылар инде. Төн йоҡламай операция үткәреп, күҙҙәренә тура ҡарап йәндәренә үтерлек һүҙҙәр табып һөйләшә белгән табипҡа кем ышанмаһын.

Тора-бара, бизнесҡа даими клиенттар кәрәк була башлағас, Богдан, өлкәнең бер районындағы ташландыҡ психбольницаны биләмәһе-ние менән һатып алды ла, бер аҙ төҙөкләндереү эштәре үткәргәс, эскелек, наркомания кеүектән дауалау һәм реабилитация үҙәге итеп теркәне. Гәзиттәргә биргән иғландарында "тормош ауырлыҡтарына осрағандарға бушлай ярҙам итәбеҙ" тип тә өҫтәне. Белә бит инде ул хәҙер халыҡтың нимәгә ҡабырын һәм бында кемдәр килерен дә. Шулай булды ла. Теләгәндәр, инде был афәттән сыға алмаҫын аңлағандар, үҙҙәре эҙләп тапһа, теләмәгәндәрҙе туғандары, ата-әсәһе йәки киреһенсә, балалары алып килеп ташланы. Бәйләп тә, йоҡлатып та, көсләп тә килтерҙеләр. Ҡайһы саҡ ҡайҙа итергә белмәгән йорт-ерһеҙ берәҙәктәрҙе полиция үҙе үк ҡалдырып китте. Бында иһә уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршыланылар. Ентекле табип тикшереүҙәре үткәрҙеләр, йыуып-таҙалап алдылар, ашаттылар. Дауаланыу барышында ауырыуҙар хужалыҡта кем нимә башҡара ала, шуның менән шөғөлләнде. Ә эш бында етәрлек, күңеленә ятҡанын һайлап ал. Мал, ҡош-ҡорт, йәшелсә баҡсалары, ағас, тимер оҫтаханалары ла тотола. Өс-дүрт айҙа килгәндәрҙең күҙҙәре асыла, төҫ керә, сәләмәтлектәре нығый. Үҙҙәрен яңы тормошҡа ҡайтарған табипты улар аллаһы иҫәбенә күрә башлай, уның һәр әйткәнен үтәп, ауыҙына ҡарап ҡына торалар. Шундай кимәлгә етеп һауыҡҡандар ҡайтарыла. Әлбиттә, улар шулай уйлай. Ысынында бындағылар менән хушлашып сыҡҡан клиентҡа йоҡо дарыуы эсереп алып сығыла һәм, ул юлда иҫен юйғас, бөтөнләй икенсе йүнәлештә алып кителә. Икенсе нөктәлә уны шундай уҡ ябыҡ биләмәләге клиниканың подвалында күҙ асып йомған арала ағзаларға таратып та һалалар. Шуның менән эш тә бөтә, бар ине кеше, вәт, хәҙер юҡ.

Әлбиттә, тәрбиәләнгән ауырыуҙарҙың барыһын да был һуңғы нөктәгә еткереп булмай. Кемдәрҙелер килеп алалар, икенселәр хаҡында белешеп торалар, өсөнсөләре үҙҙәре үк яраҡһыҙ булып сыға. Тик шулай ҙа берәүгә лә кәрәкмәгән һәм бер ерҙә лә көтөлмәгән әҙәм баштары барыбер ҙә күберәк шул. Тап шулар Богдан Радионовичҡа яҙғандары була ла инде.

Альбинаны осратҡас, был шөғөлөн ҡуйырға тигән ҡарарға килгәйне, сөнки һуңғы ваҡытта уның бизнесы менән ҡыҙыҡһынғандар барлыҡҡа килде кеүек. Анау бер баланың атаһы тәфтишсе булып тороуын әйт. Уның ҡыҙына тәғәйенләнгән йөрәкте ҙурыраҡ хаҡ биреүселәргә осорғайны бит. Соҡсоноп алды ла китте. Ир башта ҡайғыһынан аҡылдан яҙыр кеүек ине, Богдан биргән дарыуҙар быға ярҙам да иткәйне. Тик ҡәһәрең ныҡыш булып сыҡты, ҡаңғырып йөрөй торғас, халәтенә лә ҡайтҡан, мәғлүмәтселәр килтергән хәбәрҙәр буйынса ҡатынын да барып алған икән. Темеҫкенә хәҙер Богдандың шөғөлө тирәһендә ошо әҙәм.

Бөгөндән клиникаһын ябыр ине лә, әле һуңғы партияһындағылар бигерәк оҡшай табипҡа. Нәфсе тигән нәмә үҙенекен итә. Ҡалала эшләгән агенттары парк ҡыуышында ҡунып йөрөгән йәш ҡатынды табып алып килгәйне. Тауар һап-һау булып сыҡты, етмәһә, үҙе үк "йөк" менән. Яңы тыуған бала ағзалары был баҙарҙа бриллиант хаҡында. Бынан алда алып килгән ике наркоманканың аналығын "ремонтлап" булышһа, ошондайы килеп ҡапҡас, тегеләрен башҡа файҙаға ебәрҙе лә, бөтөн иғтибарын яңы бушанған ҡатынға йүнәлтте. Хәҙер бер-ике айҙан уныһы ла ҡулланыуға әҙер буласаҡ. Мәғлүмәтселәре хәбәренсә, йәш иргә әүрәгән әсәһенә ҡыҙының ҡайҙа булыуы ҡыҙыҡ та, кәрәкле лә түгел. Үҙенә көндәш итеп күргәнде нисек сығарып ебәргән булһа, шулай онотҡан.

Уйламаҫтан үҙе килеп ингән әзмәүерҙәй мосолман егете лә оҡшай хирургҡа. Имән кеүек таҙа, үгеҙҙәй көслө. Был тауарҙы баҙарға бер сауҙаһыҙ сығарырға була ла, ураған һайын туғандарына шылтыратып ҡына аптырата уныһы. Ҡайҙалыр туған яҡтарында апайым көтә, тигән була. Көтһә көтәләр, артыҡ эскегә һалышмаған әле ул. Бары тик кисерелгән нервы стрестары һәм контузияһы ғына ҡамасаулай. Уларынан да сығып бара инде. Тыштан ғына түгел, эстән дә көслө егетең, саҡ ҡына этәргестән: бер аҙ психолог менән аралашыуҙан һәм тынысландырғыс препараттарҙан яйға килеүгә ыңғайланы ла. Аҡылы булһа, бынан ары эсмәҫ тә ине әле. Моғайын. Тик Богдан Радионовичҡа "моғайын" кәрәк түгел, уға сифатлы тауар, күп аҡсалар кәрәк, бик-бик кәрәк. Һәм ул ҡорбандарын бер ни хаҡҡа ла ысҡындырмаясаҡ.

* * *

Көн дә табип тупһаһын тапай торғас, Сафия бәпәйенең кәүҙәһен таптырып алды. Богдан Радионович уны шәхсән үҙе алып килеп бирҙе. Кескәй генә табут эсендә аҡ сепрәктәргә ныҡлап төрөлөп, сит-ситтәре тегелеп үк ҡуйған ине. Хужа санитарҙарға ҡыҙ күрһәткән ергә алып барып күмергә ҡушты. Сафия ҡабаланып берәүҙе Булат артынан йүгертте. Табипҡа был оҡшаманы.

- Үлек былай ҙа оҙаҡ тотолдо, көнө буйы юлда килде, әйҙә, тиҙерәк ер ҡуйынына оҙатайыҡ, - тине ул үҙенә хас булмағанса ҡоро итеп.

- Мин ерләүҙең рәтен белмәйем, көтәйек инде, - тип инәлде ҡыҙ.

Ул арала өҫтөндәге әпилкәләрен ҡаға-ҡаға Булат йүгереп килеп етте.

- Күрҙеңме?

- Юҡ... - ҡатын бер соҡор сितендәге табутҡа, бер табипҡа ҡараны.

- Богдан Радионович, күҙ һалырға яраймы? - Булат табутҡа килеп үк тотондо.

- Һин нимә! - тегеһе уйламағанда ҡыҙып китә яҙҙы. - Ниңә әсәне өҙгөләргә?..

- Сафия ҡарамаҫ, мин генә... Танныйым бит уны, - тип һаман ҡуймаһы Булат.

Шул ваҡыт Богдан Радионовичтың тамам түҙеме бөттө һәм ул санитарына "күм" тигәнде аңғартты. Тегеһе көрәккә тотонғайны ғына Сафия алдына төштө:

- Юҡ! Булат күмһен!

Егет кескәй ҡәбер төбөнә ҡыялатып өң яһағас, ынтылып табуттан аҡ төргәкте алды. Ике усында ғына күсергән кәүҙә үтә еңел тойолдо уға. Шуға аптырап ҡапыл ҡарашын өҫкә күтәрҙе лә күҙҙәрен киң асып ҡатып ҡалған табипҡа һирпелеп ҡараны. Барыһы ла ауыр кисерә, буғай, бала ерләүҙе. Аҙаҡ Булат ләхет таҡталарын теҙеп, белгән генә бисмиллаһын ҡат-ҡат ҡабатлап бит һыпырҙы ла, бер-ике ус тупраҡ ташлағас, көрәкләп күмеп ҡуйҙы. Сафия, хәсрәте һағышлы күҙҙәренән түгелеп, яулығы менән ауыҙын ҡаплап торһа ла, иламай ине инде. Әле ныҡлы аңлап та, өйрәнеп тә өлгөрмәгән сабыйын юғалтыуға күнгәйне, күрәһең, ҡатын.

Киске аш ваҡытында Сафия егет өйрәткәнсә хәйер таратып сыҡты. Хәйерлек ҡульяулыҡтарҙы машинкала үҙе теккәйне. Күптәрҙең бындай йоланы ишеткәне-күргәне булмаһа ла, бәпәй тарихын белгәнлектән, хөрмәт йөҙөнән рәхмәт әйтеп ҡабул итте. Сафияның күңеле күтәрелә төшкәйне, аралашырға теләге булыпмы, аштан һуң ҡабаланып алдан төшөп атлаған Булаттың еңенән тотто:

- Булат, нимә булды? Өҫтәл артында ла өндәшмәнең?

Егет әйләнде лә ни әйтергә белмәне, үҙе бында булһа ла уйҙары ҡайҙалыр ҡырҙа ине уның. Тора биреп тә һүҙ тапмағас, еңен иплән кенә тартып ысҡындырҙы:

- Эш бар. Һин... бүлмәңә ҡайт.

Нимә булғанын был ваҡытта Булат үҙе лә аңлата алмаҫ ине. Тик булды, нимәләр булды уға. Уны ниндәйҙер ҡотолғоһоҙ бер тойғо биләп алды ла ысҡындырмаҫтан ҡыҫып тотто. Йөрәге һеркелдәп нигәләр әҙерләнде әллә. Хәҙер-хәҙер йә ҡапыл ер тетрәр, йә дауыл сығыр тип көткән кеүек. Ҡайһы мәл, ҡай арауыҡта башланды һуң әле был тойғо? Ҡайһы?.. Ҡаҙғанда... төшөргәндә... эйе! Бәпәйҙе ҡәбергә төшөргәндә... устары нимәләр тойҙо бит һуң. Төргәк эсендәге кәүҙәнең нисектер төйөрөм түгеллеген. Эйе шул... Үтә еңеллектән хатта ырғытып ебәрә яҙҙы. Аптырап Богдан Радионовичҡа ҡарап ҡуйҙы. Ә ул?.. Ул бит... ҡурҡҡан инеме... Ҡурҡҡан ине шул. Ни өсөн? Төшөрөп ебәрә яҙғанғамы? Әллә... Юҡ. Ҡулға алғанға. Ыһы... Тимәк, табип бала кәүҙәһен табуттан алырҙар тип уйламаған. Ул уны шул йәшнигендә көйө күмеүгә өмөт иткән, сөнки мосолман йолаһын белмәгән. Ә Булат уны күтәрҙе һәм...ни икәнлеген аңламаны.

...Шәмһеҙ-ниһеҙ соҡона торғас, ниһайәт, ләхет таҡталарына барып төртөлдө. Уларҙы ла ҡайырып асҡас, төпкәрәк ынтылып һәрмәләнеп сепрәк төргәкте тапты. Тартып сығарып алдына һалды ла, бер тәрән итеп тын алғас "Хоҙайым, ғәфү ит" тип шыбырлап, тегелгән еренән ептәрен йолҡа тартып һүтеп ебәрҙе. Тоноҡ ай яҡтыһында төргәк эсендәгенең йөҙө ағарып күренде. Ҡалтыранған бармаҡтары менән битте һыйпап ҡарарға иткәйне, ҡулы аңлайышһыҙ йомшаҡ нәмәгә тейҙе. Ултыра торғас, аңына нимәләр барып еткән егет, төргәктең аҫҡы яғын тағатып ташланы ла, яҡшыраҡ күреү өсөн эйелеп, мәйетте ике ҡуллап алып ҡарамаҡсы булды. Һәм шул секундында уҡ, берәү йоҙороҡлап һуғып ебәргәндәй булып артҡа тайшанды. О, Аллаһ! Уның алдында ҡәҙимге сепрәк ҡурсаҡ оло күҙҙәрен шар асып йылмайып ята ине...

Ярты сәғәттән кескәй ҡәберлек кире элекке хәленә ҡайтып, күңелһеҙ генә убасыҡ булып ятып ҡалды.

**(Дауамы бар).**

✓ Эстрадала һәр кем үҙенә үҙе юл ярырға тейеш, тиҙәр ҙә ул, тик дәүләттең иғтибары ла мөһим. Йырсыларҙы берләштереүсе ниндәйҙер бер ойошма ла кәрәктер. Йыр сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индереүсе меценаттар ҙа юҡ.



ИЖАДХАНА

**Уны тамашасылары шул тиклем яратып, үҙ итеп, "һандуғас" тип йөрөтә. Ахыры, моң өсөн һинең йөрәгеңдең ҙурлығы түгел, хистәр кисерергә һәләтле булыуы кәрәклеректер ул, моғайын, тип уйлайһың уны тыңлаған һайын. Башҡорт эстрадаһының иң матур тауыштарының береһе, йәш йырсы Фәриҙә ҒАЗЗАЛОВА менән сәнғәт, башҡорт эстрадаһы, уның үҙенең тормошо тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ҺАҒЫНЫУ ХИСЕ...

## йырҙарымды моңһоу итә



### Әй ҡыҙы

Мин Салауат районы Лағыр ауылында Әй һыуын эсеп, Әй һыуын ҡойоноп үҫтем. Бала саҡ ниндәйҙер бер мөғжизә, бәхетле мәл булып хәтерҙә ҡалған. Хәҙер мине һәм һеңлемде тәрбиәләп үҫтергән олатай менән өләсәй иҫән түгел, улар булмағас, өйҙәң дә йәме юҡ, йыш ҡайтып та булмай. Ваҡыт булғанда туғандарға ҡайтырға тырышһаҡ та, танһығымды был ғына баҫа алмай. Ауылым иҫемә төшһә, бәрерҙәр өҙәлә, нишләптер, кендек ҡаны тамған ер күңелемә яҡын. Ошо һағыныу хисен йырҙарыма ла һаламдыр, сөнки минән, ни эшләп йырҙарың шул тиклем моңһоу, тип йыш һорайҙар. Ауылым, туғандарым төшөмә генә инһә лә ҙур шатлыҡ кисерәм. Холҡомда салауаттарға ғына хас саялыҡ бар, һары башҡорттар, тип йөрөтәләр беҙҙе. Беҙҙә халыҡ шаян да, шул уҡ ваҡытта ҡаты ла була белә.

Тауышым барлығын кемеһе алдараҡ күргән-тойғандыр, һәр хәлдә, мине ун йәшемдә генә Өфөгә уҡырға ебәрҙеләр. Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернатында уҡыным. Унда Тәнзилә Үҙәнбаева тәүләп миңә халыҡ йырҙарын өйрәтә башланы. Тәнзилә Хәмит ҡыҙы хәстәре менән беренсе тапҡыр бәйгелә ҡатнаштым, "Ирәндек моңдары"нда 3-сө урын алдым, ул ваҡытта миңә 12 йәш ине.

### Халыҡ йыры тураһында...

Әле лә башҡарам халыҡ йырҙарын, бигерәк тә "Зөлхизә"не яратам. Ғөмүмән, халыҡ йырҙарының ҡатын-ҡыҙ яҙмыштары тураһында һөйләгәндәре күңелгә яҡын. Арабыҙҙа быуаттар ятһа ла, мин Зөлхизәне лә, Ғилмизаны ла, Зәлифәкәйҙе лә, Сәлимәне лә аңлайым, улар тойғанды күңелемдән ҡабат-ҡабат кисерәм. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы бөгөн дә улар кеүек сибәр ҙә, уңған да, ҡыйыу ҙа, сабыр ҙа, илһөйәр ҙә, һөйгән йәренә тоғро ла булырға тейешлеккә инанғанмын.

Әле сәхнәлә башҡорт халыҡ йыры үҙенсәлекле бер үҙгәреш осоро кисерә. Бөгөнгө быуын тамашасыһының йырҙы тыңлауы ла үҙенсә, улар өсөн ритм мөһимерәк. Әлбиттә, халыҡ йырын уларға яраҡлаштырыу мөмкин булмаған хәл. Сөнки борондан уҡ шундай юғары, профессиональ кимәлдә эшкәртелгән һәм заманға яраҡлаштырып, яңыса аранжировкалар яһау уны боҙоуы ла бар, тигән хәүефтәрҙе мин ихтирам итәм. Эшләгәндә лә көнәшләшеп, ҡурай, баян ҡушыу дөрөҫөрәк булыр ине. Шуға ла әлегә заманса эшкәртелгән халыҡ йырҙарын йырларға ҡыймайым, бының өсөн тамашасы өлгөрөп етергә тейеш.

### Эстраданың үҙ ауырлығы

Өфө сәнғәт училищеһын тамамлағас, бер йыл Благовещен районында мәктәптә һәм балалар баҡсаһында уҡытып йөрөнөм. Уҡытыу эше оҡшап китте, үҙемде ошо һөнәрҙә таптым кеүек ине. Училищела төплө белем алаһың, классиканы ла, камера музыкаһын да, халыҡ йырҙарын да йырларға өйрәнәһең. Шулай ҙа юғары белем алырға кәрәклеген тойоп, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтына уҡырға индем. Шул уҡ ваҡытта мине "Гәлсәр һандуғас" проектында ҡатнашырға саҡырҙылар. Эстрадала ижад итеүҙең ауырлығын белгән булһам, аңлы рәүештә уға килер инемме икән, әйтә алмайым. Ошо проект мәлендә мине халыҡ таный башланы, сәхнәлә сығыш яһауҙың тәмен тойҙом, шуға ла мин уға ныҡ рәхмәтлемен. Училищела бергә уҡыған курсташтарым - Рөстәм Шаһыбалов, Рәдиф Зарипов, Айгөл Һағынбаевалар менән бергә ҡатнаштым "Гәлсәр һандуғас"та. Башҡорт эстрадаһы хәҙер яйлап үҫешә, талантлы, матур тауышлы йәштәр күп килә. Эстрадала һәр кем үҙенә үҙе юл ярырға тейеш, тиҙәр ҙә ул, тик дәүләттең иғтибары ла мөһим. Йырсыларҙы берләштереүсе ниндәйҙер бер ойошма ла кәрәктер, моғайын. Беҙҙең республикала йыр сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индереүсе меценаттар ҙа юҡ. Шуға ла эстраданың кимәле, йырҙарҙың, аранжировкаларҙың сифаты тураһында һүҙ йөрөтөүе ауырыраҡ.

### Яҡындарым һау булһын

Йырсыларҙы сәхнәлә лә, тормошта ла ныҡ әүҙем кешеләр, тип уйлаусылар хаталана. Мин шул тиклем өйҙә ултырырға, тәмле итеп ашарға бешерергә яратам. Ирем дә, улым да ваҡ бәлеш, ыумаслы аш яраталар. Улыма 5 йәш, уны бейеүгә лә, гимнастикаға ла, вокалға ла йөрөтәбеҙ. Мин күберәк гастролдәрҙә, шуға ла был бурыс атаһының иңендә. Малай булғас, миңә еңелерәк булды, ҡыҙ булһа, ҡалдырып йөрөүе ауыр булыр ине, тип уйлайым.

Буйым бәләкәй, шуға сәхнә кейемдәре таба алмай йонсой инем элек. Сәхнәлә лә, тормошта ла яҡын дуҫым булған Альбина Килдейәрова мине тегергә өйрәтте. Бөтөн костюмдарҙы уның бергә үҙебеҙ тегәбеҙ. Йырҙар ҙа яҙабыҙ. Ғөмүмән, Альбина бар яҡлап маһир, талантлы.

Ғүмер бер генә икәнен аңлап, матур итеп, татыулыкта йәшәргә кәрәк. Ниндәй генә ҡыйын хәлдәр булмаһын, бер нәмәне лә ҙур бәлә итеп ҡабул итмәйем. Туғандарың, яҡындарың, үҙең сәләмәт икән, донъяла барлыҡ проблемаларҙы ла еңеп сығып була. Ауырлыктар кешене ныҡыта ғына ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Йыр һәм моң халыҡтыҡы, шуға ла йырсы уны түкмәй-сәсмәй кире халыҡҡа ҡайтарырға тейеш, тип иҫәпләй Фәриҙә. Йырҙарына талапсан булыуы ла ошонан киләлер йырсының. Тамашасы иһә уны һандуғастай моңло булыуы өсөн үҙ итә. Нимә генә тиһәң дә, күңелдәрҙе моң ғына берләштерә, йыр ғына йәшәү көсө бирә ала.**

Ләйсән НАФИҠОВА
яҙып алды.

БАЛАМ ҺОРАУ БИРӘ

# КЕМДЕ НЫҠ ЯРАТАҺЫҢ?



Аш бүлмәһендә икәүләшеп кенә сәй эсеп ултырғанда, биш йәшлек улым Рамаҙан сираттағы һорауын бирҙе:

- Әсәй, был донъяла иң нығы һин кемде яратаһың?

- Һине һәм апайыңды, - әсәйҙәрҙең яуабы әҙер инде.

- Юҡ, иң-иң-иң нығы?

- Һине, апайыңды, атайыңды... - тағы нимә әйтергә икән тип уйланып алам.

Улым яуап менән тулыһынса ҡәнәғәт түгел әле.

- Юҡ, әсәй, тағы ла нығыраҡ, сәпсим ныҡ итеп кемде яратаһың? - ҡуйманы бит был малай. Донъяла уларҙан да нығыраҡ итеп, беренсе урынға ҡуйырлыҡ итеп кемде яратырға мөмкин икән? Эйй, таптым бит яуап! Ниңә ҡапыл онотоп торам һуң әле? Бер нәмәне лә Аллаһтан өҫтөн яратырға ярамай, хатта балаларҙы ла, тип әллә нисә ҡат уҡығаным бар бит инде.

- Аллаһты... - тинем улыма.

- Шунан?

- Үҙемде... - был хаҡта ла беләм бит инде. Үҙеңде яратмайынса тороп, бер кемде лә яратып, бәхетле итеп булмай. Был яуаптар малайыма шул хәтлем ҡыҙыҡ тойолдо шикелле, ауыҙы ҡолағына етте.

- Шунан кемде ныҡ яратаһың? - улым барыһын да һанатып сығырға теләне шикелле.

- Шунанмы? Атайыңды. - Ирәнде балаларыңа ҡарағанда нығыраҡ яратырға кәрәк, тип күп яҙалар. Ваҡыты еткәс, балалар осоп сығып китә, ә һин тормош иптәшең менән күҙмә-күҙ ҡарашып ултырып ҡалаһың, шуға күрә, иң яҡын кешең ул булырға тейеш!

- Шунан?

- Һине һәм апайыңды!

Сират, ниһайәт, үҙҙәренә еткәс, уғата шатланып китте бәләкәсем.

- Шунан?

- Үҙемдең атайым менән әсәйемде...

- Шунан?

Беҙ бик оҙаҡ барланыҡ яратҡан кешеләрҙе. Мин яратҡан кешеләр үҙенә лә таныш булғас, сикһеҙ ҡыуанып, күҙҙәре йылтлап китә Рамаҙандың. Ҡәртәсәһе менән бабайатаһы, Зөлифә апайы менән Мәүлитйән еҙнәһе, Рәфис ағайы менән Нурия еңгәһе, Юлдаш ағайы менән Лиана еңгәһе, Луиза апайы менән Фидан еҙнәһе, Илдус ағайы, Әлфиә апайы менән Руслан еҙнәһе һәм Динә, Айгүзәл һылыуҙары, Аҫҡар, Тимерйәр ағайҙары, Алтынмәргән, Ансар, Сәйфулла, Кәрим, Ибраһим ҡустылары.... Яратҡан, яҡын кешеләренең күмәк булыуын тойоу ҡайһылай ҙа күңелле икән! Ә бит исемлек бының менән генә тамамланмай. Дуҫтар, күршеләр, коллегалар, уҡытыусылар ҙа бар бит әле! Был оло бәхеттең үҙе түгелме һуң!

Ғөмүмән, бала өсөн яратыу иң беренсе урында. Гүйә, донъя тик мөхәббәттән генә торорға тейеш. Улар беҙҙең дә тик яратыуға сорналып йәшәүебеҙҙе теләй. Бәләкәстәр хатта ташларға кәрәккән ҡағыҙ ҡумтаны ла ҡәҙерләп уйната, уны тормошоноң ниндәйҙер өлөшөнә әйләндереүе ихтимал.

Яңыраҡ ҡыҙымдың бесәйенә ҡарата һөйөүен күреп аптыраным. Ҡайны саҡта, бесәйҙе ауылға алып ҡайтып ҡуйырға кәрәк, ҡала фатирында йонсой шикелле, тигән һүҙҙәр ысҡындырғылайым. Ҡыҙым был хаҡта уйланып йөрөгәндер инде, нисәләр көн үткәс, күңеленең иң төпкөлөнән сыҡҡан һүҙҙәрен әйтте. Мин быны тойҙом, тетрәндем. "Әсәй, бесәйемде ҡайҙалыр алып китһәгеҙ, мин бер ваҡытта ла көлмәйем дә, йылмаймайым да, уйнамайым да, ашамайым да..." Мин хатта илай яҙҙым. Экзюпериҙың "Бәләкәй принц" әҫәрендәге юлдар иҫкә төштө: "Одни только дети знают, чего ищут. Они отдают всю душу тряпичной кукле, и она становится им очень-очень дорога, и если ее у них отнимут, дети плачут..."

Бәләкәстәрҙең хатта уйынсыҡтарына, йорт хайуандарына ҙур һөйөү менән ҡарауы күнел ҡылдарына тейә. Ә атай-әсәйҙәрен, туғандарын, дуҫтарын нисек ярата улар! Улым яратҡан кешеләренең исемлегенә дуҫы Заһирҙы индермәй ҡалғаны юҡ. Йөрәктәре ҙур балаларҙың. Күҙ алдына килтерегеҙ: бесәй юғалтҡанға ҡайғырған бала атаһы йә әсәһе китеүен нисек кисерә? Ниндәй генә булһа ла йылы тойолған тыуған йортонан айырып, балалар йортона тапшырһалар, ниндәй уттарҙа яна? Был бит уларҙың йөрәген йолҡоп алыуға тиң.

...Улымдың яратыу тураһындағы һорауы бик урынлы булды әле. Беҙгә, ололарға ла, ҙур йөрәкле булыу мөмкин икән. Егет һәм ҡыҙ мөхәббәтенән дә бөйөгөрәк мөхәббәттәр бар был донъяла.

Гөлсинә ЙОСОПОВА.

*✓ Рәфис хәҙрәттең көнитмеше - башҡаларға матур өлгө. Ҙур хужалыҡ алып бара ауыл имамы ғаиләһе. Аты барҙың ҡанаты бар, һыйыры барҙың һыйы бар, тиҙәр. Байморатовтар ҡанатлы ла, һыйлы ла.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРЕН БУЯҒЫС ТА...
## хәүеф сығанағымы?

■ Көҙгөләге сағылышығыҙ үҙегеҙгә оҡшамай башлаһа, йәшәү рәүешен үҙгәртергә ваҡыт еткән, ти белгестәр. Мәҫәлән, бер юлы бер нисә эште башҡарыу стресҡа алып килә. Сөнки был осраҡта үҙең менән ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо арта, ә ул ирекле радикалдар барлыҡҡа килеүенә йоғонто яһай. Тәм-том яратыу ҙа насар ғәҙәт. Артыҡ килограмдарҙан тыш, ул тышҡы ҡиәфәттә сағылыш табасаҡ. Шәкәр молекулалары протеин һәм майҙарҙы үҙенә тарта. Был процесс тиренең тәбиғи ялтырауын, тонусын юғалтыуға, шулай уҡ һырҙарға алып килә. Матур булып ҡалырға теләүселәр шәкәрҙе йәшелсә-емеш, бал менән алыштырырға тейеш. Даими рәүештә йоҡо туймау ҙа ғүмерҙе ҡыҫҡарта. Һәр кеше тәүлегенә ете сәғәт ял итергә тейеш. Британия ғалимдары шулай уҡ ултырып эшләүселәрҙе лә хәүеф төркөмөнә индерә. Бер сәғәт ултырып телевизор ҡарау ғүмерҙе 22 минутҡа ҡыҫҡарта, ти улар. Компьютер артында ярты сәғәттән күберәк ултырырға тура килһә, 30 минут һайын тороп, хәрәкәтләнеп алырға кәрәк.

■ Балаларҙың иртәнге ашында аҡһым мотлаҡ булырға тейеш, тип белдерә Пенсильвания университеты диетологтары. Уларҙың фекеренсә, иртән углевод ашаһаң, тиҙерәк асығаһың һәм төшкө ашта артыҡ калория йыяһың. Тикшеренеүҙәрҙә 8-10 йәшлек балалар ҡатнашҡан. Уларға һәр береһенең дөйөм энергетик ҡиммәте 350 калория булған өс төрлө иртәнге аш тәҡдим ителгән. Бынан һуң балалар уйнаған һәм төшкө ашты тағы ла һайлап алған. Иртән аҡһымдан торған ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүселәр углевод ашаусыларға ҡарағанда төш мәлендә яҡынса 4 процентҡа аҙыраҡ ашаған. Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар өсөн 4 процент бәләкәй һан түгел, ти белгестәр һәм баланың иртәнге ашына күберәк иғтибар бирергә саҡыра.

■ Америка ғалимдары ҙур һорау менән файҙаланылған ирен буяғыс төрҙәрен тикшереп, ирен буяғыс ҡулланыу һәм ашҡаҙан яман шеше үҫеше араһында туранан-тура бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Тикшереүҙә ҡатнашҡан һәр өлгөнөң составында ҡурғаш, хром, кадмий, алюмин кеүек ауыр металдар булған. Әгәр ҙә бындай ирен буяғыс менән гел ҡулланһаң, онкологик сир барлыҡҡа килеү ихтималлығы ла арта. Ирендәрҙең нескә тиреһе хром һәм башҡа токсик матдәләрҙе һеңдерә, шул рәүешле организм ағыулана. Ғалимдар хәҙер косметик сараларҙың составын контролдә тотоу өсөн нормаларҙы яңынан ҡарарға кәрәк, тип билдәләй. Евросоюзда бындай нормалар ҡатыраҡ, әммә Рәсәй баҙарына төрлө, шул иҫәптән хәүефле продукттар ҙа инә. Белгестәр раҫлауынса, ирен буяғыс ҡына түгел, шампунь, дезодорант кеүек саралар ҙа сәләмәтлеккә зыян килтерә.

■ Макгилла университетында ғалимдар баш мейеһенең төрлө тауыштарға реакцияһын тикшереп ҡараған. Эксперимент өсөн өс эмоция - ярһыу, шатланыу, һағышланыу алынған. Тикшеренеүҙәрҙә 25 кеше ҡатнашҡан, улар билдәле бер тауыштар буйынса кешенең эмоциональ торошон билдәләргә тейеш булған. Шатланыуҙы таныуы иң еңеле булған. Шул уҡ ваҡытта ярһыу менән һағышланыуҙы айырыуы ауыр, әммә баш мейеһендә кеше ярһыған саҡта айырыуса оҙайлы әүҙемлек барлыҡҡа килә.

ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!

# МИҘАЛ ИКЕ ЯҠЛЫ:
## береһе яҡшы, икенсеһе ҡапма-ҡаршы



**Тормошобоҙҙо эшҡыуарлыҡ өлкәһенән тыш күҙ алдына ла килтереп булмай хәҙер. Евросоюз һәм АҠШ тарафынан Рәсәйгә ҡарата индерелгән санкциялар, импортты алыштырыу мәсьәләһе киҫкен торғанлыҡтан, был өлкәне үҫтереүгә дәүләт тарафынан да айырыуса ҙур иғтибар бүленә. Шул арҡала эшҡыуарҙарҙың роле лә үҫә бара. Тик миҙал ике яҡлы булған кеүек, бында ла шундай һорау тыуа: эшҡыуарҙар эшмәкәрлегенән ябай халыҡ файҙа күрәме? Сөнки, ни тиклем генә үкенесле булмаһын, бөгөн эшҡыуарҙарҙың күбеһе күләгәлә ҡалып, "өрәк" булып йәшәүҙе хуп күрә.**

### 240 мең "өрәк" ҡайҙа йәшәй?

Былтыр Башҡортостанда 240 мең кешенең рәсми рәүештә теркәлмәй эшләүе асыҡланған. Ә инде Рәсәй буйынса һүҙ йөрөтһәң, күрһәткестең тағы ла ҙурыраҡ булыуы күренә. Мәҫәлән, ике йыл элек Рәсәй үҙенең 22,5 млн кешеһен "юғалтҡан". Был кешеләр социаль страховка системаһында ла, Пенсия фондында ла теркәлмәгән, взностар түләмәгән, шул арҡала уларҙың ҡайҙа, нимә менән шөғөлләнеүе лә билдәһеҙ ҡалған. Илдең 20 төбәгендә үткәрелгән социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Рәсәйҙәге яҡынса һәр туғыҙынсы кеше үҙенә эшләй, был эшкә яраҡлы кешеләрҙең 41проценты, йәғни 30 млн тигән һүҙ. Дәүләт уларҙың ысынында күпме аҡса эшләгәнен дә белмәй. Ике йыл элек Рәсәй халҡының дәүләт органдарына күрһәтмәй генә 4,8 трлн һум аҡса эшләгәне билдәле булған.

Хеҙмәт һәм социаль мөнәсәбәттәр академияһы проректоры Александр Сафонов бөтә илдәрҙең дә хеҙмәт баҙарында "күләгә" булыуын, әммә бындай уҡ ҙур дәрәжәгә етмәүен билдәләй. Эшҡыуарҙар үҙҙәре был хәлде, ҙур суммала һалым һәм башҡа төр страховка взностары түләгәндән һуң ҡулға килем ҡалмай, шуға күрә күптәр ҡасып-боҫоп эшләргә мәжбүр, тип аңлата. Социологтар белдереүенсә, күләгәлә ҡалыу ҡайһы бер урта ҡатлам кешеләренә әллә ни уңышлы булмаған иҡтисади көрсөк ваҡытында тотороҡлоҡ һаҡларға, ярлыларға әҙме-күпме аҡсаһын экономиялап, осон-осҡа ялғарға ярҙам итә.

### Булмағанда "ҡараһы" ла аҡса

Илдә оптималләштереү тулҡыны башланып, иҡтисади көрсөк үҙ эҙемтәләрен күрһәтә башлағас, күп кенә ойошма-предприятиелар ябылды, ҡыҫҡартыуҙар башланды. Яңы ғына эшкә төшөп, тәжрибә лә туплап өлгөрмәгән юғары белемле белгестәр урамда ҡалды. Улар теләһә лә, теләмәһә лә, бизнес өлкәһенә барып баш эйергә мәжбүр булды. Ә был иһә бөгөнгө еңел булмаған иҡтисади шарттарҙа нисек булһа ла тотороҡлоҡ һаҡларға тырышҡан бизнес әһелдәренә ҡулай ғына булды.

"Конверттағы эш хаҡы", "күләгәле бизнес"тың ил иҡтисады өсөн яҡшы булмаған эҙемтәләре хаҡында әленәнәле һөйләп, аңлатып торһалар ҙа, ватандаштарыбыҙ нисек уңайлы, шулай эшләргә тырыша. Шуға күрә улар рәсми теркәлеп, закон буйынса эшкә урынлашыуға әллә ни әһәмиәт бирмәй. Иң мөһиме, эшкә алһындар, ваҡытында әҙме-күпме аҡсаһын түләп торһондар. Ҡайһы берәүҙәр "күләгә"лә эшләүҙе лә үҙенсә файҙаланып ҡалырға тырыша. Мәҫәлән, бер ерҙә рәсми теркәлеп эшләүҙән тыш, икенсе урынға йәшерен урынлашып, өҫтәмә аҡса алыусылар ҙа бар, сөнки уларҙың ике урында эшләүен бер кем дә белмәйәсәк. Ә ҡайһы берәүҙәре был юлға иртәгәге көнгә ышаныс булмауҙан бара, сөнки улар бөгөнгө эш хаҡының киләсәк пенсияға йоғонто яһарына ла, хаҡлы ялға сығып, лайыҡлы пенсия алырына ла ышанмай. Ундайҙар, иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын, принцибы менән, пенсияға әллә етәм, әллә юҡ, тип, бөгөнгө көн менән йәшәргә тырыша.

### Аҡса булһа ине бер муҡса

Эшҡыуарҙар дәүләттең бөгөнгө һалым сәйәсәте менән бөтөнләй риза түгел, улар уны ныҡ юғары һәм ғәҙел түгел тип һанай. Шуға күрә улар һалымдан ҡасыуҙың, килемдәрен эконо-

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ИЗГЕ МОРАТТАРҒА БАЙ УҘАМАН



**Һәр тарафта өлгөр кешеләр хайран итә. Сөнки донъя эштәренә лә етешеү, рухи өлкәне лә онотмай, тигеҙ алып барыу анһат түгел, үҙе бер сәнғәт. Быға өлгәшә алған бәхетлеләрҙән булған Учалы районы Һәйтәк ауылы имамы Рәфис Байморатов менән таныштырғы килә "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙы.**

Рәфис хәҙрәттең һәр көнө тәүге ҡояш нурҙары ергә ҡағылғансы башлана. Иртәнге намаҙ уҡып, тәсбих әйткәс, оҙаҡ итеп доға ҡыла. Яҡындарының именлек тураһындағы теләктәрен еткерә Хоҙайға, ә иң ялҡынлы хыялын, иң ҙур үтенесен һәр саҡ эстән ҡабатлай: "Эй, Раббым, милләттәштәремдең йөрәктәре иман нурын ҡабул итһен, халҡым ғәмһеҙлек йоҡоһонан уянһын, үҙ илебеҙҙә ата-бабаларыбыҙ рухтарын ҡыуандырып, күркәм тормош ҡороп йәшәргә насип итһәң ине..."

Сәғәҙәтле йәшәйешкә илткән юлдарҙы күреү һәләтенә эйә Рәфис Яуымбай улы. "Тыуған ерҙә төпләнеп, тәбиғәт бүләктәрен аҡыллы файҙаланып, бил бөгөп, тир түгеп ғүмер итергә кәрәк", - ти ул. Күңел түрендә йөрөткән маҡсаттарының береһе - иманлы, рухлы, илһөйәр башҡорттарҙың экологик ауылын барлыҡҡа килтереү. Тағы бер яҡты хыялы - эскелек, эшһеҙлек һәм башҡа заман афәттәренән яфа сиккәндәргә ярҙам ҡулы һуҙып, реабилитация үҙәге булдырыу. Ул үҙәктә бәләгә тарыған ирҙәр хеҙмәт, дини белем һәм тәрбиә, ышаныс һәм өмөт аша үҙҙәрен ҡулға алып, тормоштарын рәткә килтереп, йәмғиәттең лайыҡлы ағзалары булыуға өлгәшер ине, ти ул.

Рәфис хәҙрәттең көнитмеше - башҡаларға матур өлгө. Ҙур хужалыҡ алып бара ауыл имамы ғаиләһе. Аты барҙың ҡанаты бар, һыйыры барҙың һыйы бар, тиҙәр. Байморатовтар ҡанатлы ла, һыйлы ла. Һауын һыйырҙарын, бер өйөр йылҡы малын, ҡош-ҡортто аҫрауҙа хәҙрәттең хәләл ефете Зөлфирә ханым һәм өс балаһы ҡатнаша. Күмәкләшеп бесән дә эшләйҙәр, бергә ултырып билмән дә бөрәләр. Ҡаланың хәләл ризыҡ магазинында егәрле ғаиләнең сифатлы аҙыҡ-түлеген яратып һатып алалар.

Рәфис хәҙрәттең иркен өйөндә ҡунаҡтамын. Аш бүлмәһенең бер стенаһына Ҡөрьән сүрәләре яҙылған ҡағыҙҙар беркетелгән. Балалары ятлаһын өсөн махсус элеп ҡуйған уларҙы Рәфис Яуымбай улы. Был йәһәттән би-

миялауҙың төрлө юлдарын таба һәм был йәһәттән ҙур ғына уңышҡа өлгәшә. Ә инде эш хаҡын "ҡара ведомость" менән конверттарҙа түләү иң таралған юлдарҙың береһе. Һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, бындай юл менән 87 процент Рәсәй компанияһы эшмәкәрлек алып бара. Эш биреүселәр өсөн бындай алым күпкә файҙалыраҡ. Мәҫәлән, улар конвертта эш хаҡы биреп, страховка взностарында, НДФЛ-да экономиялай. Улар өсөн бер генә хәүеф бар - Хеҙмәт һәм мәшғүллек буйынса федераль хеҙмәт тарафынан штраф һалыныуы. Әммә әлегә тиклем береһенең дә штраф түләгәне лә, быға зарланғаны ла юҡ. Был йәһәттән ныҡлы контроль булмауы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡта ҡара һәм һоро эш хаҡын булдыра ла инде. Бынан иһә әлеге лә баяғы шул ябай хеҙмәткәр зыян күрә. Күп кенә эш биреүселәр, "аҡ" эш хаҡы түләгән осраҡта бөтә социаль иҫәпләүҙәр, һалымдар хеҙмәткәрҙең үҙ елкәһенә һалына, тип алдарға маташа. Был, әлбиттә, улай түгел. Һалым һәм төрлө йыйымдар эш биреүсенең һәм уның бухгалтерияһының бурысы. Ул 13 процентан тыш, эш хаҡынан башҡа бер тин дә тотоп алып ҡала алмай. Пенсия, страховка, медицина страховкаһы фондтарына һәм бәхетһеҙлек осраҡтары өсөн взностарҙы эш биреүсе үҙ иҫәбенән түләргә тейеш.

Шулай ҙа ҡартлығын йәки иртәгәге көнөн уйлағандар ҙа күбәйә бара. Мәҫәлән, 2009 йылда "ҡара" эш хаҡына ризалашыусылар һаны 60 процент булһа, һуңғы 6 йылда был хәл 19 процентҡа кәмегән. Бөгөн 41 процент кеше генә эш хаҡын конвертта алырға риза, 35 проценты быға ҡырҡа ҡаршы, ә 24 проценты икеләнә. "Ҡара" эш хаҡына эшләргә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 1,5 тапҡырға күберәк ризалаша. Рәсми булмаған эш хаҡына 24-35 йәшлектәр һирәгерәк, ә 35-44 йәшлектәр күберәк ризалаша.

### Һай-ли күләгә, бәрәүгә лә һөйләмә...

Һалым ставкаларының ҡырҡа артыуы арҡаһында бизнес өлкәһенең 70-80 проценты хеҙмәт хаҡын түләү буйынса күләгәле схемаға күсте. Эшҡыуарҙар ҙур ризаһыҙлыҡ белдереп, тауыш күтәреп ҡараһа ла, Хөкүмәт һалым ставкаларын кәметмәү яғында. Финанс министрлығы Иҡтисади үҫеш министрлығының, ставканы кәметергә, тигән тәҡдименә лә ризалыҡ бирмәй. Финансистар ставканың 2 генә процентҡа кәмеүен дә 200 миллиард доллар менән баһалай һәм дәүләт ҡаҙнаһы шул тиклем аҡсанан ҡолаҡ ҡағасаҡ, тип бара. Шулай ҙа киң даирәләге ризаһыҙлыҡҡа күҙ йомоп ҡалманылар, ставканы төшөрөп, саҡ ҡына кәметергә мәжбүр булдылар. Әлбиттә, был ғына ташлама эшҡыуарҙарға әллә ни еңеллек килтермәне. Шуға ла улар был хәлдән сығыуҙың икенсе юлын тапты. Һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, респонденттарҙың 24 проценты - 9 процент, 13 проценты - 70-79 процент, 3 проценты иһә бөтә эш хаҡын да конвертта түләүен белдергән. Һандарға күҙ һалһаң, Хөкүмәттең һалым ставкаларын арттырыуы дөрөҫ сәйәсәт булдымы икән тип тә уйлап ҡуяһың.

Ун ике йыл буйы "ҡара" эш хаҡы алыусы Дамир һөйләй: "Ниндәйҙер талаптар ҡуйып, законға нигеҙләнеп эш итә торған заман түгел. Шунлыҡтан, эш биреүсеңдең намыҫын да, хаҡлығын да тикшереп тормайһың, бары тик ваҡытында аҡсаһын түләһен, эштән сығарып ебәрмәһен, тип, күҙ йомаһың да эшләйһең. Хоҡуҡтарымды боҙаһың, тип ҡайһы иҫәре даулашып йөрөһөн? Оҡшамай икән, ана бара юлың, ишек төбөндә әллә күпме кеше сират көтөп тора".

Фатирын ҡуртымға биреүсе Зәлифә һөйләй: "Беҙҙәге закондар хайран ҡалырлыҡ инде ул. Көслөләр, бәйләнеше булғандар законды ла үҙ яғына бора белә. Ябай халыҡ ҡына закон барлығын белһә лә, бер ни ҡыйрата алмай. Ә һалым түләтеүҙәрен бөтөнләй аңламайым да, аңларға ла теләмәйем. Мин фатир һатып алғанда Хөкүмәт миңә аҡса бирҙеме, ниндәйҙер ташлама яһанымы? Ниңә эшләп, ыҙалап тапҡан йортомдоң мәнфәғәтен күрмәҫкә тейеш әле мин? Өс тин эш хаҡы алып, ваҡытында һалымын, коммуналь хеҙмәттәрен түләп барғанға рәхмәт әйтһендәр әле. Фатирға кеше индереп алған аҡсаны ла ана шул түләүҙәр өсөн тотонам бит. Бер ҙә диңгеҙ буйына ял итергә аҡса йыймайым. Инде шуны ла таларға торғастар, ни әйтәһең? "Яҡшы күңелле кешеләр" фатирын ҡуртымға бирә тип, һалым инспекцияһына ла ошаҡланы. Беҙ ҙә артыҡ төшөп ҡалғандарҙан түгел. Адвокат менән кәңәшләштем. Ул мине, һинең фатирыңда кем йәшәүен, уның өсөн аҡса түләйме, юҡмы икәнен кем иҫбат итә ала, аҡсалары күп булһа, әйҙә, судҡа бирһендәр ҙә, әллә күпме ваҡыттарын, нервыларын бөтөрөп йөрөһөндәр, тине".

Эш хаҡын конвертта алыусы Рәүфә һөйләй: "Ирем дә, үҙем дә инде бына 10 йыл шәхси эшҡыуарҙа эшләйбеҙ. Эш хаҡын, әлбиттә, конвертта алабыҙ. Отпускыға сыҡмайбыҙ, больничный түләнмәй. Етмәһә, кәрәк ваҡытта көн һорап та алып булмай. Көнөң шәхси эшҡыуарҙарға ҡалғас, ҡалайтаһың, балаларҙы үҫтерергә, уҡытырға кәрәк. Ризаһыҙлыҡ белдерһәң, шунда уҡ эшеңдән кәмселек таба башлайҙар, штраф менән янайҙар. Эш хаҡынан тотоп алып ҡалған штрафтарҙың иҫәбе-хисабы ла юҡ инде ул. Дәүләт яҡлай, закон бар, тип әйтеүҙән ни файҙа? Хөкүмәт беҙгә аҡса бирәме лә, эшкә аламы? Элек китаптарҙан ғына уҡып белгән байҙар һәм ярлылар тормошо бына ошолай була икән ул".

**Бына ошондайыраҡ фекерҙәр ишеттерҙе беҙгә замандаштарыбыҙ. Хөкүмәт ниндәй юлдар менән "өрәктәрҙе", "ҡара" ведомостарҙы бөтөрөр, әлегә билдәһеҙ. Был йәһәттән Хеҙмәт министрлығына ла уйланаһы урын күп әле. Бөгөн көнүҙәк булған был мәсьәләнең, һис шикһеҙ, хәл итеү юлын табырҙар, тип ышанайыҡ, сөнки бынан айырым кешеләр генә түгел, тотош илебеҙ зыян күрә, әллә күпме социаль-иҡтисади проблемаларыбыҙ хәл ителмәй ҡала. Ябай халыҡ та үҙенең киләсәгенә, буласаҡ пенсияһына ышанып, хоҡуҡтары менән файҙаланып йәшәргә тейештер бит инде...**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

герәк тә кинйәләре Илнур уңыштары менән һөйөндөрә ата-әсәне - 10 йәшлек малай намаҙ тәртибен тулыһынса белә, былтыр Өфөлә уҙған Ҡөрьән уҡыусылар конкурсында 3-сө урын яулаған.

Ҡунаҡ бүлмәһендә торған велотренажерҙы күреп, йылмаям: "Спорт менән дуҫһығыҙ икән". Хужабикә яуап ҡайтара: "Балаларға алып бирҙе аталары. Ҡышын компьютерға әүәҫләнеп китәләр. Талап шундай: 15 минут компьютер артында ултырырға, 15 минут тренажерҙа шөғөлләнергә тейештәр". Атай кешенең тағы бер талабы: ғаиләлә тик туған телдә аралашырға, туған телдә китаптар, матбуғат баҫмалары уҡырға. "Биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмай, дин талап иткән бар фарыздарҙы үтәгән, ләкин туған телен белмәгән мосолман маңҡорттан миңә башҡортса һөйләшеп, телебеҙ өсөн йән атҡан кеше, ғибәҙәт ҡылмаһа ла, яҡыныраҡ", - ти Рәфис Яуымбай улы.

Яҙ етеү менән Рәфис хәҙрәт комбайн руле артына ултыра. Көҙөн-ҡышын мәктәптә кочегар булып эшләй. Кәрәк булғанда, ир-егеттәрҙе бригадаға берләштереп, мәсеттәр төҙөү менән дә булыша Һәйтәк имамы. Үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан, намыҫлы, һәр эште еренә еткерергә ғәҙәтләнгән Рәфис Яуымбай улының шәхси проекттары буйынса әле теге, әле был ауылда йә манара күтәрелә, йә яңы ғибәҙәтхана ҡалҡып сыға.

Байморатовтар элек-электән атайсалы ҡотон яралтҡан ил ағалары нәҫеле. 1814 йылда уҡ Рәфис хәҙрәттең ҡарт бабаһы Яуымбай Ҡыҙырғәлин Һәйтәктә тәүге иман йорто һалдыра. 1937 йылда дин әһеле ҡулға алынғас, мәсет магазинға әүерелә. Дәһрилек заманының ҡәһәрле елдәре тымғас, ауыл халҡы рухи ҡәғбә булдырыу теләге менән яна башлай. Йыйылышта магазин бинаһын кире ҡайтарырға булып та китәләр. Рәфис хәҙрәт быға ҡаршы төшөп, күптән ҡарап ҡуйған йәтеш бер урынды күрһәтә. Ауылдаштар тәҡдимен хуплап, дәррәү эшкә керешә. 2010 йылдың 17 июнендә аллаһыҙлыҡ ҡараңғылығын яҡтыртҡан йондоҙ һымаҡ, "Зөһрә" мәсете асыла. Балаһыҙ йортҡа ҡот ҡунмаҫын белгән Рәфис хәҙрәт мәсет ихатаһында уйын майҙансығы ҡороуҙы ла хәстәрләй. Йәш быуын мәсет соланында һаҡланған роликтар, скейтбордтар, туптарға саң ҡундырмай. Ҡышын үҫмерҙәр имам артынан саңғыла йөрөргә лә сығалар. Ә бит бөтә был эшмәкәрлек өсөн имамға берәү ҙә түләмәй. Киреһенсә, газ, яҡтылыҡ квитанцияларын ҡаплар өсөн йыш ҡына йыйылған хәйер-саҙаҡаларға үҙ кеҫәһенән сығарып өҫтәргә мәжбүр була хәҙрәт.

Ә шулай ҙа былтырғы йәй көтөлмәгән һөйөнөс килтерҙе: Санкт-Петербургта йәшәгән Марат Мөхәмәтов зәкәтен әсәһенең тыуған ауылы мәсетенә индерергә ҡарар итә. Рәфис хәҙрәт аҡсаны күптәнге ниәтен тормошҡа ашырыуға йүнәлтә - балалар өсөн йәйге лагерь ойоштора. Халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, тарихы менән яҡындараҡ танышып, Ислам нигеҙҙәрен өйрәнеп, ҡыҙыҡлы уйындар уйнап, тәмле итеп туйынып, файҙалы ял итә ҡыҙҙар һәм малайҙар. Ҡалҡан күленә ике көнлөк походҡа ла йөрөп киләләр. Дини тәғлимәт менән бергә "Урал-батыр" эпосын өйрәнеү программаның төп йүнәлешен тәшкил итә.

Йырҙан йырға күсһен өс бөйөк зат -

"Динем, халҡым, илем" - был Рәфис хәҙрәттең өс бөйөк идеалы. "Минең эшмәкәрлегемдән бер күңелдә булһа ла иман саҡкыһы пәйҙә була икән - ҡыуанырмын", - тип тә өҫтәй ул. Минеңсә, был ҡараш Мостай Кәрим әйткәне менән ауаздаш:

*Күктә бер ҡошсоҡ һайраһа,*
*Бар йыһан хайран, тимен,*
*Ерҙә бер кеше йылмайһа,*
*Ер йөҙө байрам, тимен.*

**Альбина ҒӘЛИЕВА.**
**Учалы ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер

### Ысынбарлыҡты ҡабул итеү

Әгәр үҙегеҙҙең ысынбарлыҡҡа ҡаршылашыуығыҙҙы аңламаһағыҙ, был ҡаҡшатыусы ғәҙәттән бер нисек тә арына алмаясаҡһығыҙ. Һәр саҡ әйберҙәрҙе һәм ваҡиғаларҙы "насар" һәм "яҡшы", "дөрөҫ" йәки "яңылыш", "ғәҙел" - "нахаҡ" тип баһалау ихтыяжы тоясаҡһығыҙ. Булғандың йөҙөнә тура ҡарауҙан баш тартып, был донъяла бөтөн нәмә һеҙгә ҡаршы, тип уйлаясаҡһығыҙ, үҙегеҙ уйлап сығарған һәм шулай булырға тейешле тип күҙаллаған донъяғыҙға бикләнәсәкһегеҙ.

Беҙҙең менән булған нәмәләр аныҡ хәл-торош йәки кешенең ысынбарлығына ҡаршылыҡ күрһәтеү әүҙемлеге кеүек үк мөһим түгел. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, тойғоларығыҙҙы һәм хистәрегеҙҙе контролләргә хәлегеҙҙән килмәһә лә, уйҙарығыҙҙы һәм реакцияларығыҙҙы контролдә тота алаһығыҙ. Күрәһең, хәл-торош ысынбарлығы һеҙгә оҡшамай, ләкин уны ҡабул итергә тейешһегеҙ. Шулай итеп кенә ғәмәлдәрегеҙҙе һәм реакцияларығыҙҙы контроллəй аласаҡһығыҙ.

Ысынбарлыҡҡа ҡаршылашыу баш ауыртыу, йөрәк ауыртыу, үҙеңде насар тойоу, дошманлыҡ һәм ғаилә проблемалары сәбәбе икәнен аңлау өсөн аҡыл эйәһе булыу кәрәкмәй. Ысынбарлыҡҡа ҡаршылашыуҙан туҡтаһағыҙ, һирәгерәк асыуланасаҡһығыҙ, һирәгерәк сирләйәсәкһегеҙ, башҡаларға ҡарата кире ҡараш булмаясаҡһығыҙ, ул ғына ла түгел, бынан ары һеҙҙе бер кем дә үпкәләтә, тәнҡитләй йәки түбәнһетә алмаясаҡ.

Субъектив баһаның емергес көсө. Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең боҙолоуы - уларға үҙегеҙҙең ҡиммәттәрегеҙҙе көсләп тағырға тырышыу. Тирә-яҡтағыларҙың үҙебеҙ күҙаллағанса дөрөҫ, ғәҙел, ыңғай һ.б. йәшәүен теләйбеҙ. Әгәр улар талаптарыбыҙға буйһонмай икән, асыуланабыҙ, аңламайбыҙ, уларҙың Аң кимәле бөтөнләй икенсе икәнлеге тураһында уйлап та ҡарамайбыҙ. Һеҙ шуны аңларға тейеш: әгәр кеше Аңы үҙгәрештәрҙе ҡабул итергә әҙер түгел икән, уларҙың ҡиммәттәренә, күҙаллауҙарына, инаныуҙарына йоғонто яһай алмайбыҙ. Тирә-яҡ мөхитте һеҙгә яҡшыраҡ итеү өсөн бер кем дә үҙгәрергә тейеш түгел. Кешеләр йәнегеҙгә тейергә, асыуландырырға мөмкин, әммә бындай реакция һәр кемдә тыумай, был проблеманың уларҙа түгел, ә һеҙҙә икәнлеген раҫлай. Һеҙ сит ысынбарлыҡҡа ҡаршылашаһығыҙ, сөнки донъяны нисек бар - шулай түгел, ә үҙегеҙ теләгәнсә күрергә теләйһегеҙ. Тап шунда субъектив баһа тыуа ла инде.

Субъектив баһаларҙан баш тартыу өсөн стимул булып, башҡа нәмәләрҙән тыш, түбәндәге белем тора: яҡшы менән насарҙың, дөрөҫ һәм ялғандың, ғәҙел һәм нахаҡтың барлыҡ субъектив баһалары нигеҙһеҙ, сөнки һәр ҡайһыбыҙ ошо ваҡыттағы Аң кимәле буйынса ғына эшләй. Был юлдарҙы иғтибарлап уҡығыҙ! Улар һеҙҙең Аңығыҙҙың бер өлөшөнә әйләнһен. Әгәр яҙғандарҙы ахырынаса аңлаһағыҙ, үҙегеҙгә лә, башҡаларға ла субъектив баһа биреүҙән азат буласаҡһығыҙ. Кешеләрҙе нисек бар - шулай ҡабул итергә өйрәнһәгеҙ, улар ҙа һеҙҙе шулай ҡабул итер һәм яратыр. Уларҙың башҡа юлы юҡ! Яратыу һәм ратылыу сәнғәтенең сере - башҡаларҙы яманлауҙы туҡтатыу!

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨФӨ БАЛАЛАРЫ СӘКӘН ҺУҒА -

## ҡар-буран тип тормай...

**Бөтөн ил Ватанды һаҡлаусылар байрамын ҡаршылаған иртәлә Өфөнөң Зәки Вәлиди урамының 3-сө йорто янындағы хоккей ҡумтаһында Киров һәм Ленин райондарының иң көслө хоккейсы балалары һәм үҫмерҙәре 4-се йыл рәттән уҙғарылған турнирға йыйылды. Турнирҙы ҡарарға Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, БР премьер-министр урынбаҫары Владимир Нагорный, СССР-ҙың атҡаҙанған спорт мастеры, донъя чемпионы Александр Семак килде.**



Үҙ микрорайондарында беренселекте яулаған 8 команда ике төркөмдә беренселек өсөн көс һынашты. Өфө ҡала округы хакимиәте, Киров һәм Ленин райондары хакимиәттәре тарафынан ойошторолған күркәм ярыш Башҡортостан "Юлдаш" телеканалының киң билдәле спорт комментаторы Азамат Моратовтың көр тауышлы сәләме менән башланды. "Урам хоккейы"на ла КХЛ уйындарындағы һымаҡ комментарий биреп була икәненә инандырҙы был шәхес. Башҡортсалап, "Ана, Азамат Моратов менән фотоға төш", тип, хоккейсы кейемендәге улын комментатор яғына әйҙәүсе бер атай кешенең артынан эйәрәбеҙ. Улының уйынын ҡарарға килгән Руслан Байғужин атлы атай икән. Уның улы Искәндәр Киров районының "Восход" клубында шөғөлләнә. "Улыбыҙҙы спортҡа көсләп ылыҡтырманыҡ, йорт эргәһендәге майҙансыҡта иптәштәре менән бергә йөрөп, хоккейына ла, футболына ла үҙе бирелеп китте", - тип башланы һүҙен Руслан ағай. Искәндәр менән үҙе лә сәкән һуғып килеүҙән баш тартмай, ял ваҡыттарында элекке һабаҡташтары менән кистәрен хоккей уйнауҙы ла ғәҙәт иткән Руслан Байғужин. Искәндәр әле баш ҡаланың 3-сө гимназияһында бишенсе синыфта белем ала. Ул да атаһы һымаҡ төҙөүсе, дөрөҫөрәге, архитектор булырға хыяллана. Искәндәрҙең тәрбиәсеһе, "Восход" балалар һәм үҫмерҙәр клубы тәрбиәсе-уҡытыусыһы Нурия Ғәлина әйтеүенсә, "Восход"тар район, ҡала ярыштарында йыл һайын ҡатнаша.

- Беҙҙең команда ысын мәғәнәһендә урам командаһы. Дәғүәселәребеҙ, Рәсәй дәүләт социаль университеты командаһы, беҙҙән яҡшыраҡ уйнаны, моғайын, улар күнекмәләрҙе лә күберәк үткәндер. Бөгөнгө ярыштың әһәмиәте шул - ул физкультура, спорт менән ҡыҙыҡһыныусы балаларҙы бер-береһе менән таныштыра, ярыштыра, сәмләндерә, уларҙа еңеүгә ынтылыш тыуҙыра. Мәҫәлән, беҙҙең команда бөгөн икенсе урын алып ҡыуанды, ә уйынсыбыҙ Ринат Ибраһимовҡа "Иң яҡсы һаҡсы" тигән маҡтаулы исем бирелде, барыһына ла иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды, - тине ул.

"Восход" менән "РДСУ" алышын күҙәтеүселәр һуңғы команда составында бик сос уйнаусы ике ҡыҙ кешегә иғтибар итмәй ҡалмағандыр. Зарина менән Ксения исемле ҡыҙҙар һаҡта ла, һөжүмдә лә уңышҡа өлгәште. "Егеттәр был ҡыҙҙарҙы ҡолата төкөп ҡуймаһа ярар ине", - тип, йәлләп ҡарап торолдо. Уйын тамамланғас, ҡыҙҙарҙың береһе менән һөйләшеп тә алдыҡ. Үҙ көсөнә ышанған көслө рухлы ҡыҙ булып хәтерҙә ҡалды Ксения Алпатова. "Ышаныслы итеп хоккей уйнау өсөн нимә кәрәкме? Белмәйем. Мин үҙем футбол яратам. Шул да ярҙам итәлер. Йәйен-ҡышын урамда малайҙар менән йә туп тибәбеҙ, йә сәкән һуғабыҙ", - тине ул. Уның һүҙҙәрен командалашы Булат Аманғолов та йөпләп ҡуйҙы. Ул да футбол ярата икән.

Бәләкәйҙәр төркөмөндә беренселекте "РДСУ" командаһы яулаһа, өлкәндәрҙән Киров районының "Аврора"һы менән Ленин районының "Рәхәт" командалары сәкәнгә-сәкән килде һәм тәүге урын "Рәхәт" тарафынан яуланды. Хәйер, еңеү рәхәт кенә бирелмәне, быны барыһы ла күрҙе. Ярыш алдынан "Аврора"сы Эмиль Әминев әйтеүенсә, "Рәхәт"тәр "Салауат Юлаев" хоккей командаһы вариҫтары икән. "Беҙ "Рәхәт"тәр менән бер ерҙә шөғөлләнәбеҙ, улар көслө дәғүәсе", - тине Эмиль. Уның менән һүҙҙе дауам итеп, хоккей менән шөғөлләнер өсөн нимәгә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк, тип ҡыҙыҡһындыҡ. Ул дөрөҫ туҡланыу кәрәклеген әйтте.

Ярыштың иң күңелле, иң тулҡынландырғыс мәлендә, яуланған урындарҙы әйтеп, еңеүселәргә бүләктәр биреү тантанаһында, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һуңғы ике йыл эсендә бөтәһе 23 хоккей ҡумтаһы сафҡа индерелеүен, киләсәктә тағы кәмендә һигеҙ тиҫтәгә яҡын майҙансыҡ эшләнәсәген белдерҙе. Ул йәнә спорт һөйөүсе балаларға бәхеттәр, уңыштар теләне.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮҘӘРҘӘН БАШЛАНДЫ

**Континенталь хоккей лигаһының сирекфинал уйындарын Өфөнөң "Салауат Юлаев" хоккей командаһы үҙ боҙонда ут күршеләр - "Аҡ Барс"тар менән осрашыуҙан башланы. 22 февраль көнө үткән тәүге алышта юлаевсылар аҡ барстарҙы 4:1 иҫәбенә ҡыйратһа, 24 февралдәге алыш та ҡыҙыу башланып, ике команданың да ныҡлығын һынаны һәм юлаевсылар йәнә отҡороraҡ, етеҙерәк, көслөрәк булып сыҡты. Был осрашыу юлаевсылар файҙаһына 5:2 иҫәбе менән тамамланды.**

Был осрашыуҙа Өфө хоккейсылары Александр Логинов, Денис Бодров, Олег Сапрыкин, Николай Прохоркин һәм Денис Хлыстов айырылып торҙо һәм дәғүәселәр ҡапҡаһын уңышлы яуланы.

Киләһе ике осрашыу Ҡаҙанда үтәсәк. Әгәр юлаевсылар еңеүле аҙымдарын әкренәйтмәһә, "Аҡ барс" менән осрашыу дүрт еңеүҙән һуң тамамланасаҡ. Әгәр ҙә хужалар үҙ майҙанында инициативаны ҡулдан ысҡындырмаһа, "ут күршегә йөрөү" дауам итәсәк әле. Юлаевсыларҙың был осрашыуға тиклемге биш уйында ла еңелмәүен иҫәпкә алғанда, өмөт бар. Шулай ҙа тәжрибәле көйәрмәндәр "Аҡ Барс"тың былай ғына еңелмәҫен - теше-тырнағы менән һөжүм итәсәген фаразлай. Ваҡыт күрһәтер.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Февраль - Март (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (20) дүшәмбе | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |
| 1 (21) шишәмбе | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |
| 2 (22) шаршамбы | 6:34 | 8:04 | 13:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 3 (23) кесе йома | 6:32 | 8:02 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 4 (24) йома | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 5 (25) шәмбе | 6:27 | 7:57 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 6 (26) йәкшәмбе | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы Мерәҫ ауылында йәшәүсе

**Нәсилә ДАУЫТБАЕВАны тыуған көнө менән ҡотлайым!**

Бөгөнгөләй көслө рухлы, уңған, кешелекле, ярҙамсыл булып ҡал. Киләсәк тормошонда ныҡлы сәләмәтлек, уңыштар, бәхет-ҡыуаныстар ғына юлдаш булһын, балаларыңдың изгелеген күреп, бәрәкәтле, имен тормошта оҙон ғүмер кисереп йәшә.

**Изге теләктәр менән, Бибисара Азаматова.**

* * *

Февраль айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Рәхилә Мортазина, Йәнекәй ауылынан Нәйлә Нафиҡова, Хәлил ауылынан Фәүҡинур Мусина, **Хәйбулла районы** Яңы Ергән ауылынан Фәниә Шәрипова, Вәлит ауылынан Нәйлә Мостафина, **Краснокама районы** Ҡуян ауылынан Ғәрифә Әхмәтова, **Стәрлебаш районы** Мөхәмәтдәмин ауылынан Рәмзиә Хәмитова, Стәрлебаш ауылынан Мөнирә Әһлиуллина, **Күгәрсен районы** Тәүәкән ауылынан Сәриә Ғәлиева, Мәкүт ауылынан Айгөл Килмөхәмәтова, **Өфө ҡалаһынан** Гөлдәр Хәмиҙуллина, Әхмәткәрим Хәйбуллин, А. Исмәғилева, **Ғафури районы** Красноусольский ҡасабаһынан Ғәлимйән Ишбулдин, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Сурин, **Баймаҡ районы** Ғүмәр ауылынан Зөбәйҙә Үҙәнбаева, Мерәҫ ауылынан Нәсилә Дауытбаева, **Баймаҡ ҡалаһынан** Руфина Зөлҡәрнәева, **Ейәнсура районы** Яңы Павловка ауылынан Зөлиә Әлмөхәмәтова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Ҡояшлы көндәр, аяҙ күктәр, рух ныҡлығы, күңел тыныслығы теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 февраль "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия

**28 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**2 март "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инсц.)

**3 март "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27-28 февраль "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00

**1 март "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

**2 март "Сыңҡылдаҡ себен"** (Р. Ураҡсина), хип-хоп стилендәге әкиәт. Башлана 11.00

**2 март "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 март "Маэстроның күңел сере"** - композитор, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Салауат Низаметдиновтың** хәтер кисәһе. Программала композитор ижад иткән йырҙар, романстар.

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 февраль "Аҙашҡан ҡунаҡ"** (Н. Птушкина), комедия

**28 февраль "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт. Башлана 12.00

**28 февраль "Любимые песни о главном..."** филармония концерты

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ШҮРӘЛЕЛӘР УЙЛАНДЫРА...



**Ошо көндәрҙә Сибай концерт-театр берекмәһе коллективы күренекле драматург Туфан Миңнуллиндың пьесаһы буйынса "Шүрәле - йән кисәгем" спектаклен тамашасы хөкөмөнә тәҡдим итте.**

Спектаклдә кешеләрҙең битарафлығы, ғәмһеҙлеге арҡаһында тәбиғәткә, урманға, унда йәшәүселәргә ҡурҡыныс янауы һүрәтләнә. Әстәлегенә күҙ һалғанда, Йәмилә (Кәҙриә Ҡотлөмбәтова) исемле ҡыҙ иптәштәре менән урманға ял итергә килгәс, йәштәрҙең тыйнаҡһыҙлығын, үҙ-үҙен тотошон ҡабул итә алмай, айырылып китә һәм... әкиәт донъяһына барып юлыға. Унда ул шундай һөйкөмлө Шүрәлене (Динар Зәйнуллин) осрата һәм улар бер-береһенә ғашиҡ булалар. Йәмиләне эҙләргә сыҡҡан иптәштәре лә, әкиәт донъяһына эләгеп, Шүрәле, Шурик, Шурка, Шүрәлиә, Шүрәлинә кеүек урман әйәләре менән ҡуҙмә-ҡуҙ осраша. Ауыл йәштәренән айырмалы рәүештә, урман шүрәлеләренең үҙҙәрен тотошо, зауыҡлы кейемдәре, кешеләргә ҡарата әҙәплелеге һоҡланыу тойғоһо уята.

Улар менән танышҡандан һуң мәңге айнымаған Рим (Илнур Сәфәров), тәкәббер Нәсимә (Азалия Ғәлиәхмәтова), үҙ-үҙенә ышаныысын юғалтҡан Рәсимә (Рәсимә Хәйбуллина), үҙен генә яратыусы ҡала егете Исфин (Юлдаш Юлдыбаев) донъяға икенсе күҙлектән ҡарарға, үҙҙәренең был тормоштағы тәғәйенләнеше тураһында уйланырға мәжбүр була.

Башҡортостандың халыҡ артисы Вәкил Йосопов сәхнәләштергән был лирик музыкаль комедия тамашаһы күңелен көслө динамикаһы, мауыҡтырғыс сюжеты, сәхнә күренештәренең тиҙ алышыныуы менән йәлеп итә һәм бер тынала ҡарала. Быға өҫтәп, йәш актерҙарҙың уйнау оҫталығы, рәссам Лүзә Байейгетованың уңышлы биҙәлеш алымдары, композитор Хисмәтулла Дәүләтовтың көй-йырҙары спектаклгә сағыу төҫ һәм биҙәк өҫтәй.

**Әминә ЯХИНА.**

# "УРАЛ МОҢО"НА КИЛЕГЕҘ!




**12 мартта Өфөлә Төрки йәштәрҙең "Урал моңо" халыҡ-ара конкурс-фестиваленең һайлап алыу туры уҙа. Унда Башҡортостан башҡарыусылары ғына ҡатнаша.**

**Финал "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале сиктәрендә 26-28 майға билдәләнгән.**

Конкурсҡа ҡатнашырға теләүселәр 11 мартҡа тиклем ойоштороу комитетына ғариза бирергә, шулай уҡ видеоклип, алдан һайлап алыу өсөн туған телдәге ике әҫәрҙең фонограммаһын һәм йырҙар тексын тапшырырға тейеш. Ҡатнашыусы мотлаҡ милли кейемдә сығыш яһай. Ғаризалар Өфө ҡалаһы, 3. Биишева урамы, 17/2 адресы буйынса ҡабул ителә. Телефон/факс: (347) 289-62-00. Электрон почта: gukrcnt@mail.ru.

"Урал моңо" конкурсы тәүге тапҡыр 1991 йылда башҡорт йәштәренең республика конкурс-фестивале булараҡ үткәрелә. 1995 йылда бөйге халыҡ-ара (шул уҡ йылда Ҡабарҙа-Балҡар Республикаһынан "Алмасты" төркөмө Гран-приға лайыҡ була ) статусы ала һәм төрки йәштәрҙең халыҡ-ара музыкаль ижад конкурс-фестиваленә әүерелә. Конкурс-фестивалдең төп маҡсаты - төрки йәштәренең заманса милли музыкаль ижадын пропагандалау, төрки халыҡтарҙың милли гөрөф-ғәҙәттәрен һәм мәҙәниәтен һаҡлау, улар араһында милләт-ара мәҙәни бәйләнештәрҙе үҫтереү, йәш башҡарыусыларҙың ижади мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыу, йәштәрҙең ялын ойоштороу.

# НЕМЕЦТАР БАҺАЛАНЫ



**Германияның Лейпциг ҡалаһында Нәсүр Йөрөшбаевтың "Атайымдың тауышы" һәм "Ике тоткон: Жәүәт менән Вальтер" документаль фильмдары күрһәтелде.**

Сараны Йәһүдтәрҙең ижтимағи үҙәге һәм фильмдарҙың авторы - Германияла йәшәүсе башҡорт режиссеры Нәсүр Йөрөшбаев ойошторҙо. "Фильмдарҙы ҡарарға абруйлы кешеләр - докторҙар, профессорҙар, сәнғәт эшмәкәрҙәре, матбуғат вәкилдәре килде. Кинотаҫмалар бер кемде лә вайымһыҙ ҡалдырманы. Фильмдар тамамланғас та байланған ҡыҙыу бәхәстәр ошо хаҡта һөйләй. Был үҙем өсөн дә көтөлмәгән хәл булды", - тип һөйләне Нәсүр Йөрөшбаев.

Тамашасылар фильмдарҙың сифатын, йөкмәткеһе ҡыҙыҡлы булыуын билдәләне һәм режиссерға бүләктәр бирҙе.

"Ике тоткон: Жәүәт менән Вальтер" фильмы былтыр Нәсүр Йөрөшбаевтың Германиялағы "Gaina Media" студияһы менән берлектә "Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән һәм Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған. Режиссер тотҡонлоҡҡа эләккән немец менән башҡорттоң тормошон сағыштырып һүрәтләй. Тәүге фильм 2014 йылда халыҡ-ара "Көмөш Аҡбуҙат" милли һәм этник кино фестивалендә ҡатнашты.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хикәйәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАТЫРҒА...

## баҡтансы кәрәкмәй

Төҙәмәйенсә атҡан уҡ бәхетһеҙҙең башына төшөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер хакимдың берҙән-бер генә улы була. Хаким уны үҙенең вариҫы буласаҡ, ил менән идара итәсәк, тип хыяллана. Ләкин улы вариҫлыҡтан баш тарта һәм атай йортон ташлап китә. Уның артынса һәм улының кире ҡайтырына өмөтләнеп, хаким, балалар атай йортон ташламаһын, тигән фарман сығара. Ләкин улы әйләнеп ҡайтмай. Бер саҡ хакимға бер ҡатын килә һәм уландарының ниндәйҙер бер юлсыға эйәреп, йортто ташлап сығып китеүе тураһында белдерә. Хаким был ҡатындың балаларын тотоп килтерергә бойора. Фарман тураһында ишетеп, ул ҡатындың уландары хакимдың һарайына үҙҙәре килә. Улар эргәһендә ҡатын әйткән баяғы юлсы ла була.**

**- Беҙҙең әсәйебеҙ аҙғын тормош менән йәшәне, беҙ хатта атайҙарыбыҙ кем икәнен дә белмәйбеҙ. Әсәйебеҙҙең беҙҙе ҡарарға, ашатырға ла ваҡыты булманы, ул үҙен башҡолло аҙғынлыҡҡа арнаны. Беҙ үҙаллы үҫтек һәм үҙебеҙҙең юлдарға ла үҙебеҙ һайларға тейешбеҙ, - ти ҡатындың улдары.**

**- Һеҙ әсәйегеҙ янына ҡайтырға тейешһегеҙ - минең бойороғом шул, - ти хаким.**

**- Ишетеүебеҙсә, һеҙҙең улығыҙ ҙа һарайҙы ташлап киткән. Уның был ҡарарына нимә сәбәпсе булды икән һуң? - тип һорау бирә ҡатындың улдары. Хаким был һорауға яуап бирергә әҙер булмай һәм үҙенең вәзирен ярҙамға саҡыра. "Улымды алыҫҡа ил гиҙергә ебәрҙем", тип әйт, ти вәзире. Хаким шулай тип яуаплай ҙа.**

**- Ишетеүебеҙсә, - тип һүҙгә ҡушыла юлсы, - һинең улың атаһының әхлаҡи сифаттары кешелек нормаларына ла, хакимдарҙың идара итеү ҡағиҙәләренә лә тап килмәй икәнен белгәс, бик аптыраған һәм асыуланған. Хакимдар бит Аллаһы Тәғәләнең Ерҙәге илсеһе. Ләкин һеҙҙең улығыҙ күргән, аңлаған нәмәләр бер нисек тә Хоҙай илсеһенең юғары статусына тап килмәгән. Уның үҙенә лә шундай уҡ вазифа йөкмәтеләсәк икәнен аңлаған улығыҙ был һарайҙан ҡасырға мәжбүр булған...**

**Ниндәйҙер юлсының уның һарайындағы хәлдәрҙе белеүе хакимды аптырауға һала һәм ул нисек яуап бирергә белмәйенсә, тағы ла вәзиренә төбәлә. "Хакимдың тормошо тураһында бер кем дә бер нисек тә белә алмай, тип әйт", ти вәзире. Хаким шулай тип яуаплай ҙа.**

**- Әйе, сит кеше был һарайҙағы хәлдәрҙе белә алмай. Ләкин мин һинең улың һәм мин хакимдың ниндәй эштәр менән булғанын беләм. Һин кылғандар был егеттәрҙең әсәһе ҡылғандарҙан бер нисек тә айырылмай, - тип, баш кейемен сисеп, үҙен таныта юлсы.**

**-Һин мине ниндәйҙер фәхишә менән сағыштыраһыңмы? - тип ҡысҡыра хаким.**

**- Һин идара иткән батшалыҡта фәхишәлек сәскә ата һәм һин уны тыйыу өсөн бер ни ҙә эшләмәйһең икән, тимәк, ул сифат һинең үҙеңдә лә бар, - ти хакимдың улы. - Бындай юл минең рухыма тап килмәй, шуға ла мин фәхишәлектәрҙән азат булған юлды һайланым...**

**Хаким да, уның вәзире лә вариҫҡа ҡаршы бер нәмә лә әйтә алмай. Хакимға ҡатындың уландарын ебәреүҙән, ә улына ситкә сығып китергә рөхсәт итеүҙән башҡа сара ҡалмай..."**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# СИРЛӘГӘНДӘ...

## баткаҡ та дауа

- Ҡул - ҡулды, ике ҡул битте йыуа.
- Кәләшләнһәң - ҡауышҡанда сафлығы, донъя көткәндә таһыллығы булһын.
- Насар эш әрләтә, тәмһеҙ аш сәсәтә, нахаҡ һүҙ әрнетә.
- Сирләгәндә батҡаҡ та дауа.
- Иманлы өй нурланыр, иманһыҙы боҫланыр ҙа, боҙланыр.
- Эшһөйәргә барһаң, эш ҡәҙерен, сәсәнгә барһаң, һүҙ ҡәҙерен аңларһың.
- Баҫһаң, өҙә баҫ, әйтһәң, һеңгәҙәтә әйт.
- Саҡырған ҡунағыңдың холҡон бел - табын хозурын боҙмаһын.
- Йүнһеҙгә ҡарауҙан күҙеңде, ялған ишетеүҙән ҡолағыңды, нахаҡ рәнйетеүҙән телеңде һаҡла.
- Яҡшыны ҡарғама - яманға тартыр, көнөң уға ҡалыр.
- Яҙғы ҡояш йылыта, йәйгеһе яндыра ла һулыта, көҙгөһө һүлпәнәйтә, ҡышҡыһы ҡалтырата - кеше ҡылығы ла шуға тин.
- Наҙан ғалим күп беләм, тип маҡтана, аҡыллыһы бер ни белмәйем, тип аҡлана.
- Ярма бутҡаһы туйындыра, тел бутҡаһы биҙҙерә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ҺҮҘЛЕК



# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Ҙур шылтырауыҡ үлән** - погремок большой
**Ҙур юл япрағы** - подорожник большой
**Зелпе** - бересклет бородавчатый
**Зәғфран** - шафран
**Зәйтүн ағасы** - дерево оливковое
**Зәңгәр сәскә** - василек голубой
**Зәңгәр умырзая** - голубой подснежник, пролеска
**Зәһәр лютик** - лютик едкий
**Иген баҡраһы** - куколь посевной
**Иген клеверы** - клевер посевной
**Иген кәрешкәһе** - горошек посевной
**Иген тармаһы** - конопля посевная
**Ике өйлө күрән** - осока двудомная
**Илағут** - дербенник, плакун-трава
**Имбер** - имбирь
**Имән** - дуб
**Иренсәскә** - чистец болотный
**Ирис үләне** - ирис, касатик
**Ирәүән, бесәй үләне** - валериана лекарственная

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танылҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирҙәр:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» ауаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 337/02